ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21-27 октябрь (карасай) 2023

№41 (1083)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Палестиндар үҙ ерендә ҡалырмы?



2-3

Балаларҙың... күп тел белеүе лә мөһим



5-6

Үҙҙәре һайлаған яҙмыш



8-9

Һәр кем күҙ һалһын... тарихи тамырҙарына



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы баҫмабыҙға 857 һум 04 тингә 2024 йылдың беренсе яртыһы өсөн дә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ЫШАНЫС КӘМЕМӘЙ

**Ҡағыҙға баҫылған гәзит күп быуаттарҙы үҙ эсенә алған тарихҡа эйә. Нәҡ улар ярҙамында кеше яңылыҡтарҙы белгән һәм башҡа мәғлүмәт менән танышҡан. Бөгөнгө көндә лә, тормошобоҙҙа электрон сығанаҡтар күп урынды алһа ла, аҡҡа ҡара менән яҙылған гәзит һәм журналдар көнүҙәклеген юғалтмай. Республикабыҙҙа ла бихисап ваҡытлы матбуғат баҫмалары донъя күрә. Уларҙың һәр ҡайһыныһы үҙ урынында кәрәкле һәм һәр береһе үҙ уҡыусыһын күптән тапҡан. Ошо күптөрлөлөк араһында ла башҡаларҙан айырылып торған гәзит бар - ул минең яратҡан баҫмам "Киске Өфө".**

Күпселек ваҡытлы матбуғат берәмектәре актуаль мәғлүмәтте киң йәмәғәтселеккә еткереүсе ролендә генә йәшәй. Ә "Киске Өфө" иһә теге йәки был ваҡиға тураһында һөйләп кенә ҡалмай, ә аналитик мәҡәләләргә ҙур урын бүлә. Ошо рәүешле ул гәзит уҡыусыла бөгөнгө көнүҙәк теманың тарихта тотасаҡ урыны тураһында фекер йөрөтөргә этәргес бирә. Күп ваҡыт беҙ илдә, үҙебеҙҙең республикала барған хәл-ваҡиғаларҙы "Киске Өфө"лә нисек баһалауҙары, анализлауҙары аша ҡабул итергә өйрәнгәнбеҙ.

Гәзит үҙ уҡыусылары менән аралашыуға асыҡ, һәр саҡ ҡырҡыу мәсьәләләрҙе күтәрә, уҡыусыларҙың төрлө һорауына төплө яуаптар бирә, уҡыусылар араһында төрлө конкурстар, һорау алыуҙар, фекер алышыуҙар уҙғара.

"Киске Өфө" - ижтимағи-сәйәси-мәҙәни гәзит булараҡ теркәлгән баҫма. Әлеге мәлгә тиклем гәзит был өс өлкә араһындағы тигеҙлекте яҡшы һаҡлап килде һәм үҙен уҡыған төрлө ҡатлам кешеләренә, йәштәргә һәм ололарға ҡыҙыҡлы булып ҡала алды. Артабан да шулай уҡ дауам итеүенә шигем юҡ. Ниндәй баҫмаға ла, тәү сиратта, үҙ уҡыусыһының ышанысын юғалтмау мөһим. Уны яулауы ғына түгел, ә тотоп ҡала белеү ҙә ҙур көс талап итә. "Киске Өфө" гәзите редакцияһы был мәсьәләне уңышлы хәл итә.

Баҫма беҙҙең республика тормошонда мөһим, конструктив роль уйнай, ул йәмғиәтте берләштереүсе, халыҡты дәртләндереүсе, яңы идеялар менән бүлешеүсе гәзит. Тағы ла оҙаҡ йылдар уның беҙҙең менән булыуын теләп ҡалам.

**Тимербикә СӘЛИМОВА.**




*Ғафуриҙар былар.*

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# БУШЛАЙ ЯРҘАМ



**Башҡортостанда оҙайлы ваҡыт өлкән йәштәгеләр һәм инвалидтарҙы ҡарау мөмкинлеге тыуасаҡ. Республика Хеҙмәт министрлығы мәғлүмәте буйынса, хәҙер өлкән йәштәгеләр һәм инвалидтарҙы ҡарау федераль ҡаҙна иҫәбенә тулыһынса бушлай башҡарыласаҡ.**

Бынға тиклем оҙайлы социаль хеҙмәттәр фәҡәт Өфөлә һәм төбәк ҡаҙнаһы иҫәбенә, тик шул осраҡта ла һәр саҡта ла бушлай атҡарылмай ине. 2024 йылда ярҙамға мохтаждарҙы оҙайлы ҡарау программаһы бөтөн Рәсәй буйынса бойомға ашырыла башлаясаҡ. Хеҙмәт министрлығынан белдереүҙәренсә, йорт эштәрендә ярҙамсылар аҙнаһына - 24, ә көнөнә, ял көндәрен дә иҫәпләп, 4 сәғәт эшләйәсәктәр. Аҙнаға ике тапҡыр килеп, көнкүреш йомоштарын башҡарыусы социаль хеҙмәткәрҙәрҙән улар шуныһы менән айырыласаҡ. Үҙҙәренең йөрөй алмаған туғаны йә яҡынын ҡараусылар хәҙер хеҙмәт стажына эйә булып, эш хаҡы аласаҡ. Бының өсөн бушлай уҡыу курсы үтеп, Халыҡты социаль хеҙмәтләндереү үҙәгенә эшкә урынлашырға була. "Ярҙамға мохтаждарҙы ҡарау" вазифаһына һөнәри әҙерлек программаһы буйынса производствонан айырылып 37 сәғәт уҡырға кәрәк, шуның 10 сәғәте - теория, 25 сәғәте ғәмәли күнекмәләр. Уҡыу ваҡыты - 5 көн. Өҫтәмә мәғлүмәттәрҙе йәшәгән урындағы социаль хеҙмәт бүлектәре аша, Социаль хеҙмәтләндереү үҙәгенән 8 (800) 775-00-14 телефоны буйынса шылтыратып алырға мөмкин.

**Анастасия ДРУГОВА.**

*БАШ ҠАЛАМ*

# ҮҘ ЙӨҘӨ БАР

**Ер йөҙөндә, интернет мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 3 миллионға яҡын ҡала бар. Уларҙың һәр береһенең үҙ йөҙө, булмышы һәм йәшәйеше. Шулар араһында Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы Өфө, бәлки, әллә ни күҙгә эленеп тә бармайҙыр, ләкин беҙҙең өсөн ул иң матуры һәм күңелгә яҡыны.**

Ошо ҡалала тыуып һәм әле булһа яҙмышым Өфө менән бәйле булыуына шатланып бөтә алмайым. Эшем буйынса әллә ниндәй ҡитғаларҙа һәм илдәрҙә, бихисап эре ҡалаларҙа булырға тура килә. Тик һәр ваҡыт Өфөмә ашҡынып, һағынып ҡайтам. Уның бөтә райондарын, урамдарын беләм кеүек, ләкин һәр ваҡыт үҙем өсөн ниндәйҙер яңы үҙгәреш асам, сөнки ҡала йылдан-йыл үҫә һәм киңәйә.

Миңә айырыуса балаларға ҡарата булған иғтибар оҡшай. Мәҫәлән, полилингваль мәктәптәр эшләй башланы, ЮНЕСКОның ассоциацияланған мәктәптәре лә уңышлы эшмәкәрлек алып бара, шулай уҡ ҡаланың төрлө райондарында яңы мәктәптәр асыла. Әле бына август башында ғына Миловка урамында 1225 урынлыҡ мәктәп өсөн нигеҙ бағаналары ҡаға башланылар. Эш ҡуҙғалды һәм ул тиҙерәк тамамланып, балалар өсөн үҙ ишектәрен асһын.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

*✓ Ҡайһы бер етәксе вазифа биләп ултырыусыларҙың ҡарттар хаҡында әйтеп ысҡындырған ҡайһы бер төптә аҡылһыҙ һүҙҙәре, әгәр улар ысын булһа, пенсионерҙарға һүҙмә-һүҙ килеп етеп тора ул.*



БАШ ҠАЛАМ

# ҮҘ ЙӨҘӨ БАР

**(Башы 1-се биттә).**

Һуңғы ваҡытта Өфөнөң Октябрь районына ҡараған Нуғай ҡасабаһында ла байтаҡ эштәр башҡарыла. Элек йәйәүлеләр Рощин урамында һаулыҡтарын һәм ғүмерҙәрен хәүефкә дусар итеп, машина юлынан атлап йөрөргә мәжбүр инеләр, хәҙер унда тротуарҙар эшләйҙәр. Шулай уҡ Совет урамында ла был йәһәттән эштәр гөрләй. Тағы ла Ә. Лотфуллин, Енеүҙең 65 йыллығы һәм Июль урамдарында ла йәйәүлеләр өсөн махсус юлдар буласаҡ, тип ҡыуаллана.

Киләһе йыл Өфөбөҙ үҙенең 450 йыллыҡ юбилейын билдәләйәсәк. Шуға күрә баш ҡаланың һәр ерендә лә тиерлек төҙөкләндереү эштәре алып барылыуға аптырайһы түгел. Байрам сараларына килгән ҡунаҡтар айырыуса ҡаланың тарихи үҙегенә иғтибар итә, шуға күрә Өфөнөң Ғафури, Пушкин, Свердлов, Аксаков һәм башҡа урамдары урынлашҡан ерҙәрҙә бөгөн эштәр гөрләй. Төрлө юғары уҡыу йорттары, шулай уҡ студент ятаҡтары урынлашҡан урында - Аксаков менән Свердлов урамы киҫешкән ерҙә Валериан Альбанов исемендәге ҡотопсолар музейы уңышлы эшләп килә. Әлеге ваҡытта уның исемендәге скверҙа ла яңы плиткалар түшәйҙәр, бәләкәй архитектура формалары һәм яҡтыртҡыс бағаналар урынлаштыралар. Эштәр тамамланғас, был сквер студенттарҙың ғына түгел, ә ошо яҡта йәшәгәндәрҙең дә, ҡала ҡунаҡтарының да яратҡан ял урынына әйләнәсәгенә шик юҡ.

Өфөлә һаулыҡтары сикләнгәндәр өсөн тейешле шарттар тыуҙырырға тырышалар. Эйе, бәлки, барыһын да ҡуҙ уңында тотоп булмайҙыр, ләкин был йәһәттән башҡарылған эштәрҙе юғары баһаларға була. Мәҫәлән, йәйҙең һуңғы айында Ҡашҡаҙан ял паркында һаулыҡтары сикләнгәндәр өсөн төрлө спорт ярыштары буйынса күнекмәләр уҙҙы. 8 йәштән өлкәнерәк һәр кем еңел атлетика, баскетбол, футбол, гир спортында, дартс һәм коляскала фигуралы шыуыу кеүек спорт төрҙәре менән шөғөлләнеп ҡараны. Ошондай кәрәкле һәм файҙалы сара ойоштороусыларға "Афарин!" тиергә генә ҡала.

Хәҙер бөтә илдәрҙә лә сүп-сарҙы айырым йыйыуға күстеләр. Ысынлап та оҙаҡ йәки бөтөнләй серемәгән әйберҙәрҙе айырым йыйып юҡ итеү бөтә Ер шары өсөн файҙалы. Өфө ҡалаһы хакимиәтенең даими рәүештә халыҡтан ҡулланылған батарейкаларҙы тапшырыу сараһы уҙғарыуы бик мәслихәт. Күптән түгел шул уҡ Ҡашҡаҙанда ял иткәндә ошондай акция барыуын күреп ҡыуандым. Халыҡ батарейка, боҙолған кәрәҙле телефон, электрон техника аккумуляторҙары һәм башҡа электрон әйберҙәрҙе әүҙем генә алып килеп тапшыра ине. Үҙем дә машина ҡумтаһында ятҡан, күптән эшләмәгән батарейкаларҙы алып барып тапшырҙым һәм шунда уҡ ошондай әйберҙәрҙе эшкәрткән махсус компания тураһында белдем.

Ҡыҫҡаһы, Өфөбөҙҙөң артабан да миллионлаған өфөләр һәм Башҡортостан халҡы өсөн яратҡан мегаполис булып ҡалыуын теләйем.

**Дамир ИШБУЛДИН.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# ҠАРТТАР КИТӘ...



## ләкин кәмемәй

**Эйе, ҡарттарҙы беҙҙә яратмайҙар: үкенескә, быны трагизмын, бөтөн яҡтан да ҡотолғоһоҙлоғон үҙең өлкәнәйгәс кенә аңлайһың... Ә йәш саҡта бер заман ундай көн килерен белгән хәлдә лә, бик иҫең китмәй: эшләйһең, донъя көтәһең, балалар үҫтерәһең - ҡыҫҡаһы, ҡартайырға һис ашыҡмайһың, дөрөҫөрәге, был хаҡта уйланырға ваҡытың да, теләгең дә юҡ. Һәм был дөрөҫ тә, сөнки ул тәбиғәт тарафынан кешегә бирелгән һаҡланыу инстинкты, үҙенә күрә страховка, сөнки, әгәр йәштәр ҡартлығын уйлап, бойоғоп ултырһа, донъяһын кем көтәр, үҙенә алмашты кем үҫтерер?**

...Ә шулай ҙа килеп етә ул, ҡартлыҡ - ҡаршылыҡлы һәм сәйер тойолһа ла - бәхетле кешеләргә, тип өҫтәргә кәрәктер, сөнки кемдер ҡартлығын көтөп ала алмай китеп тә бара был донъянан. Айырыуса ир-егеттәр. Уларҙың һаулығын, ғүмерен һаҡлау - шуға күрә лә уларҙың шәхси эше генә түгел, дәүләт бурысы ла, моғайын. Ләкин ошоға тиклем "Ир-егеттәр һаулығын һәм ғүмерен һаҡлау" тигән берәй дәүләт программаһын да, планын да күргән юҡ әле. Киреһенсә, эскелектән, тәмәкенән, юл һәләкәттәренән, ауыр һәм хәүефле эштән ҡырылыусыларға өҫтәп, тегендә-бында хәрби хәрәкәттәр, һуғыш уты сығып ҡына тора....

Ҡарттар ине лә һүҙҙең башы. Эйе, ҡайһы бер етәксе вазифа биләп ултырыусыларҙың, хатта ки хөкүмәт составындағы юғары рангылы халыҡ эҙмышына битараф түрә-ҡараның ҡарттар хаҡында әйтеп ысҡындырған ҡайһы бер төптә аҡылһыҙ һүҙҙәре, әгәр улар ысын булһа (сөнки быға ышаныуы бик ҡыйын), пенсионерҙарға һүҙмә-һүҙ килеп етеп тора ул. Мәҫәлән, социаль селтәрҙәрҙә РФ Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Татьяна Голикованың (унан алдараҡ Иҫәп палатаһы хужаһы булған Алексей Кудриндың, финанс министры Антон Силуановтың), йәнәһе лә, пенсионерҙар һис тә ярлы түгел, улар балаларына, ейәндәренә ярҙам итәләр; малтыуар, ҡош-ҡорт аҫрап, шуны һатыуҙан ҙур килем (?) алған ҡарттарға пенсия түләмәҫкә; пенсия менән өҫтәмә льгота аҡсаһына йәшәп, пенсионерҙар хеҙмәткә ҡыҙыҡһыныуын юғалта, уларҙы льгота түләүҙәренән мәхрүм итергә; пенсия түләүҙе туҡтатырға,

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ПАЛЕСТИНДАР ҮҘ ЕРЕНДӘ ҠАЛЫРМЫ?



**Бына бит донъя хәлдәре ниндәй көтөлмәгән боролош ала. Рәсәйҙе ташлап, Израилгә күсеп киткәндәр ни эшләр хәҙер?**

Йәшерен-батырыны юҡ, бәғзе берәүҙәр киткән ватандаштарыбыҙҙы үсәп бер була. Бынауы миллиардер Фридман менән ҡаҫҡын Чубайс ишеләрҙән көләргә булыр ине лә, уларҙың тәүгеһе "ялт" итеп Рәсәйгә кире ҡайтып та төштө, гонаһ шомлоғо! Һис бер тартыныуһыҙ май ҡояшылай йылмайып. Әлбиттә, кеҫәһе ҡалындың әшнәләре күп, әйтерең бармы - ҡолас йәйеп ҡаршылаҙҙар. Ә бит уның Украина ҡоралы көстәрен финанслап, 150 млн доллар аҡса бүлеүе хаҡында телһеҙ генә һөйләмәй. Ахырҙа, Запорожье өлкәһенән Федерация советы ағзаһы булған Дмитрий Рогозин Рәсәй Тәфтиш комитетына, Генпрокуратураға һәм Федераль хәүефһеҙлек хеҙмәтенә ошо фактты тикшереүҙәрен һорап мөрәжәғәт итте. Ә инде "Роснано" компанияһындағы мутлыҡтары өсөн ҡасып йөрөүсе Чубайстың да Израилдән һыпыртыуы мәғлүм булды.

Туҡта әле, был мөртәттәргә аҡ ҡағыҙ әрәм иткәнсе, донъя хәлдәрен барлайыҡ, булмаһа. Ниҙәр ҡупты, ниҙәр булды Яҡын Көнсығышта үткән аҙнала? Билдәле булыуынса, 7 октябрҙә ХАМАС төркөмө, йәғни Палестинаның "Ислам Ҡаршылыҡ хәрәкәте" (2007 йылдан бирле Газа секторында сәйәси партия булараҡ лидерлыҡ итә. Рәсәйҙә һәм башҡа ҡайһы бер илдәрҙә террористик ойошма булараҡ танылған) тип аталған хәрби көстәр Газа секторынан Израилгә көтмәгәндә һөжүм итте. Ике ил араһында был тәүге генә бәрелеш түгел, улар хәҙер 1947 йылдан алып, БМО Планы буйынса Израиль дәүләте булдырылып, ләкин уның баҫымы арҡаһында ғәрәп дәүләте төҙөлмәйенсә ҡалғандан бирле һуғыша. Газа секторы өлөшләтә Израиль тарафынан баҫып алынған Палестина дәүләтенә ҡараһа ла, айырым территория булып, Урта диңгеҙҙең көнсығыш яры буйлап 40 километрға һуҙылған, киңлеге - 6-12 км, майҙаны 363 кв.км. Был биләмәлә 2 млн кеше йәшәһә, биләмәнең баш ҡалаһы һәм хакимиәт үҙәге булған Газа ҡалаһының үҙендә 600 меңгә яҡын кеше төйәк итә. Хәүефһеҙлек маҡсаттарында Газа биләмәһе Египеттан - тимер-бетон стена, ә Израилдән бөтөн сик буйынса 9 метр бейеклектәге сәнскеле тимер сым кәртәләүе менән бүленеп тора. Израиль менән кәртәләүле сик буйында 6 ил сиге команда пункты урынлашҡан.

Әйтелеүенсә, 7 октябрь Газа секторы яғынан бәрелеш Израилгә көслө ракета уты яуҙырыуҙан башлана. ХАМАС боевиктарының һөжүме Израиль яғын үҙенең көтөлмәгәнлеге менән шаҡ ҡатыра. Был көн Израилдә Йом-кипур байрамын билдәләгән мәлгә (был көн илдә радио ла, телевидение ла, магазиндар ҙа эшләмәй) тап килә. Шул көндөң шаһиты булған Израиль кешеһе һөйләүенсә, "Террористар ысын мәғәнәһендә беҙҙең башҡа, әйтерһең дә, күктән яуҙылар. Парапландарҙа осҡан кешеләр полиция бинаһының ҡыйыҡына килеп төштөләр..." ХАМАС ракеталар, дрондар һәм пехота отрядтары менән ҡатнаш һөжүм башлай һәм меңәрләгән камера, дрондар һәм сик һаҡсылары тарафынан донъялағы иң ныҡ һаҡланыусы Газа секторы сиген йырып, сәнскеле ҡоймаларҙан сығыу юлы яһап, мотоциклдарҙа һәм пикаптарҙа Израиль сик һаҡсылары ҡаршылығын ҡыйратып, Нахаль-Оз хәрби ҡаласығын яулай һәм тағы ла эскәрәк үтеп инергә ынтыла. Палестина отрядтары тиҙҙән Ашкелон менән Сдерот ҡалаларына ла килеп етеп, полицейскийҙарҙы, тыныс

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Уҙған тәүлектә Башҡортостанда коронавирус йоҡтороуҙың 79 яңы осрағы асыҡланған. Хәбәр ителеүенсә, бөгөнгө көндә республикала 118 пациент, шул иҫәптән 66 оло йәштәге кеше стационарҙа дауалана. Ә 958 ауырыу өй шарттарында мәкерле сиргә ҡаршы көрәшә, шуларҙың 432-һе - 60 йәштә үткән. Башҡортостанда коронавирус инфекцияһынан дауаланыу өсөн буш койка фонды 10 процент тәшкил итә.

✓Благовещен районының элекке башлығы, Башҡортостандан сенатор Олег Голов Федерация Советының Федератив ҡоролош, төбәк сәйәсәте, урындағы идара итеү һәм Төньяҡ эштәре буйынса комитетына тәғәйенләнде. "Комитет муниципалитеттар мәсьәләләре менән дә шөғөлләнә, Рәсәйҙең Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы менән үҙ-ара эш итә. Был Башҡортостандың мәнфәғәттәрен яҡлау, республика Хөкүмәте алдында торған мәсьәләләрҙе хәл итеүгә федераль аҡса йәлеп итеү өсөн бик мөһим", - тине Олег Голов.

✓Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге (ВЦИОМ) сәйәсмәндәргә ышаныу, дәүләт институттары эшмәкәрлеген баһалау, партияларға мөнәсәбәт рейтингтары менән таныштырҙы. Ошо мәғлүмәттәргә ярашлы, 2023 йылдың 2 октябренән 8-енә тиклем Рәсәй Президенты эшмәкәрлеген хуплау күрһәткесе 74,9 процент тәшкил иткән. Һуңғы аҙнала Премьер-министрҙың һәм Рәсәй Хөкүмәтенең эшен ыңғай баһалау кимәле 52 процент һәм 49,7 процентҡа еткән. Владимир Путинға ышаныс тураһында һорауға респонденттарҙың 78,3 проценты ыңғай яуап биргән, Михаил Мишустинға иһә 61,2 процент ышаныуын белдергән.

✓Башҡортостандың барлыҡ ҡала һәм райондарында (Өфөнән тыш) капиталь ремонтҡа иғәнәләр берҙәм түләү документына индерелә. Быйыл ноябрҙә республиканың муниципаль райондарында һәм ҡалаларында октябрь айы өсөн капиталь ремонтҡа квитанциялар торлаҡ милекселәренә берҙәм түләү документы формаһында ебәреләсәк. Берҙәм түләү ҡағыҙында капиталь ремонтҡа иғәнә айырым юлда һәм айырым QR-код менән күрһәтелә. Иғәнәнең күләме, тәртибе һәм ваҡыты үҙгәрмәй. Айҙың 10-ына тиклем түләргә. Әгәр капиталь ремонт өсөн иғәнәгә бәйле һорауҙар килеп тыуһа, төбәк операторының 8-800-775-69-77 номерына шылтыратырға кәрәк.

✔ *Элек тукталыш һайын баҫма матбуғат һатылған киоскылар булһа, хәҙер улар урынына аҙым һайын шаурма һатыу нөктәләре икән дә ул. Тимәк, халыҡты ҡорһаҡты тултырыу ғына ҡыҙыҡтыра.*



ҡарттарҙы балалары аҫраһын; пенсия системаһын бөтөрөргә һәм киләсәктә граждандар үҙҙәре эшләп йөрөгән осорҙа буласаҡ пенсияларын үҙҙәре тупларға тейеш һәм башҡа шундай туҙға яҙмаған тәкдимдәр индереп, РФ Дәүләт Думаһында ауыҙ күтәреп сығыш яһап тороусы Голикова ошоға тиклем ни йөҙө менән ҙур вазифа биләп ултыралыр - уныһын хөкүмәт ағзалары менән депутаттар ғына белә. Хәйер, был кешеләр ҙә бит "пенсия түләү өсөн ҡаҙна аҡсаһы күп китә", тигән ҡараштa.

Күпһенмәгеҙ, күп тормам, тигәндәй, илдә һуңғы бер нисә йылда пенсионерҙар һаны күпләп кәмей башланы. Мәҫәлән, 2021 йылда пенсия алыусылар һаны 1 млн, ә инде киләһе йылына, 2022 йылға пенсия алыусы ҡарттар 3 миллионға кәмегән. Росстат иҫәбе буйынса, 2023 йылдың 1 ғинуарына пенсионерҙар һаны 41 млн 78 мең кеше тәшкил иткән булһа, быйыл тәүге ярты йылда улар һаны 404,2 мең кешегә кәмегән. Был хәлде, бер яҡтан, пенсия йәшен кисектереү менән бәйләһәләр (яңы пенсия реформаһына ярашлы, быйыл ҡартлыҡ буйынса пенсияға сығыусы юҡ), икенсе яҡтан, әлеге лә баяғы коронавирус эпидемияһы ла үҙ эшен эшләне. Ләкин Голикова ханым күңелен киң тотһон, уға ҡыуанырға иртәрәк икән әле: быйыл Рәсәй пенсионерҙары һаны ... 1,1 млн кешегә, ә киләһе йыл 570 меңгә артасаҡ! Һәҙемтәлә пенсионерҙар һаны 2024 һәм пландарға 2025-2026 йылдарға Социаль фондтың бюджет проектына күҙалланыуҙа әйтелеүенсә, йомғеһе 43,5 млн кеше тәшкил итәсәк.

Кемдәр улар, пенсионерҙар сафын тулыландырыусылар? Рәсәйҙең яңы территорияһы граждандары - Луганск һәм Донецк халыҡ республикалары, шулай уҡ Херсон менән Запорожье өлкәләре пенсионерҙары икән дә... Әйткәндәй, уларға Рәсәй нормалары буйынса пенсия ошо йылдың 1 мартынан уҡ тәғәйенләнә башлаған. Тимәк, Рәсәй пенсия реформаһының тәүге һөҙөмтәләре юҡҡа сыҡты булдымы инде, тип һораусылар бар. Реформаның бит маҡсаты әлеге лә баяғы пенсионерҙар һанын ғына түгел, Пенсия (хәҙер - Социаль) фондының ҡаҙна ҡытлығын да кәметеү ине. Киләсәктә Рәсәй ҡарттарын нимә көтә, тип борсола бөгөн күптәр. Кемдәр әйтмешләй, ил пенсионерҙарына "социаль аппетиттарын" йүгәнләп торорғамы икән хәҙер? Белгестәр аңлатмаһына ҡарағанда, яңы биләмәләр дөйөм ил иҡтисадын үҫтереүҙә ҡатнашасаҡ һәм һалым түләйәсәк, әлбиттә. Шулай итеп, Социаль фонд ҡаҙнаһына аҡса аҡмаһа ла, тамыр, тип көтәлә. Икенсенән, бирһен Хоҙай, федераль бюджет та бер урында тормаясаҡ, үҫәсәк. Хөкүмәттең планында килемдәрҙе тиҙ арала 30 процентҡаса арттырыу күҙаллана. Тимәк, ҡаҙнаға күсерелеүсе өҫтәмә килем пенсия түләүгә киткән өҫтәмә сығымды ҡаплаясаҡ, тигән өмөт бар, тиҙәр...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

граждандарҙы машинаға тейәп алып китәләр; Израиль һалдаттарын, байтаҡ техника, шул иҫәптән БТР һәм ауыр танкыларҙы ҡулға төшөрәләр.

Әлбиттә, Израиль яғы ла яуапһыҙ ҡалмай: илдә һуғыш хәле иғлан ителә; резерв көстәрҙе мобилизациялау башлана. ЦАХАЛ (Израиль хәрби көстәре) Газа секторының иң күп халыҡ тупланған урындарына төбәп ут аса, ә унда ХАМАС инфраструктураһынан тыш, күп ҡатлы йорттарҙа йәшәүсе тыныс халыҡ та барлыҡ була.

Израиль министрҙар кабинеты ултырышында Газа секторына хәрби хәрәкәтте дауам итергә ҡарар сығарыла. Палестиндарҙың һөжүмендә Израиль Иранды ғәйепләп сығыш яһай, ә ХАМАС үҙ сиратында Палестина дәүләтенең бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәш башлауын белдерә, шул уҡ ваҡытта һөжүмдең иң тәүге сәбәбе ошо йылдың апрелендә Иерусалимдағы Аль-Акса мәсетен ( Ислам донъяһында тап ошо урында Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм күккә ашҡан тип иҫәпләнә) мыҫҡыллағандары өсөн ҡон ҡайтарыу акты тип тә аңлатыуларына, өҫтәүенә, Израиль бер нисә тапҡыр инде ошо уҡ урында Соломон ҡорамы төҙөү хаҡында һүҙ ҡуҙғата. Уйлап ҡараһаң, был да етди сәбәп. Шулай ҙа башланып киткән хәрби конфликттың ысын сәбәптәре тәрәндәрәк ята, әлбиттә.

...15 октябргә Израиль Газа секторын блокадалауҙы дауам итә һәм ошо арҡала Газа секторы ҡатмарлы хәлдә тороп ҡалды: ҡалалар емереклеккә күмелде, тыныс халыҡ Израиль тарафынан алып барылған авиаһөжүмдән ҡасып, ҡаланан ҡалаға ҡасып-боҫоп йәшәргә мәжбүр; электр энергияһы туҡтатылған, һыу юҡ; был Газа секторындағы дауаханалар эшен тотҡарлай. Газа яғынан ҡорбандар һаны 2215-кә етте, шул иҫәптән 700-ләп бала-саға... Миллиондан ашыу кеше үҙ төйәктәрен ташлап ҡасырға мәжбүр булды. Әлеге ваҡытта Израиль тарафынан Газа секторының төньяҡ өлөшөндәге халыҡты тәүлек эсендә көньяҡҡа эвакуацияларға фарман бирелде, ләкин ХАМАС хәрәкәте урындағы халыҡҡа үҙ ерҙәрен ташлап китмәскә өндәп мөрәжәғәт итә. "Палестина халҡының үҙ ерендә йәшәргә тулы хоҡуғы бар, Иордан йылғаһының көнбайыш ярҙарын да, Газа секторын да ташлап, Египетҡа ҡасыу - юҡ!" тигән саҡырыуҙар таратыла. 14-15 октябрҙә генә лә Израиль көстәренең бомбаға тотоуынан Газала тағы 400-ҙән ашыу кеше һәлак булған. Израиль яғынан һәлак булыусылар һаны 1 300 самаһы кеше, улар һәм хәбәрһеҙ юғалғандар араһында 43 илдең граждандары бар тип хәбәр ителә. Ә Израиль ерендә һәлак булыусы Рәсәй граждандары 15 октябргә 16 кешегә еткән, тиҙәр. 17 октябрҙә Израиль тарафынан Газа секторының дауаханаһы авиабомбаға тотолған һәм 800 кеше һәлак булған. Донъяның төрлө ҡалаларында Израилгә ҡаршы протест акциялары көсәйә.

Донъя кимәлендә был бәрелеш ниндәй шаңдау алды? Палестина лидеры Мәхмүд Аббас АҠШ президенты Джо Байден менән телефондан һөйләшкәндә палестиндарҙың Газа секторын ташлап китмәйәсәген әйтә. Шул уҡ кис Израиль премьеры Биньямин Нетаньяху ла Байден менән һөйләшә һәм АҠШ-ҡа ярҙамы өсөн рәхмәт белдерә. АҠШ-тың Дәүләт секретары Энтони Блинкен иһә Яҡын Көнсығыш конфликтына йоғонто яһарға саҡырып, Ҡытай етәкселегенә мөрәжәғәт итә. Лондон ҡалаһында Палестинаны яҡлап, ҙур митинг булып үткән. Сәғүд Ғәрәбстаны ошо конфликт айҡанлы Израиль менән мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыу барышын туҡтатып торорға хәл итә. Был һөйләшеүҙәрҙә АҠШ аралашсы булып сығыш яһай ине. Әйткәндәй, ХАМАС-тың көтөлмәгән ҙур һөжүме Сәғүд Ғәрәбстанының Израиль менән яҡынлашыуына үҙенсәлекле протест булараҡ та ҡабул ителә, сөнки палестиндар ғәрәптәр яғынан ярҙамдың бермә-бер кәмеүе өсөн күптән борсолоу белдерә ине.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# НИҢӘ БИТАРАФБЫҘ?



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

***Руслан БИККИНИН, Өфө ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзаһы, хоҡуҡ белгесе:*** Халыҡтың битарафлығы, йоҡоға талып, уянырға теләмәүе борсой мине. Битарафлыҡ тип тә әйтеп булмай инде был торошто. Тик һәр кем үҙ донъяһы теүәл булһа, башҡаһы менән ҡыҙыҡһынмай йәшәй. Ғөмүмән, тик көнкүреш темалары ғына ҡыҙыҡһындыра беҙҙе һуңғы осорҙа. Шуға ла телевизорҙан шау-шоу ҡарап, "һары матбуғат" уҡып, ҡайҙа ниндәй ғәйбәт, шуны тыңлап йәшәйбеҙ. Ә ниндәйҙер юғары уйҙар, китаптар, классик әҫәрҙәргә иғтибар юҡ. Быны әле техник сәбәптәр арҡаһында машинамды ҡалдырып, бер нисә көн баш ҡала буйлап йәмәғәт транспортында йөйөү йөрөргә мәжбүр булдым һәм быға тиклем артыҡ иғтибар итмәгән бер күренешкә ғәжәпләндем. Элек туҡталыш һайын баҫма матбуғат һатылған киоскылар булһа, хәҙер улар урынына аҙым һайын шаурма һатыу нөктәләре икән дә ул. Тимәк, халыҡты ҡорһаҡты тултырыу ғына ҡыҙыҡтыра.

Был рәүешле, дөйөм масса талабына ғына яуап биреп эш итеү, күмәккә ярарға тырышыу һәр өлкәлә сағыла. Бына, мәҫәлән, бөгөн театрҙарыбыҙҙа ҙур аншлаг менән ҡуйылған ҡайһы бер спектаклдәрҙе генә алайыҡ, уларҙың да йөкмәткеһе түбәнәйә бара бит. Быны режиссерҙар, актерҙар үҙҙәренә үпкә һүҙе итеп ала күрмәһен, ә уйланыу юлдары асылһын, тип кенә әйтәм. Үткән ижади миҙгелдә бер спектаклдең яртыһына тиклем дә ҡарап бөтә алмай, ғәрләнеп сығып китергә мәжбүр булдым, һәм ярай әле атай-әсәйемде алып килмәгәнмен, тип шөкөр ҡылдым. Әҙәбиәт, ижад, сәнғәт алдан йөрөргә тейешме, әллә халыҡмы? Йәғни, бында кем заказсы? Бер яҡтан, халыҡ, тамашасы, уҡыусы - заказсы, ә ижадсылар уларҙың ҡыҙыҡһыныуҙарын тәьмин итергә тейеш кешеләр һымаҡ. Ә бит элек улай хеҙмәтләндереүсе генә булмаған ижадсылар. Совет заманында яҙыусыларҙы хатта "Кеше йәненең инженерҙары" тип атап йөрөткәндәр. Әҙәбиәт һәм сәнғәт халыҡты яҡшылыҡҡа өйрәтергә тейеш, ә уның артынан түбәнлеккә тәгәрәргә түгел. Шул саҡта баяғы әйтеп киткән битарафлыҡ та бер аҙ юҡҡа сығыр, кешелә мин ниндәйҙермен, тирә-яғымда кемдәр, донъяны яҡшыртыр өсөн нимәләр эшләй алам тигән ҡыҙыҡһыныу уяныр һәм уйлана башлар ине. Был инде тормошобоҙҙо ыңғай яҡҡа көйләргә ярҙам итә торған эштәргә юл асасаҡ. Мәҫәлән, ҡануниәтебеҙҙәге "граждандар сходы" тигән төшөнсәгә таянып, үҙебеҙгә кәрәкле ҡарарҙар ҡабул итергә, ошо хоҡуҡ менән ҡулланып, ауылдарҙа йәшәйеште яҡшыртҡан ниндәйҙер ҡарарҙар сығарырға һәм бойомға ашырырға мөмкин. Әлбиттә, юл һала, яңы мәктәп төҙөп ҡуя алмаҫтар, әммә урамдарҙы таҙартыу, сүп-сар ташлатмау, алкоголле эсемлектәр һатыуҙы тыйыу кеүек эштәрҙе атҡарырға була күмәкләп.

Беҙҙең быуын барыбер мәңгелек ҡиммәттәрҙе күңеленә, аңына һеңдереп үҫкән. Ә бөгөнгө балаларға ниндәй нигеҙ һалына? Хатта совет осоронда тәрбиәләнгәндәр ҙә замандың "клиплы фекерләү" тигән "зәхмәтенә" бирешә, оҙон кинолар ҡарай алмай, публицистик мәҡәләләр уҡый алмай икән, йәш быуынға ни ҡала? Ошо хаҡта уйланайыҡ, фекерләү ҡеүәбеҙҙе үҫтерәйек, тик әҙергә-бәҙер йәшәмәйек.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостанда йәшәүселәргә ноябрҙә Халыҡтар берҙәмлеге көнө уңайынан өҫтәмә ял көнө тураһында иҫкә төшөрҙәләр. 2023 йылдың ноябрендә аҙнаһына биш көн эшләгән рәсәйҙәрҙе өс көнлөк ял көтә. Быйыл Халыҡтар берҙәмлеге көнө шәмбегә тура килә, шуға 4 (шәмбе), 5 (йәкшәмбе) һәм 6 (дүшәмбе) ноябрҙә эшләмәйбеҙ. Ә йома, 3 ноябрҙә, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. Ноябрҙә 30 көндөң 21-е - эш, туғыҙы - ял көнө.

✔Башҡортостанда уҡыусыларҙың көҙгө каникулдары 28 октябрҙә башлана һәм 6 ноябргә тиклем дауам итә. Уҡыусылар 7 ноябрҙә генә уҡырға бара, сөнки 4 ноябрҙә Халыҡтар берҙәмлеге көнө билдәләнә. Шулай итеп, уҡыу йылының икенсе сиреге бер көнгә һуңыраҡ башлана. Был турала социаль селтәрҙә Башҡортостандың мәғариф министры вазифаһын башҡарыусы Илдар Мәүлитбирҙин хәбәр итте. Ведомство етәксеһе уҡыусыларға хәүефһеҙлек саралары һәм ҡағиҙәләре хаҡында ла иҫкә төшөрҙө.

✔Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров 2023 йылда "Башҡортостан Республикаһында иң яҡшы участковый", "Башҡортостан Республикаһында балиғ булмағандар эштәре буйынса иң яҡшы инспектор" һәм "Административ кҙәтеүҙе тормошҡа ашырыу буйынса иң яҡшы инспектор" һөнәри оҫталыҡ конкурстарын үткәреү тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Почетлы исемдән тыш, аҡсалата приз фонды ҡаралған. Беренсе урынды алған иң яҡшы ҡала, ауыл участковыйҙарына һәм инспекторҙарына 100 мең һум тапшырыла, икенсе урынға - 75 мең һум, өсөнсө урынға - 50 мең һум.

✔Башҡортостанда тағы 30 ауылда юғары тиҙлекле мобиль интернет барлыҡҡа килде, тип хәбәр иттеләр республика Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән. Һуҙ 100-ҙән алып 500-гә тиклем кеше йәшәгән ауылдар хаҡында бара. Башҡортостан дәүләт идаралығының һанлы үҫеш министры Геннадий Разумикин мәғлүмәттәре буйынса, 10 меңдән ашыу абонент сифатлы интернет менән файҙаланыу мөмкинлегенә эйә. Башҡортостандың 14 районындағы бәләкәй ауылдарҙа интернеттың тиҙлеге артҡан, улар араһында - Ҡорғат, Йәнәхмәт, Күгәрсен-Бүләк, Баҙғыя, Саҡты, Вязовка, Ключи, Яңы Борма, Ермолкино, Әлебай һәм башҡалар.

*ҠЫҪҠАСА*

# ТӘРБИӘСЕЛӘР ЙЫЙЫЛА

**2023 йылдың 31 октябрендә Башҡортостанда мәктәпкәсә белем биреү ойошмалары педагогтарының республика форумы ойошторола, тип хәбәр иттеләр Мәғариф һәм фән министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.** Форумдың төп темалары - мәктәпкәсә белем биреү өлкәһендә дәүләт сәйәсәтенең стратегик йүнәлештәре һәм мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү өсөн берҙәм белем биреү киңлеген булдырыу. "Форум эшендә мәктәпкәсә белем биреү өлкәһендә эшләгән 600-ҙән ашыу хеҙмәткәр ҡатнаша. Улар араһында - фән, мәғариф белгестәре, мәғариф идаралығының муниципаль органдары етәкселәре, шулай уҡ балалар баҡсалары мөдирҙәре, педагогтар һәм тәрбиәселәр", - тип әҫтәнеләр Башҡортостандың мәғариф һәм фән министрлығында. Әйткәндәй, республикала балалар баҡсалары өсөн бала ҡараусы курстарына ҡабул итеү бара. Бала ҡараусы йәки тәрбиәсе ярҙамсыһы һөнәрен бушлай алырға мөмкин. Уҡытыу "Демография" милли проектының "Мәшғүллеккә булышлыҡ итеү" федераль проекты сиктәрендә алып барыла.

✓ Башҡортостан судтарының берләшкән матбуғат хеҙмәте мутлашыу осраҡтарының йышайыуы хаҡында иҫкәртә. Билдәһеҙҙәр суд етәкселеге һәм судьялар исеменән процестарҙа ҡатнашыусыларға шылтырата йәки мессенджерҙарҙа хәбәрҙәр ебәрә. "Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, суд етәкселеге һәм судьялар процеста ҡатнашыусылар менән суд ваҡытында ғына аралаша. Әгәр һеҙҙең телефонға, шулай уҡ Telegram, WhatsApp мессенджерҙарына суд рәйесе, уның урынбаҫарҙары, судьялар йәки суд аппараты хеҙмәткәрҙәре исеменән хәбәрҙәр килә икән, шикле әңгәмәсе менән һөйләшеүҙе туҡтатырға, хәбәрҙәргә яуап бирмәҫкә, банк операцияларын башҡармаҫҡа, һылтанмалар буйынса күсмәҫкә кәрәк", - тип билдәләнеләр матбуғат хеҙмәтендә.

✓ Дәүләт Думаһы депутаттары декреттан ваҡытынан алда эшкә сыҡҡанда йәш ярымға тиклем бала ҡарау буйынса пособиеларҙы һаҡлау тураһында закон проектын ҡарарға йыйына. Был хаҡта Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин хәбәр итте. Документтарҙы профилле комитеттар тикшерә, тине ул. Ә дүшәмбе уларҙы Дәүләт Думаһы Советы ҡарай. "Хөкүмәт индергән закон проекттары хеҙмәт, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре, ғаилә, ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар мәсьәләләре буйынса профилле комитеттарға ебәрелде, - тине Вячеслав Володин. - Дүшәмбе улар Дәүләт Думаһы Советы ултырышына сығарыла, шунда уҡ тәүге уҡыу көнө билдәләнә". Хәбәр ителеүенсә, Рәсәй Хөкүмәте ваҡытынан алда эшкә сыҡҡан осраҡта баланы йәш ярымға тиклем тәрбиәләү буйынса пособиеларҙы һаҡлау тураһында законды Дәүләт Думаһына ҡарауға индергәйне. Закон ҡабул ителһә, ул 2024 йылдың 1 ғинуарынан көсөнә инергә тейеш.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ЕМЕШЛЕ ХЕҘМӘТТӘШЛЕК

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаровҡа Беларусь "Амкодор" холдингының иген таҙартыу-киптереү комплекстарын етештереү заводын төҙөү идеяһы һәм уның 9 ай эсендә ғәмәлгә ашырылыуы өсөн рәхмәт әйтте.**

- Беҙ уны 9 айҙа төҙөргә һүҙ биргәйнек, бына хәҙер завод эшләй, продукция сығара. Бер йылдан республикала 41 мең квадрат метр майҙанда бульдозерҙар, экскаваторҙар, грейдерҙар етештереү заводын төҙөргә вәғәҙә итәләр. Әгәр был тормошҡа ашһа, яҡшы буласаҡ. Һәр ваҡыт республиканың машиналар эшләү тармағында ошондай компетенциялар булыуы хаҡында хыялландым, - тине Радий Хәбиров.

Билдәләнеүенсә, ике-өс йылдан Башҡортостан менән Беларусь араһында үҙ-ара тауар әйләнеше бер миллиард долларға етеүе һәм беҙҙең республика Рәсәйҙә Беларусь менән миллиарды тауар әйләнешенә өлгәшкән етенсе төбәк булыуы ихтимал. Беларусь Республикаһының Рәсәйҙәге илсеһе Дмитрий Крутой "Беларусь-1" телеканалына интервьюһында ошо турала белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, быйыл Беларустың Башҡортостан менән тауар әйләнешенең 500 миллион долларға етеүе көтөлә, ә республикаға экспорт иҫәбен әле үк башҡа илдәр, мәҫәлән, Әзербайжан һәм Төркиә менән сағыштырырға була.

# ЯУГИРҘАР ҠАҺАРМАНЛЫҒЫ



**Башҡортостан Республикаһының беренсе вице-премьеры Азат Бадранов былтырғы йылдың ноябрендә МХО зонаһына үҙ теләге менән хәрби хеҙмәткә киткәйне, әле ул 3-сө армия корпусының сәйәси бүлеге офицеры. Ошо көндәрҙә ул республикабыҙҙың бер төркөм журналистары, яҙыусылары, мәҙәниәт, сәнғәт эшмәкәрҙәре, фән һәм йәмәғәтселек вәкилдәре менән осрашты.**

Азат Шамил улы үҙенең сығышында Башҡортостан яугирҙарының хәрби операция барышында күрһәткән батырлыҡтары һәм фиҙакәрлек өлгөләре сағылдырылған мәғлүмәттәрҙе халҡыбыҙға еткереү зарурлығы хаҡында белдерҙе һәм шулай тине: "Башҡортостан бер нисә хәрби подразделение әҙерләне, улар араһында исемле батальондар ҙа бар. Шулай уҡ махсус операцияла республиканан мобилизацияланғандар ҙа ҡатнаша. Унан башҡа, хәрби хеҙмәткә Башҡортостандан саҡырылғандар башҡа төбәктәрҙең полктарында ла бар. Хатта ки улар, мәҫәлән, Ҡазанда йәиһә Пензала формалаштырылған хәлдә лә, уларҙы башҡорт полктары тип атайҙар. Беҙҙең яҡташтарыбыҙ тураһында тарих яҙыу ваҡыты етте. Бында киң матбуғат сараларының, йәмәғәтселәрҙең, фән, хатта мәҙәниәт һәм сәнғәт вәкилдәренең тәжрибәһен һәм мөмкинлектәрен файҙаланыу мөһим. Башҡорт яугирҙары араһында юғары дәүләт наградаларына лайыҡ булғандар күп. Әйтергә кәрәк, күп кенә яугирҙар хаҡлы рәүештә халыҡ геройҙары булып танылды. Мәҫәлән, Фәнис Хөсәйенов. Шулай уҡ улар иҫәбенә Сибай филармонияһы артисы Илнар Хәтмуллинды индерергә була. Һәм шундай исемдәр күп ул. Ошондай ир-азаматтар эштәрен тыуған яҡтарында дауам итә алыр ине, әммә улар яугирлыҡ юлын һайланы һәм, Ватанын ҡурсалап, һәләк булды. Башҡортостанда хәҙерге заман геройҙары пантеоны формалаша башланы. Тарихсыларҙың, яҙыусыларҙың, журналистарҙың һөнәри берләшмәләре ситтә ҡалмаҫҡа тейеш. Был майҙанда муниципаль кимәлдә лә эш алып барыу фарыз. Өҫтәп әйтәм, тиҙҙән беҙҙең көстәребеҙ дошмандың ҙур бер төркөмөн ҡулсаға аласаҡ. Фронттан яңылыҡтар йәшен тиҙлегендә тарала. Яҡындағы айҙарҙа беҙҙең Еңеүебеҙҙең контурҙары аныҡыраҡ билдәле буласаҡ. Һәм беҙгә башҡорт яугирҙарының ҡаһарманлығы хаҡында бәйән итә башлау фарыз..."

Осрашыуҙа ҡатнашыусылар А.Ш. Бадрановтың сығышын ҙур диҡҡәт менән тыңланы, һуңынан ошо мәсьәлә буйынса үҙҙәренең тәҡдимдәре менән бүлеште. Һөйләшеү аҙағында Башҡортостан яугирҙарының ҡаһарманлығын мәңгеләштереү буйынса эш стратегияһын билдәләп, уны БР Башлығы Радий Хәбировҡа тәҡдим итеү хаҡында белдереү яһалды.

# ЯРҘАМҺЫҘ ТҮГЕЛДӘР

**Республикала махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам саралары арттырылды.**

Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика вице-премьеры - финанс министры Лира Иғтисамова хәбәр итеүенсә, Башҡортостанда махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам күрһәтеү эше дауам итә. Уның һүҙҙәренсә, республикала 37 ярҙам сараһы ҡаралған, быйыл исемлек тағы бер нисә сара менән тулыландырылған.

"Грант ярҙамы алған махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар эшмәкәрлектең планлы күрһәткестәренә өлгәшмәгән өсөн яуаплылыҡтан азат ителә. Шулай уҡ махсус операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ауыл ерендә йәшәгән ғаилә ағзаларына торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн социаль түләүҙәр планлаштырыла. Бынан тыш, хәрбиҙәрҙең балалары физкультура-спорт ойошмаларына тәү сиратта ҡабул ителергә тейеш, шулай уҡ балаларҙы йәшәгән урынға яҡын баҡсаға күсергәндә өҫтөнлөклө хоҡуҡ бирелә. Әлеге ваҡытта 351 баланы күсергәндәр. Шулай уҡ махсус операцияла ҡатнашыусылар, уларҙың ғаилә ағзалары мәҙәниәт учреждениелары сараларына ташламалы билет менән инергә мөмкин", - тине Лира Иғтисамова.

Билдәләнеүенсә, Рәсәй Геройы исеменә лайыҡ булған йәки Рәсәй Федерацияһы орден-миҙалдары менән бүләкләнгән яугирҙарға бер тапҡыр бушлай ер участкалары биреү тураһында закон проекты әҙерләнгән.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓"Башинформ"ға билдәле булыуынса, мессенджерҙарҙа һәм социаль селтәрҙәрҙә махсус хәрби операцияла ҡатнашыу өсөн "Өфө" шәхси хәрби кампанияһына инергә саҡырып, ялған мәғлүмәт таратыла. Бәйләнеш өсөн Өфөнөң Әй урамында урынлашҡан Рәсәй иреклe батальондарын ойоштороуҙың үҙәк штабы адресы күрһәтелгән. Штабта билдәләүҙәренсә, уның шәхси хәрби кампанияға һәм әлеге иғланға бер ниндәй ҙә ҡағылышы юҡ. Асылда штаб Башҡортостандың хәрби комиссариаты, Оборона министрлығының контракт хеҙмәте буйынса бүлеге, муниципалитеттар менән берлектә контракт хеҙмәтенә добровольцтар йыя.

✓Өфөлә Парламент аллеяһы барлыҡҡа килде. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары 30 төпкә яҡын ағас ултыртты, тип хәбәр итә республика власть органының матбуғат хеҙмәте. Яңы "йәшел" объект баш ҡаланың 88-се мәктәбе эргәһендә урынлашҡан. "Ағас үҫентеләре шәхси аҡсаға һатып алынған, был 450 йыллыҡ юбилейына әҙерләнгән баш ҡалабыҙҙы матурлауға өлөш индерер тип уйлайбыҙ", - тине Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. Парламент аллеяһы - 2023 йылда Өфө биләмәһендә ултыртылған аллеяларҙың ун һигеҙенсеһе.

✓13 октябрҙән Өфөлә Шакша күперендә ике йүнәлештә лә автомобилдәр һәм транспорт хәрәкәте ябылып тора. Баш ҡала хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, сикләү иртәнге сәғәт 10-дан 11-гә тиклем ғәмәлдә ҡала. Был ваҡытта унда объектты капиталь ремонтлау сиктәрендә күпер үткәүеләнә геодезия тикшереүе үткәрелә. Эштәр "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" милли проекты буйынса алып барыла. Водителдәрҙә "Кенәз" кисеүендә йылға паромы менән файҙаланырға саҡыралар. Бынан алдараҡ Шакша күперендә 3,5 тоннанан ашыу ауырлыҡтағы йөк машиналары хәрәкәтенең ябылыуы хаҡында хәбәр ителгәйне.

✓Өфөнөң Совет районы хакимиәте башлығы Рөстәм Рәхмәтуллин вазифаһын ҡалдырҙы. Хәҙер ул - Өфөнөң торлаҡ хужалығы идаралығы начальнигы. Айҙар Бәҙретдинов Өфөнөң Совет районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. Ул 2019-2022 йылдарҙа Өфөнөң Дим районы башлығы вазифаһын биләгәйне, һуңғы йылда Өфө хакимиәтенең эштәр идарасыһы булып эшләне.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# ОЛИМПИЯ АУЫЛЫ ТӨҘӨЙӨК!

**Өфө ҡалаһының Орджоникидзе районы хакимиәте сираттағы эшҡыуарҙар сәғәтен уҙғарҙы.**

Хакимиәт башлығы урынбаҫары Илгиз Байҡусҡаров "Стройиндустрия" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең яңы проектын ҡарауға сығарҙы. Эшҡыуарҙар район биләмәһендә үҙенсәлекле "Олимпия ауылы"н төҙөү идеяһын тәҡдим итә. Проект ғәмәлгә ашырылһа, Ағиҙел йылғаһы буйында, йәмле тәбиғәт ҡосағында ҙур туристик база хасил буласаҡ, унда спорт, уйын, ял итеү һәм күңел асыу зоналарында бында килеүселәрҙе хеҙмәтләндереү саралары ҡаралған. Иң элек ошо проект өсөн ер бүлеү мәсьәләһе хәл ителергә тейеш, шуға күрә һөйләшеүҙә ҡала хакимиәтенең Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө буйынса баш идаралығы, Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре идаралығы, шулай уҡ БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы вәкилдәре ҡатнашты.

# ЭШ ХАҠЫН АРТТЫРЫҒЫҘ!

**Өфө хакимиәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә Ратмир Мәүлиев ҡаланың коммуналь предприятиелары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырырға ҡушты.**

Баш ҡала мэры уңайлы эш шарттары, ял итеү һәм тукланыу өсөн махсус урын булдырыу, шулай уҡ эш хаҡын арттырыу кәрәклеген билдәләне. "Хеҙмәт хаҡын йыл һайын индексациялау мөһим. Беҙ был турала һөйләшеп алдыҡ, хәҙерге көндә механизатор-водителдәр араһында конкурентлыҡ бик юғары. Был барлыҡ ҡалаларҙың проблемаһы. Шуға күрә эш хаҡын арттырыу зарур", - тине Ратмир Мәүлиев. Хакимиәттең коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы етәксеһе Рөстәм Хәмитов әйтеүенсә, әле ҡаланы таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса ойошмаларҙа 798 водитель-механизатор, 907 эшсе эшләй. Ә 872 вакансия буш. Өфөгә 361 водитель-механизатор һәм 511 эшсе кәрәк. Штат 70 процентҡа комплектланған.

# ЮЛДАР МАТУРЛАНА

**Әлегә тиклем Өфө урамдарындағы автомобиль юлдары торошона зарланмаған водителдәр һирәк булғандыр ул. Төрлө ултырыштарҙа, халыҡ менән осрашыуҙар уҙғарғанда Өфө хакимиәте етәкселәре адресына тәнҡит һүҙҙәре аҙ яумағандыр.**

Хәҙер инде билдәле роман геройы һүҙҙәрен бик тә ышаныслы итеп ҡабатларға була: "Боҙ ҡуҙғалды, әфәнделәр!" Ысынлап та, бығаса тиклем баш ҡалабыҙҙа ошондай ҙур һәм ҡатмарлы юл төҙөлөшө эштәре башҡарылғаны юҡ ине: 2023 йылда ошо маҡсатта 9,9 млрд һум аҡса тотоноласаҡ. Ҡала хакимиәтенең Юлдар, йәшелләндереү һәм ҡоролмалар төҙөү һәм ремонтлау идаралығы начальнигы Константин Паппе белдереүенсә, 12 км оҙонлоғондағы юлдарҙы ремонтлау тамамланып килә, йәнә 21 км юл участкалары өрәңнән төҙөлә. Унан башҡа Өфөнөң ике ҙур күперенә капиталь ремонт эшләнә: Ҡариҙел (Өфө) йылғаһы аша һалынған Шакша күпере (441 м) һәм Ағиҙел аша 1952 - 1956 йылдарҙа һалынған аркалы күпер (672 м) яңыртыла. Ҡала юлдары селтәрен Көнсығыш сығыу юлы менән тоташтырыу маҡсатында Салауат Юлаев проспектынан Комсомол урамына һәм Көнсығыш сығыу юлына тиклем арауыҡта яңы юлдар төҙөлә башланы.

# ТАРИХИ БИНА ҺҮРӘТЕ...

**Рәсәй Банкы быйыл яңыртылған 1 000 һәм 5 000 һумлыҡ купюраларҙы әйләнешкә сығара.**

Ошо банкноталарҙы биҙәү өсөн федераль округтарҙағы иҫтәлекле урындарҙың һүрәттәре ҡулланылған. 1000 һумлыҡ аҡса Түбәнге Новгород һәм Волга буйы федераль округының киң билдәле тарихи объекттарын сағылдыра. Банкнотаның йөҙлөгө яғында Түбәнге Новгород Кремлендәге Никольский башняһының, икенсе яғында Ҡазан ҡалаһындағы тарих музейы бинаһының, Сөйөмбикә манараһының һәм Өфө ҡалаһындағы Археология һәм этнография музейы бинаһының һүрәттәре төшөрөлгән. Рәсәй банкнотаһында урын алған Өфөләге бина сауҙагәр Елена Поносова-Молло тарафынан 1910 йылда төҙөлгән.

# БАШҠОТ КОМПОЗИТОРЫ ОНОТОЛМАЙ

**Баш ҡалабыҙҙа күренекле башҡорт композиторы Салауат Низаметдиновтың иҫтәлеге мәңгеләштерелә. Кесе йома, 19 октябрҙә Ленин урамындағы 162-се йортта мемориаль таҡтаташ асыу тантанаһы уҙғарылды.**

Сарала республиканың мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре, композиторҙың туғандары һәм дуҫтары, уның музыкаль мираҫын яратыусылар ҡатнашты. "Мемориаль таҡташ беҙ 1997-2003 йылдарҙа йәшәгән йортҡа ҡуйылды. Киләсәктә Өфө скверҙарының береһенә композиторҙың исемен бирергә уйлайҙар. Башҡорт опера һәм балет театрында Салауат Низаметдиновтың "Ай тотолған төндә" операһын сәхнәгә яңыса сығарыу идеяһы ла бар", - тине композиторҙың тормош иптәше Рәзиҙә Низаметдинова.

МӘҒАРИФ

# БАЛАЛАРҘЫҢ...

## күп тел белеүе лә мөһим

**26-27 октябрҙә баш ҡалабыҙҙа Полилингваль белем биреү халыҡ-ара форумы уҙғарыласаҡ. Унда Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәренән һәм күрше сит илдәрҙән полилингваль белем биреү өлкәһендә эшләгән мәғариф хеҙмәткәрҙәре ғалимдар, директорҙар, уҡытыусылар, мәктәпкә тиклем белем биреү учреждениелары белгестәре йыйыласаҡ. Форум һәм ил мәғарифындағы яңы төр белем биреү учреждениеларының эшмәкәрлеге тураһында 2-се "СМАРТ" республика полилингваль күп профилле гимназия директоры Наил ӘМИНЕВ менән әңгәмәләштек.**



**➔ Һүҙҙе тәүҙә Өфөлә уҙғарыласаҡ сара тураһында башлайыҡ: ул ниндәй маҡсаттарҙа ойошторола?**

- Полилингваль белем биреү халыҡ-ара форумы республикабыҙҙа ғына түгел, бөтә Рәсәйҙә тәүге тапҡыр уҙғарыла. Әле илебеҙҙең Алтай, Якутия, Ҡарасай-Черкес, Татарстан, Коми, Мари-Эл, Төньяҡ Осетия, Дағстан кеүек төбәктәренән һәм күрше Ҡаҙағстандан ҡатнашыусылар теркәлеү үткән, был исемлек һаман тулылана бара. Сараға полилингваль һәм милли мәғариф өлкәһендә эшләүсе коллегалар килә. Форумдың тәүге көнөндә ҡатнашыусыларҙы биш майҙансыҡта төрлө оҫталыҡ дәрестәре, мәғариф интенсивтары, лекциялар, күргәҙмәләр көтә. Өфө фән һәм технологиялар университеты менән М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты полилингваль белем биреү өлкәһенә кадрҙар әҙерләгән юғары уҡыу йорттары вәкилдәрен, ғилми хеҙмәттәр авторҙарын туплай. Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты милли мәғариф учреждениелары вәкилдәрен, ә инде 1-се Республика полилингваль күп профилле гимназия менән беҙ, 2-се "СМАРТ" республика полилингваль күп профилле гимназия, ошо өлкәлә эшләгән уҡытыусыларҙы, директорҙарҙы ҡабул итәсәкбеҙ. Гимназиябыҙға иллегә яҡын ҡунаҡ киләсәк, уларҙы белем усағы буйлап экскурсия көтә, шулай уҡ Сибай ҡалаһының 3-сө полилингваль күп профилле гимназия-интернаты, Баймаҡ лицей-интернаты, Бишбүләк 2-се мәктәбендәге полилингваль кластар, Нефтекамалағы "Белем" полилингваль күп профилле мәктәп-интернат һәм Өфөләге 202-се Полилингваль балалар баҡсаһы үҙҙәренең эш һөҙөмтәләре менән таныштырасаҡ. Артабан ҡунаҡтарға төрлө предметтарҙы ике телдә уҡытыуҙы сағылдырған һәм сит телдәр буйынса дәрестәр үткәрәсәк уҡытыусыларыбыҙ. Мәҫәлән, беҙҙә биология предметын биология һәм инглиз теле уҡытыусылары бергә алып бара, улар уҡыусыларға белемде рус һәм инглиз телдәрендә бирә. Уҡыусыларҙың проект эштәренә лә урын буласаҡ, шулай уҡ үткән уҡыу йылында "Урал батыр" республика конкурсында коллектив менән еңеү яулап ҡайтҡан гимназистар сығыш яһаясаҡ. Эшлекле көн түңәрәк ҡорға йыйылып, барлыҡ борсоған һорауҙарҙы уртаға һалып һөйләшеү менән тамамланасаҡ.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

## Ҡан баҫымы

❖ Ҡан баҫымы юғары булғанда 2 өлөш кипкәр (сушеница болотная) үләне, 4 өлөш арыҫлан ҡойроғо (пустырник пятилопастный) үләне, 1 өлөш ҡыҙыл энәлек емеше, 1/2 өлөш бөтнөк япрағы, 1-әр өлөш кәтүәсе муҡсаһы үләне, ҡара миләш емеше, укроп һәм етен орлоҡтары, 2 өлөш ҡайын еләге (земляника лесная) япрағын алып, барыһын да ваҡларға. Әҙерләмәнең 3 ҡалағына 300 мл ҡайнар һыу ҡойоп, ныҡлы ябып, йылыла 6 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1/3 стакан эсергә.

## Шәкәр сире

❖ 300-әр грамм петрушка һәм һарымһаҡ, 100 грамм лимон ҡабығынан әҙерләнгән ҡатышманы ризыҡланырҙан алда 1-әр балғалаҡ ашау ҡандағы шәкәр кимәлен түбәнәйтергә ярҙам итә. Дауаны быларҙың барыһын да ит турағыстан үткәреп, ҡараңғы урында 2 аҙна тотоп әҙерләргә.

❖ Үрҙә тәҡдим ителгән ҡатышмаға шифалы төнәтмә ҡушып эсергә лә мөмкин. Уны әҙерләү өсөн ҡара һәм ҡыҙыл көртмәле япраҡтары, фасоль ҡуҙағы, кукурузның емешлек ауыҙын тигеҙ нисбәттә алырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан һыу ҡойоп, төнгөләккә термоста ҡалдырырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1/3 стакан эсергә.

## Бронхит

❖ Эмалле кәстрүлгә 2 стакан һыу ҡойорға, алма ҡабығын һалып, шәкәр ҡушып ҡайнатырға. Шуны көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә.

❖ Торманы дүрткелләп ваҡ ҡына ҡырҡырға, кәстрүлгә һалып, шәкәр өҫтәргә. Духовкала 2 сәғәт бешерергә. Шунан һөҙөргә, торма киҫәктәрен ташларға, ә шыйыҡсаһын шешәгә ҡойоп алырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда һәм 1-ҙе йоҡлар алдынан 2-шәр балғалаҡ эсергә.

❖ Бронхит һәм пневмония осрағында ҡаҡырыҡлы йүтәл булғанда һарымһаҡ һуты һәм һөт ярҙам итә: 1 балғалаҡ һөткә 1 балғалаҡ һут кәрәк. Йоҡлар алдынан йылы көйө эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ала ҡаҙ, ҡыр ҡаҙы**
**(Серый гусь)**



Йорт ҡаҙына оҡшаған, әммә унан бәләкәйерәк, ауырлығы 2,1-4,5 кг. Муйыны, башы, кәүҙәһенең төҫө аҡһыл-ала. Суҡышы, тәпәйҙәре - алһыу. Ҡоро ерҙә яҡшы йөрөй, ял иткәндә күберәк бер аяғына баҫып тора. Һыуҙа яҡшы йөҙә һәм сума. Шәп оса. Миграция мәлендә өсмөйөш яһап осалар. Башҡортостандың урманлы-далалы төбәктәренә 11 апрелдә үк килә, Урал арьяғында 20-ләренән һуң күренә башлай. Күмәкләп йәшәйҙәр. Көҙөн сентябрҙең тәүге ун көнөндә үк йылы яҡҡа оса, шулай ҙа Ағиҙел һәм Таныптың ҡушылдыҡтарында ҡайһы саҡта октябрь аҙаҡтарында ла осрай әле. Ҡыҙыл Китапҡа индерелгән.

Инә ҡаҙ 4-6 йомортҡа һала, апрель аҙаҡтарында уҡ баҫырға ултыра. 27-28 көндән бәпкәләр сыға башлай. Улар оло ҡоштар ҙурлығына еткәс, оло ҡоштарҙың йөнө ҡойола, улар осоу һәләтен юғалта һәм бала ҡоштар менән ризыҡҡа бай урындарҙа йәшәнеп йәшәй. Уларҙың ҡаурыйҙары алышынып бөткәнсе бала ҡоштар ҙа ҡанат нығыта.

Үҫемлек менән туҡлана, яланда үлән йолҡа, һаҙлыҡта үҫкән үҫемлектәрҙе, уларҙың тамырын ашай; йәй аҙағында орлоҡтар менән рационын байыта. Иген һуғылған баҫыуҙарға килә, борсаҡ ярата.

Йылы яҡтарға осоп китер алдынан эре күлдәргә бергә туплаалар, унда ашайҙар, ял итәләр. 1 октябргә тиклем осоп китеп бөтәләр тиерлек. Беҙҙең белгестәргә иң һуңы 25 октябрҙә күренгәне бар.

Ҡыр ҡаҙының һаны йылдан-йыл кәмей. Шуға ла уларҙы йәлеп итеү маҡсатынан оялар ҡороу яҡшы, сөнки был ҡаҙҙар әҙер ояларҙы ла үҙ итә. Был төрҙө һаҡлап ҡалыу өсөн һаҡланыусы территорияларҙы арттырырға, уларға һунар итеүгә юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Ырымбур һәм Силәбе өлкәләрендә ҡыр ҡаҙы һунар итеү ҡошо.

Беҙҙең төбәктән ҡышлау өсөн башлыса Каспий диңгеҙенә китәләр. Тәпәйенә махсус балдаҡ кейҙереп иҫәпләүҙәр күрһәтеүенсә, ҡаҙҙар 17-20 йәшкә тиклем йәшәй.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

МӘҒАРИФ

# БАЛАЛАРҘЫҢ...

## күп тел белеүе лә мөһим



**(Башы 5-се биттә).**

Был форумды үткәреүҙең төп маҡсаты - тәжрибә уртаҡлашыу. Ошо йәһәттән беҙҙең республиканың тәжрибәһе үҙенсәлекле: һуңғы бер нисә йыл эсендә башҡорт, татар, мари полилингваль мәктәптәре асылды, сыуаш һәм удмурт мәктәптәре сират көтә. Ә Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә эшләгән полилингваль белем усаҡтары, ғәҙәттә, ундағы төп халыҡтың мәнфәғәттәрен генә ҡарай. Шуға үҙебеҙҙең полилингваль белем биреү моделен бөтә Рәсәй кимәлендә ҡулланырға тәҡдим итергә, тигән матур маҡсатыбыҙ бар. Ул осраҡта милләттәштәр ҡуйылып йәшәгән башҡа төбәктәрҙә лә башҡорт полилингваль мәктәптәре барлыҡҡа килеүе ихтимал. Шулай уҡ педагогтарға методик ярҙам күрһәтеү, әсбаптар әҙерләү, туған һәм сит телдәрҙе уҡытыу буйынса тәжрибә уртаҡлашырға, фекер алышырға ниәтләнәбеҙ.

**➔ Бер нисә йыл эсендә генә республикабыҙҙа полилингваль белем усаҡтарының һаны бермә-бер артты. Уларҙың өҫтөнлөгөниҙә?**

- Полилингваль белем усаҡтары төрлө телдәрҙә һәм күп йүнәлештәрҙә уҡытыуҙы күҙ уңында тота. Мәҫәлән, беҙҙең гимназияла уҡыусылар беренсе кластан уҡ өс - рус, башҡорт һәм инглиз телдәрен үҙләштерә башлай. Бүтән мәктәптәрҙә иң яҡшы осраҡта беренсе кластан ике дәүләт телен өйрәтә башларға мөкиндәр, сит тел дәресе һуңыраҡ инә. Әлеге көндә беҙҙең 1-3 кластарҙа башҡорт-инглиз кластары бар, унда балалар был телдәрҙе аҙнаһына өсәр сәғәт өйрәнә. Быйыл 4-се класта уҡығандар араһында француз телен тәрәнәйтеп өйрәнгәндәр бар, уларҙа дәрес аҙнаһына 4 сәғәт ҡуйылған. Быйылғы уҡыу йылында немец телен тәрәнәйтеп өйрәнгән класс астыҡ. Башланғыс синыфта шулай телдәрҙе тәрәндән өйрәнәләр ҙә, бишенсе класта уҡыусылар үҙҙәре теләгән профилдәрҙе һайлайҙар. Кемдәрҙер лингвистик, медицина профилдәрендә, "шайморатов класы"нда, ҡалғандар дөйөм белем бирелгән кластарҙа уҡый. Һуңғыһында рус һәм математика предметтарына баҫым яһала - уҡыусылар Берҙәм дәүләт имтаханын яҡшы тапшырырға әҙерләнә. Лингвистик кластарҙа телдәрҙе тәрәнәйтеп өйрәнһәләр, медицина йүнәлешендә уҡығандар химия, биология фәндәренә, латин теленә баҫым яһай. "Шайморатов класы"нда хәрби-патриотик тәрбиәгә, физик күнекмәләргә, хәрбиҙәргә кәрәкле белемдәрҙе үҙләштереүгә иғтибар ҙур.

Сағыштырмаса яңыраҡ эш башлаһаҡ та, гимназиябыҙҙың ҡыуандырырлыҡ уңыштары ла бар. Уҡыусылар төрлө предмет олимпиадаларында әүҙем ҡатнаша һәм еңеүҙәр яулай: үткән уҡыу йылында ҡала кимәлендә 21 призер һәм еңеүсе булып, шуларҙың 4-һе республика кимәлендә призер булды, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиадала 4 уҡыусыбыҙ призлы урындар яуланы, Таулы Алтай ҡалаһында уҙғарылған Себер һәм Алыҫ Көнсығыш халыҡтарының туған телдәре буйынса төбәк-ара олимпиадала өс уҡыусыбыҙ ҡатнашып, икәүһе призер булып ҡайтты. Ғөмүмән, төп баҫым яһалған йүнәлештәрҙең береһе ул олимпиадалар. Сөнки, мәғлүм булыуынса, олимпиадаларҙа яуланған һөҙөмтәләр балаға киләсәктә кәрәкле юғары уҡыу йортона инергә ярҙам итәсәк, хатта Бөтә Рәсәй, йәки Халыҡ-ара кимәлдәге еңеүҙәр өсөн илебеҙҙәге теләһә ниндәй вузға һынауҙарһыҙ уҡырға алалар. Шуға уҡыусыларҙы дәртләндереү маҡсатында, быйыл Бөтә Рәсәй кимәлендә призер йә еңеүсе булған кешене "Айфон"дың һуңғы моделе менән бүләкләйбеҙ, тип вәғәҙә иттек.

Уҡытыусылар төрлө кимәлдәге грант проекттары буйынса эш алып бара, автономиялы коммерция булмаған ойошма ла булдырҙыҡ. Бер нисә проектыбыҙға матди ярҙам алып, бойомға ашырҙыҡ. Мәҫәлән, быйыл республика Башлығының грантын отоп, йәйгеһен илдең төрлө төбәктәрендәге полилингваль мәктәптәренән 60 бала өсөн Өфө ҡалаһының "Карлуғас" лагерында биш көнлөк "Етегән" слетын үткәрҙек. Әле ошо проектыбыҙҙы тағы ла киңәрәк итеп бойомға ашырыу маҡсатында Президент грантына ғариза тапшырҙыҡ, көтәбеҙ.

Гимназия сиктәрендә лә ҡыҙыҡлы проекттар бойомға ашырыла беҙҙә. Шуларҙың береһе "Атайсал" проекты булғандыр. Һәр бала өсөн үҙе белем алған гимназия Кесе Ватаны кеүек ҡәҙерле булырға тейеш һәм уны тағы ла яҡшыртыу, камиллаштырыу, матурайтыу өсөн нимәләр эшләргә мөмкин? Гимназистарға ошо һорауға яуап итеп, үҙ проекттарын эшләргә ҡуштыҡ һәм бойомға ашырыу өсөн 500 мең һум грант аҡсаһын әҙерләнек. Гимназистар ете проект тәҡдим иткәйне, "Быуындар бәйләнеше" тип аталған мәктәп музейы проекты еңеп сыҡты, уны ошо аҙнала асабыҙ. Уҡыусыларҙың башланғыстарын хуплауға ҡоролған ошондай проекттар үҙебеҙҙең республикала ла бойомға ашырыла, эш сәфәре менән барған саҡта Санкт-Петербург ҡалаһы тәжрибәһен дә күрҙек: уларҙа губернатор 30 мәктәпкә 3-әр млн һум аҡса бирә икән йыл һайын, был аҡсаны алыу өсөн уҡыусылар төрлө кимәлдә үҙ проекттарын яҡлай.

Үткән уҡыу йылында шайморатовсыларыбыҙ "Мәктәп археологияһы" тигән проектта ҡатнаштылар. Улар ғинуар айынан алып майға тиклем Өфөләге музейҙарҙа уҙғарылған төрлө археологик күргәҙмәләрҙе барып күрҙе, Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Гәйнуллин менән төҙөлгән килешеүгә ярашлы, бик мауыҡтырғыс дәрестәр тыңланы һәм иң һуңында Турахан кәшәнәһе эргәһендә барған ҡаҙыныу эштәрендә биш көн йөрөп ҡайттыҡ. Унда балалар археологтар менән бергә ҡаҙыныу эштәрендә ҡатнашты, республика етәксеһе Радий Хәбиров килде, телевидениеға ла төштөләр. Был проектҡа йомғаҡ яһап, быйылғы уҡыу йылында археологтар класы астыҡ - 5-се "И" класы уҡыусылары үҙҙәрен хәҙер тарихсы-археолог һөнәренә әҙерләй. Улар өсөн һәр уҡыу йылы археологик ҡаҙыныу эштәре менән тамамланасаҡ.

Проект сессияһы ла бар гимназиябыҙҙа, әлегә телдәргә ҡағылышлыларын ғына һайланыҡ. Бер уҡыусыбыҙ "Телеграм"да биш телдә дәрестәр теҙмәһен эшләргә тәҡдим итте. Ике уҡыусы үҙебеҙҙең "Сағыу" микрорайоны һәм Өфө ҡалаһы буйлап инглиз телендә гастрономия турын эшләгән, быларҙы баш ҡаланың 450 йыллығына презентацияларбыҙ, тип ниәт итеп торабыҙ.

**➔ Бөгөн полилингваль белем усаҡтарын ниндәй мәсьәләләр борсой һәм улар форумда күтәреләсәкме?**

- Иң беренсе борсоған мәсьәлә ул, әлбиттә, кадрҙар. Был бер беҙҙә генә түгел, дөйөм Рәсәй кимәлендә бик мөһим мәсьәләләрҙең береһе. Хатта ябай дөйөм белем биреү усаҡтары ла педагогик кадрҙарға ҡытлыҡ кисерә, ә беҙгә тағы ла уларҙың үҙ предметын бер нисә телдә уҡыта алыуы шарт. Быны әлеге көндә коллегаларға курстар үткәреп, ҡайһы саҡта бер предметты ике педагог уҡытып, хәл итеп киләбеҙ. Киләсәктә юғары уҡыу йорттарында шундай универсаль белгестәр тәрбиәләнергә тейеш. Әйткәндәй, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ла был әҙерлек башланды: беренсеме, икенсеме курста уҡыйҙар.

Башҡорт һәм рус телдәрен белеү талап ителгән уҡытыу эшебеҙ яҡшы ҡуйылған, әммә уларға ла методик яҡтан ярҙам кәрәк. Бында инде тағы бер мөһим мәсьәлә ҡалҡып сыға - полилингваль белем усаҡтарына махсуслаштырылған уҡытыу әсбаптары талап ителә. Мәҫәлән, биология фәнен рус һәм инглиз телендә уҡытабыҙ икән, уҡытыусыға таянып эшләрлек бер китап кәрәк, ул ике телдә булһа отошлораҡ. Быны ошо юҫыҡтарҙа бик күп эшләйһе бар әле һәм коллегалар менән был мәсьәләләр буйынса ла фекер алышырбыҙ, хәл итеү юлдары барлап, маҡсаттар ҡуйырбыҙ, тип ышанам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өфөлә уҙасаҡ Полилингваль белем биреү халыҡ-ара форумы Рәсәйҙә йәш быуынды күп мәҙәниле һәм телле мөхиттә үҫтереү йәһәтенән алып барылған эштәрҙе сағылдырған, милли мәғарифтың өҫтөнлөклө яҡтарын күрһәткән эшлекле сара булмаҡсы. Уның йомғаҡтары Башҡортостанда ғына түгел, тотош илдә һәм дуҫ сит илдәрҙә берҙәй ыңғай һөҙөмтәләргә килтерер, тип ышанабыҙ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

✓ *Экспедиция материалдары нигеҙендә ғалимдар урта быуаттар ҡомартҡыларында иң йыш осрай торған мүктәрҙең сығыш һәм төр составтарын билдәләне. Улар карбонат таштарында үҫеүсе типик үҫемлектәр.*



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа



### III - IV быуаттарҙа Көньяҡ Урал далаларындағы тарихи шарттар

Әлеге ваҡытта яҡынса II - IV быуаттарға ҡараған бер нисә тиҫтә ҡурған билдәле. Территориаль яҡтан улар Көньяҡ Уралға ҡарай (Урал аръяғын да индереп). Улар ҙурҙарҙан түгел, диаметрҙары 10 - 15 метрҙан артыҡ түгел, бейеклеге - 0,5 м. Ер өйөмдәре башлыса тупраҡтан, ҡәберҙәре тәрән, әммә формалары буйынса күп төрлөләр. Улар араһында төбөнән 30 - 50 см бейеклектә ҡәберҙең аҫҡы яғын ҡыҫҡа таҡталар менән ябыу өсөн баҫҡыслылары (киртләслеләре), оҙон стенаһы буйында квадрат йәиһә ябай оҙонса ҡыуышлылары бар.

Үлгәндәрҙе табуттарға, ағас олононан соҡоп эшләнгән улаҡтарға һалып ерләгәндәр. Мәйетте ҡайһы тарафҡа ҡаратып һалыу ҡомартҡыларҙа төрлөсә. Ерләү йолаларының төрлөсә булыуы дала зонаһы халыҡтарының ныҡ ҡатнаш булыуына дәлил. Түбәндәге деталь иғтибарға лайыҡ: йыш ҡына ҡәбер өҫтәрендә усаҡ эҙҙәре осрай.

Ҡурғандар материалы III - IV быуаттарҙағы киң дала күскенселәре мәҙәниәте өсөн типик һәм ошо дәүергә хас предметтарҙан тора: тәпәшәк балсыҡ һауыт-һаба, шул иҫәптән оҙон тура муйынлы кувшиндар, оҙон ҡылыстар, ат йүгәне әйберҙәре (ауыҙлыҡтар, тоташтырыусы ҡулсалар) һәм бил ҡайыштары (таралғылар, ҡаптырмалар, ҡайыш биҙәүестәре), биҙәүестәр (һырғалар, балдаҡтар, муйынсаҡ мәрйендәре, фибулалар һ.б.) һәм башҡа күп нәмәләр. Ҡайһы берҙә бәләкәй ҡыңғырауҙар, ҡойолоп яһалған көмөш ҡытай көҙгөләре осрай. Тикшеренеүселәр II - IV быуаттарҙағы Көньяҡ Урал ҡурғандары урындағы дах-сак-массагет ҡәбиләләренең вариҫтары тарафынан ҡалдырылған, тигән уртаҡ фекер менән килешә, уларҙың мәҙәниәте тирә-йүндең этносәйәси мөхите йоғонтоһонда етди үҙгәрештәргә дусар була.

### Иртә бахмут (мазунин) мәҙәниәте ҡәбиләләре

Был территорияла ултыраҡ тормошта йәшәгән халыҡтар менән күскенселәрҙең бергә йәшәүе һәм уларҙың мәҙәни яҡтан бер-береһенә ҡарата йоғонтоһо һөҙөмтәһендә б.э. II - III быуаттары сиктәрендә Көнбайыш Урал янында бахмут йәки мазунин исемле яңы эре археологик мәҙәниәт формалаша. Ул бер нисә тиҫтә ҡаласыҡ һәм ҡәберлектәр менән кәүҙәләнә, билгәгән территориялары яғынан Ағиҙел һәм Урта Каманың урта һәм түбәнге ағымдары бассейндарын (Удмурт Республикаһының һәм Пермь крайының көньяғы) эсенә ала.

Тәүләп бахмут мәҙәниәтен 1928 йылда А.В. Шмидт асыҡлай, һәм уның территорияһы үрҙә күрһәтелгән сиктәрҙә билдәләнә. Ул б.э. VIII - IX быуаттарына тиклем өҙлөкһөҙ йәшәй һәм иртә урта быуаттар эпохаһында Көнбайыш Урал янындағы этногенетик процестарға йоғонто яһаусы мөһим факторға әйләнә. Бәғзе бер тикшеренеүселәр Урта Кама төркөмө ҡомартҡыларын тәүләп өйрәнә башлағанда уларҙы үҙаллы мазунин мәҙәниәте сифатында ҡарай башлағайны, әммә ике төркөм ҡомартҡылары материалдарының дөйөм яҡынлығы бер кемдә лә шик тыуҙырманы, шуға күрә иртә бахмут этабы ҡомартҡыларын (III - IV бб.) берҙәм бахмут мәҙәниәтенең мазунин этабы, тип атау маҡсатҡа ярашлыраҡ.

Иртә бахмут мәҙәниәте мазунин этабында тотороҡло билдәләр комплексы менән айырылып тора. Уға үлгәндәрҙе һай ҡәберҙәр төбөнә эсе соҡоп алынған ағас улаҡтарға йә иһә ҡабыҡҡа һалып ерләү, киң муйынлы, түңәрәк төплө, соҡоп яһалған орнаментлы тәпәшәк балсыҡ һауыт-һаба хас, шулай уҡ һорау билдәһе формаһында, ҡулса кеүек бөгөп тоташтырылған ҡатын-ҡыҙҙар биҙәүестәре осрай, улар парлап, йә өсәрләп баш кейеме ситенә тағылып, сикә эргәһендә йөрөтөлгән. Бронза йәиһә тимер сыбыҡтан эшләнгән тараҡтар, беләҙектәр, күбәләк формаһындағы массив бронза фибулалар, ҡойоп яһалған айыу һындары, шулай уҡ ҡолаҡлы тимер балталар һәм башҡа предметтар күп. Ошо мәҙәниәттең икенсе үҙенсәлеге: ирҙәрҙең ҡәберҙәрендә ҡатын-ҡыҙҙар биҙәүестәре наборы, ҡағиҙә булараҡ, туҙ һауыттарға йәиһә һөлдә янына өймәләп һалынған була, шул уҡ ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡында улар тәғәйенләнешенә ярашлы урынлаштырыла. Биҙәүестәрҙең ошо рәүешле ир-ат ҡәберҙәренә урынлаштырылыуы ғалимдарға уларҙың билдәле бер ниәт менән һалынып, ҡатын-ҡыҙҙарҙың вафат булған ирҙәренә бүләктәре (ҡорбан комплекстары) булыуы хаҡында һығымта яһарға ерлек бирә. Мазунинсыларҙың ер эшкәртеү менән шөғөлләнеүенә ҡәберҙәрҙә йыш табыла торған тимер ураҡтар дәлил.

Иртә бахмут мәҙәниәтенең көньяҡ сиге Ағиҙел йылғаһының урта ағымы буйлап үтә, бында элегерәк ултыраҡ тормош алып барыусы урындағы халыҡтарҙан ҡалған ҡараабыҙ мәҙәниәтенең Охлебинин һәм Шипов кеүек ҙур ҡәберлектәре урынлашҡан. Б.э. II - IV быуаттарына ҡараған ҡәберлектәр улар араһында иң һуңғы хронологик төркөмдө хасил итә: ерләү йолаһы буйынса улар элеккеләренән бер ни менән дә айырылмай, әммә уларҙың йәше ҡәберлек инвентарында ошо ваҡытҡа хас предметтар табылыуы менән билдәләнә (мәҫәлән, телле һәм ҡалҡансыҡлы таралғы-ҡаптырмалар).

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*ТИКШЕРЕНЕҮҘӘР*

# КӘШӘНӘЛӘРҘӘ ҮҪКӘН МҮК



**Санкт-Петербург университетының ғалим-лихенологтары (мүктәрҙе өйрәнеүсе белгестәр), йәй айҙарында Башҡортостанға экспедицияға килеп, Турахан һәм Хөсәйенбәк кәшәнәләрендә үҫкән мүктәрҙе (лишайниктарҙы) өйрәнде.**

СПбДУ сайтында уларҙың тикшеренеүе һөҙөмтәләре урта быуат ҡомартҡыларын әүәлге хәленә ҡайтарыу мөмкинлеген бирәсәк, тигән мәғлүмәт бирелде. Тикшеренеү эштәре Башҡортостанда Күсмә цивилизацияларҙың Евразия музейын төҙөү сиктәрендә башҡарылды. Ғалимдар экспедиция барышында кәшәнәләрҙә үҫкән мүктәрҙең төрҙәрен билдәләүҙән башҡа уларҙың тәбиғәтте һаҡлау йәһәтенән мөһим булыу-булмауына ла баһа бирҙе. Анализлау өсөн кәшәнәләрҙең 30 урынынан мүктәр алынды, архитектура ҡомарҡыларына зыян килтермәҫлек алымдар ҡулланылды.

Экспедиция материалдары нигеҙендә ғалимдар урта быуаттар ҡомартҡыларында иң йыш осрай торған мүктәрҙең сығыш һәм төр составтарын билдәләне. Улар төрлө составлы карбонат таштарында үҫеүсе типик үҫемлектәр, араларында Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китаптарына индерелгән төрҙәре юҡ. СПбДУ-ның ботаника кафедраһы уҡытыусыһы Дмитрий Гимельбрант кәшәнә стеналарында реставрация үткәрелгән хәлдә уларҙы мүктәрҙән бер ниндәй зыянһыҙ таҙартып булыуы хаҡында белдерҙе. Ул саҡта кәшәнәләрҙең тарихи тышҡы күренешен тергеҙеп буласаҡ. Башҡортостандан алып ҡайтылған мүк өлгөләре СПбДУ-ның биология факультетының ботаника кафедраһы һәм РФА-ның В.Л. Комаров исемендәге Ботаника институтының лихенология һәм бриология лабораторияһы гербарийҙарына тапшырылды.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Калинковичи-Мозырь һөжүм итеү операцияһы. Мозырь рейды

16-сы гв. атлы дивизияһы командирының 1943 йылдың 25 декабрендәге бойороғона ярашлы 160-сы танк полкы танкистары Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнә: Т-34 танкы башняһы командиры, кесе сержант Андронов Вячеслав Борисович танк пушкаһынан мәргән атып, дошмандың бер нисә пулемет нөктәһен сафтан сығара, 15-ләп һалдатын һәм офицерын юҡ итә. Ярославль ҡалаһында тыуып үҫкән Бегунов Валентин Иванович Днепр йылғаһының уң яры буйындағы Надвин ауылы янындағы алышта немецтарҙың автомашиналарын, обоздарын ҡыйрата, әммә дошман снаряды тейеп яңа башлаған танк эсендә һәләк була. Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ булыусылар исемлегендә башҡа танкистар ҙа бар: Т-34 танкыһының башня командиры Володчиков Василий Владимирович (Смоленск өлкәһенән); өлкән сержант, Т-70 еңел танкыһының механик-водителе Игнатенко Д. Ф. (Алтай крайынан); сержант, Т-34 танкыһының механик-водителе Путилов Аркадий Григорьевич (Куйбышев өлкәһенең Подбельский районынан); танк взводтары командирҙары, лейтенанттар Синицын А. Н., Силин П. А. Һәм Порубара И. А.

Шулай уҡ Ҡыҙыл Йондоҙ ордены 148-се артминполктың 4-се миномет батареяһының ут взводы командиры, гв. өлкән сержанты Дәүләтов Сөләймән Латип улына (Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан), 60-сы гв. атлы полкы разведчигы Коновалов Илья Еремеевичҡа (Киров өлкәһенән) тапшырыла.

1943 йылдың ноябрь-декабрь айҙарында һәм 1944 йылдың ғинуарында батырлыҡ өлгөләре күрһәткән яугирҙар, дивизияның полк командирҙары бойороҡтарына ярашлы, "Батырлыҡ өсөн" һәм "Боевой хеҙмәттәре өсөн" миҙалдары менән бүләкләнә. 60-сы гвардия атлы полкы яугирҙарынан танкыға ҡаршы ата торған мылтыҡ (ПТР) наводчигы Низаметдинов Ғизетдин Ғиләжетдин улы алыштарҙың береһендә боеприпастар менән тулы дошман автомашинаһын сафтан сығара (Әлшәй районының Ибрай ауылынан), уға "Батырлыҡ өсөн" миҙалы тапшырыла; ПТР наводчигы Төхвәтуллин Хөснулла Төхвәт улы (Байҡыбаш районының Һөйөндөк ауылынан), 2-се эскадрон ҡылыссыһы, гвардия рядовойы Хлутов Мозаһит Хлут улы (Баҡалы районы Мостафа ауылынан), 3-сө эскадрон ҡылыссыһы, гв. рядовойы Кашапов Мирсәйет Кашаф улы (Нуриман районының Иҫке Исай ауылынан), станковый пулеметтың 2-се номеры, гв. рядовойы Хәмиҙуллин Әхәт Ғәзи улы (Йәрмәкәй ауылынан) шул уҡ миҙалға лайыҡ була.

62-се гв. атлы полкы яугирҙарынан "Батырлыҡ өсөн" миҙалы гв. рядовойы, 20-се ПВО гв. дивизионының ДШК эре калибрлы пулеметының 1-се номеры Кочкин Егор Ивановичҡа (Өфө ҡалаһының Сталин районынан), 76-миллиметрлы батарея старшинаһы ярҙамсыһы Әхмәҙуллин Ғабдрахман Хәйрулла улына (Шишмә районының Сәфәр ауылынан), гв. рядовойы, телефонист Горбунов Александр Михайловичҡа (Асҡын районының Уршәҙе ауылынан), гв. рядовойы, элемтә взводы телефонисы Әхмәҙиев Ғәли Мөхәмәҙи улына (Шаран районынан), химик һаҡланыу взводының гв. рядовойы Батыров Сәмиғулла Ғәскәр улына (Благовещен районының Иҫке Торбаҫлы ауылынан) тапшырыла.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Беҙ - 1968 йылда асылған Өфө сәнғәт институтының актерлыҡ бүлеген беренсе булып тамамлаусыларҙан дүрт кеше - Хисмәтулла Дәүләтов, Риф Сәйфуллин, Вәкил Йосопов һәм мин Сибай театрына эшкә килдек.***



# ҮҘҘӘРЕ ҺАЙЛАҒАН

**Яҙмышты һайлап, үҙгәртеп буламы икән? Кемдер берәү, уйлап та тормайынса, була, тиер. Кемдер өндәшмәҫ. Юҡ, булмай, тип, моңһоу ғына әйтеүселәр ҙә табылыр. Ә бит Әҙәм балалары күберәген, маңлайға яҙылғанды күрербеҙ, ти. Минеңсә, үҙгәртеп үк булмаһа ла, өлөшкә төшкәнде яҡтыртып, нурландырып, матур эшләп, йәшәп булалыр. Бына, мәҫәлән, һин һөнәрең буйынса театр актеры булып эшләйһең. Был яҙмышмы, әллә һинең ирекле һайлауыңмы? Һәр минуты, секунды маңлайыңа яҙылғанмы, әллә һин үҙең хужамы ваҡиғалар барышына? Һөнәрҙе үҙем һайланым, тиһеңдер ҙә ул, ә, бәлки, тәҡдирең шулайҙыр? Сибай дәүләт башҡорт драма театрының мэтрҙары, башҡаларға өлгө булған әйҙәүсе сәхнә оҫталары, Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Риф Ғәли улы СӘЙФУЛЛИН һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Зифа Ғаяз ҡыҙы БАЯЗИТОВА менән һөйләшкәндә ниңәлер яҙмыш төшөнсәһе ныҒыраҡ борсоно. Улар ғүмерҙәренең ярты быуатын тик бер генә, тыуған өйҙәрендәй күргән Сибай драма театрына арнағандар. Яҙмышмы был? Әллә? Әңгәмәне һорауһыҙ-ниһеҙ артистарҙың тормошо, яҙмышы, һайлаған һөнәрҙәренә тоғролоғо тураһындағы монолог рәүешендә тәҡдим итәбеҙ:**

***Зифа Ғаяз ҡыҙы:*** Беҙ - 1968 йылда асылған Өфө сәнғәт институтының актерлыҡ бүлеген беренсе булып тамамлаусыларҙан дүрт кеше - Хисмәтулла Дәүләтов, Риф Сәйфуллин, Вәкил Йосопов һәм мин Сибай театрына юлланма буйынса эшкә килдек. Йәмәғәтселек өсөн дә, тамашасылар өсөн дә юғары һөнәри белемле актерҙарҙың театр коллективын тулыландырыуы ҙур ваҡиға булды, сөнки юғары махсус белемле актерҙар Сибай театрында әлегә юҡ ине. Шуға күрә беҙгә баштан уҡ иғтибар бүленде - тамашасылар тарафынан да, мәғлүмәт сараларында ла йыш яҙҙылар, радио-телевидение гөрләп торҙо, көтөлмәгән хәл булды. Үҙем ошо төбәктә тыуып үҫкән ҡыҙ булғас, Сибай театрын яҡшы белә инем. Ул ваҡытта театр бәләкәй генә бинала, биш ҡатлы йорттоң ике бүлмәһендә урынлашҡайны. Беҙҙе матур итеп ҡабул иттеләр, ихлас ҡаршыланылар. Шундай шәп уҡытыусыларҙан белем алып, шул тиклем иғтибар бүленеп тә, насар эшләһәк йәки ошо театрға тоғро булмаһаҡ, был ҙур хыянат булыр ине. Исемдәре киң билдәле шәхестәр уҡытты беҙҙе. Өфөләге Рус драма театрының баш режиссеры булып эшләгән Ғабдулла Ғиләжев, ваҡытында "Ҡара йөҙҙәр"ҙе сәхнәләштергән Вәли Ғәлимов, талантлы режиссер Рафаэль Әйүповтарҙың дәрестәрен алдыҡ. Бейеү серҙәрен беренсе балеринабыҙ, Шәһит Хоҙайбирҙиндың ҡыҙы Тамара Хоҙайбирҙина өйрәтте. Таһир Кусимовтың килене Суфия Ғилман ҡыҙы Кусимова, аҙаҡ СССР-ҙың халыҡ артисы булып киткән кураторыбыҙ Гөлли Мөбәрәкова сәхнә теленән уҡытты. ГИТИС-ты тамамлап, Фәрдүнә Ҡасим ҡыҙы Ҡасимова уҡытырға килде. Ректорыбыҙ Заһир Исмәғилев үҙе генә ни тора! Эшкә килгәс, һуғыш ветераны, оҙаҡ йылдар Салауат театрында баш режиссер булып эшләгән күренекле режиссер Фәтхислам Ғәйнислам улы Ғәләүетдинов беҙҙе ҡуш ҡуллап ҡаршы алды һәм беренсе көндән үк йәмәғәт эштәренә лә, ижади эшкә лә екте. Уҡытыусыбыҙ Рафаэль ағай Әйүпов та беҙҙең арттан эйәреп, режиссер булып Сибай театрына эшкә килде. Курсташыбыҙ Ким Нәҙершин режиссерлыҡҡа уҡып бөтөп, бында эш башланы.

Таныш булған режиссерҙарға өйрәнеү ауыр булманы - улар беҙҙең мөмкинлектәрҙе, беҙ уларҙың талаптарын белә инек. Ул осорҙа тамашасы ла икенсе ине, бөгөнгө кеүек, интернеттағы, телефондағы, телевидениелағы шаҡы-шоҡо тапшырыуҙарҙан зауығы боҙолған тамашасы түгел ине, матурлыҡҡа ынтылыусы, театр сәнғәтен ысын күңелдән яратҡан, ышанған тамашасылар хөкөмөнә килдек. Әлбиттә, театрҙағы иң беренсе ролем хәтерҙә. Артист Фәниә Сәйфуллина декрет отпускыһына китергә тейеш ине, миңә уның ролен бирҙеләр. Ғабдулла Байбуриндың "Бар бер имән" спектакленән Гөлшат роле ине. Легендар актриса, Сибай театрына нигеҙ һалыусыларҙың береһе, Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған артисы Ғәшүрә Ирназарованы хаҡлы ялға оҙатҡан көндә минең тәүге премьерам, дебютым булды. 1973 йылдың сентябрендә булды был хәл. Шунан һуң инде роль өҫтәнә роль - эшләп кенә өлгөр. Гастролдәрҙән ҡайтмаһыҡ, бер ҙә зарланмай, май байрамы үтеп китеү менән сығып китә инек тә, июлдең аҙағында ҡайтып инә торғайныҡ.

***Риф Ғәли улы:*** Мин дә таныш инем театр менән, сөнки Сибайға килгәнсе үк ҡатыным Рәмилә Сәлимгәрәева, минән бер йыл алда сәнғәт училищеһын тамамлап, бында эш башлағайны. Театрға килеп йөрөнөм, үҙ теләгем менән килдем. Килеүен килдем, әммә бөтә ғүмерлеккә килдем, тип хис итмәнем, профессиональ сәхнәгә аяҡ баҫып, ике-өс йыл эшләгәс, башҡа театрға күсеү хыялы бар ине. Ике-өс йыл тигәнем ғүмерлек булып сыҡты. Эш башлауы ауыр булманы, сөнки уҡыу барышында беренсе курстан уҡ профессиональ сәхнәгә сыға башланыҡ, Башҡорт академия драма театрына, Рус драма театрына рәсми рәүештә баш режиссерҙар үҙҙәре саҡыра ине. Рус театрының баш режиссеры Ғабдулла Абдрахман улы Ғиләжев институтта ла дәрестәр алып барғас, беҙҙе яҡшы белә ине. Студент йылдарында уҡ Арыҫлан Мөбәрәков, Зәйтүнә Бикбулатова, Рим Сыртланов, Хөсәйен Ҡудашев кеүек бөйөк шәхестәр менән бергә сәхнәгә сығыуға ирештек. Улар менән аралашыу, сәхнәлә күреү, эргәләрендә бергә баҫып тороу үҙе ҙур мәктәп булды.



Икенсе-өсөнсө курстарҙа уҡ ролдәр бирә башланылар. Рус театрында Ғабдулла Абдрахман улы ҡуйған "Соловьиная ночь" тигән спектаклдә төп геройҙың дублеры булғаным хәтерҙә. Ул ролде Прибылов фамилиялы урта йәштәрҙәге актер уйнай ине. Ваҡиғалар емерек Берлинда бара. Төп герой арҡан буйлап үрмәләп, немец штандартын йолҡоп алып ташларға тейеш. Режиссер, кем менә, тигәс, теләк белдерҙем. Репетициялар ваҡытында бер ауырлыҡһыҙ арҡан буйлап менеп-төшөп йөрөнөм. Премьера ваҡытында төп герой костюмына кейендерҙеләр. Тулҡынландыра! Нисек менгәнем, нисек төшкәнем, бер нәмә лә хәтерләмәйем. Тәүге шауҡым, тамашасының тын алышы шул хәтлем һуғылғанмы икән, сәхнә артына сығып, бер аҙ торғас, ҡулдар яна, ҡараһам, ике ус та ҡабарып сыҡҡан.

***Тере йән менән күҙмә-күҙ ҡарап аралашыу халыҡтың ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә икән, театр йәшәйәсәк. Элек репертуар сәйәсәте лә икенсе ине, ябай халыҡты, ауыл кешеләренең проблемаларын күтәрә торған әҫәрҙәргә күберәк иғтибар бүленде. Тамашасы сәхнәлә барған ваҡиғаларҙа, таныш образдарҙа үҙен күрҙе. Бына шуға халыҡсан театр, тип атанылар беҙҙе. Халыҡсан тип әйтеү - ул үҙешмәкәр халыҡ театры менән сағыштырыуҙан түгел, артистарҙың моңло, аһәңле, зауыҡлы итеп ысын башҡорт телендә һөйләшеүенәндер, тим. Беҙҙең өсөн был ҙур баһа була ине.***

Сибайҙағы беренсе ролемде лә яҡшы хәтерләйем. Беренсе курстан һуң июнь айында килгәнемдә кәләш спектаклдә уйнап йөрөй ине. Буш йөрөмә, кәләшең, ана, гастролдә, шунда администратор бул, тип эшкә ҡушып та ҡуйҙылар. Шамил Шәғәлиҙең "Буран" тигән спектаклен уйнайҙар икән. Йәй көнө эҫе, былар һырма тун, аяҡтарына быйма, мамыҡ һырылған ыштан, баштарына малахай бүректәр кейеп уйнайҙар. Хәмзә ағай Ҡурсаев төп геройҙы уйнай. Ул, мин уйнағанды ҡарап өйрәнеп йөрө, ярҙам итерһең, тине. Йәш саҡ, хәтер һәйбәт, бер-ике аҙна күҙәтеп йөрөнөм дә, репетицияһыҙ-ниһеҙ уйнап алдым да киттем. Сибай театрындағы тәүге ролем шул булды. Яҙғы сәсеүҙәр башланғандан ураҡ еткәнсе һуҙылған гастролдәр тормошо менән йәшәй башланым.

***Зифа Ғаяз ҡыҙы:*** Гастролдәр ваҡытында, еләк-емеш йыйып, ҡайнатмалар әҙерләп өлгөрә торғайныҡ. Хәҙер аптырайым, балаларыбыҙға тәрбиә бирә алғанбыҙ икән - Аллаһҡа шөкөр, атай-әсәй, тип, ихтирам итәләр. Ғүмеребеҙ сәфәрҙә, тәгәрмәс өҫтөндә, юлда үтте. Ҡыш көндәре толоптар кейеп, юлһыҙ, ҡар ярып, бурандарҙа йөрөй инек. 1985 йылда шулай ҡар аҫтында ҡалып, саҡ үлмәй ҡалдым хатта. Ҡайҙа барһаҡ та, тамашасылар уратып алыр ине, урам буйынан үтеп китә алмай торғайныҡ. Маҡтанып та, ғорурланып та әйтәм: дүртәүләп нисек эшкә килдек, 50 йыл бергәбеҙ. Аяныс, ете йыл элек Хисмәтуллабыҙҙы юғалттыҡ. Бөтәһен дә аптыратып, ғүмерлек дуҫтар булып ҡалдыҡ. Ошо фиғелебеҙ беҙҙе күп ауырлыҡтарҙан ҡотҡарҙы.

***Риф Ғәли улы:*** Тамашасылар тураһында айырып әйтергә кәрәк. Хәҙерге заман тамашаһын ул осорҙағы тамашасы менән бер нисек тә сағыштырып булмай. 50 йыл үҙе бер ғүмер, был осорҙа бер нисә быуын тамашасы үҫеп сыҡты. Беҙ эш башлаған дәүерҙә спектакль ҡарар өсөн тамашасылар 10-15 километр алыҫлыҡтағы ауылдарҙан машина-тракторҙарға тейәлеп килә торғайнылар. Ул саҡта ауылдарҙа типовой клубтар ҙа юҡ ине, әммә тамашасылар һәр саҡ шығырым тулы була торғайны. Ә хәҙер ярым-ярты залға уйнарға тура килә, халыҡтың иғтибарын замана технологиялары үҙенә йәлеп итеп бөттө. Ә бит спектаклгә килгәндәр мөкиббән булып ҡарайҙар, шул тиклем ҡәнәғәт ҡалалар. Тик ана шул тамашасыларҙың кәмеүе нык йәнде ҡыя - тулы зал менән ярымзалға уйнауҙың айырмаһы шул тиклем ҙур. Элек, мәҫәлән, бәләкәй ауылдарҙа ултырыр урын булмаһа ла билет алалар ҙа, клуб тәҙрәләрен алып, тыштан тороп ҡарай торғайнылар. Халыҡ тәртипле ине, бушлай ҡарау, хәйләләү уйҙарында ла булманы. Спектаклдәр бөткәс, төрлө милли уйындар, ритайымдар башлана. Иртәгеһенә артистар өмәгә сығып, ауыл халҡына бесән сабыша ине. Фатирҙан-фатирға йөрөп, танышып, туғанлашып бөтә инек.

***Зифа Ғаяз ҡыҙы:*** Театрҙың репетициялар өсөн бәләкәй генә сәхнәһе була торғайны. Ҙур сәхнәләрҙә уйнап килһәк тә, үҙ шарттарыбыҙҙы, талаптарыбыҙҙы ҡуйманыҡ, сөнки ҡайҙа килгәнебеҙҙе белеп килдек. Театрҙа йәштәргә ҡарата мөнәсәбәт шул тиклем һәйбәт булды, бер ниндәй зарланыу, тәртип боҙоу, әрләш, талаш тигәнде хәтерләмәйем, эшләр өсөн шарттар тыуҙырыла торғайны. Унан ҡала, юғары белем алып, йүнәлтмә буйынса эшкә килгәндәргә бушлай фатир бирәсәктәрен дә белә инек, өмөтләнеп йәшәнек. Килеү менән генә булманы, әлбиттә, дөйөм ятаҡтарҙа йәшәнек, ләкин күпмелер ваҡыт үтеүгә, йәшәү шарттары яҡшыра барҙы. Был һәр заман өсөн дә бик мөһим. Беҙ ҙә бит ҡул ҡаушырып йөрөмәнек, дәүләт заказын үтәр өсөн өсәр айлап, өйгә ҡайтмай, гастролдәрҙә йөрөнөк. Үҙебеҙҙең ҙур сәхнәбеҙ булмағас, премьераларҙы әле Сибай концерт-театр берекмәһе урынлашҡан ҡалалағы берҙән-бер ҙур бинала (ул саҡтағы Октябрҙең 40 йыллығы исемендәге мәҙәниәт йорто) үткәрә торғайныҡ. Унан ҡалды ниһә, Иҫке Сибайға барып, премьераны уларҙың клубында уйнай торғайныҡ. 2004 йылда яңы бина төҙөлгәс кенә сәхнәле булдыҡ. Театрҙың кимәле күтәрелеүен бөтә ерҙә лә билдәләнеләр, үҙгәрештәр күҙгә күренеп һиҙелде, ҡайҙа барһаҡ та, Сибай театры ысын моңо, аһәңе менән һөйләшкән башҡорт театры, унда һәләтле йәштәр эшләй, тип ҡаршы ала тоғайнылар. Ысынлап та, бер-бер артлы йәш көстәрҙең килеүе театрҙың йөҙөн үҙгәртте. Гастролдәрҙең маршрут географияһы ла киңәйҙе, Силәбе, Ҡурған, Пермь, Ырымбур, Свердловск, Татарстан тамашасыларын хеҙмәтләндерә башланыҡ, Мәскәүҙә, Петербургта ла булдыҡ. Хөкүмәт тарафынан да театрға иғтибар ҙур булды.

***Риф Ғәли улы:*** Ул ваҡытта йүнле транспорт та юҡ ине, әммә Татарстан, Свердловск, Силәбе өлкәләрен йылына ике тапҡыр ике бригада менән урап йөрөп ҡайта инек. Хөкүмәт яғынан иғтибар булды тигәндән, 1988 йылда Өфөгә гастроль менән барырға тейеш инек. Ҡа-

✓ *Балыҡ - тәрәнерәк, кеше яҡшыраҡ урынды эҙләй, тиһәләр ҙә, беҙҙең дәүерҙә бер эш урынынан икенсеһенә күсеү тигән нәмә булманы. Ижади коллективтың төплө булыуы, эш менән тәьмин ителеү, үҙеңде кәрәкле тойоу мөһим ине.*



# ЯҘМЫШ

тыным икенсе бала - Айһылыу менән декрет ялында ултыра. Ул ике спектаклдә лә төп героиняны уйнай ине. Ҡала партия комитетынан өйгә махсус килеп белештеләр: Рәмилә Өфөгә бара аламы-юҡмы, әгәр барһа, бер үҙен самолет менән алып барасаҡтар. Шулайтып, ул самолетта барып, ике спектаклдә уйнап ҡайтты.

***Зифа Ғаяз ҡыҙы:*** Әлбиттә, минең дә ситкә китергә мөмкинлектәр булды, әммә театрыбыҙға хыянат итмәнек, ошонда кеше булдыҡ, артист булдыҡ, ниндәйҙер кимәлдә театр тарихын яҙҙыҡ, булмышына йоғонто яһаныҡ.

***Риф Ғәли улы:*** Балыҡ - тәрәнерәк, кеше яҡшыраҡ урынды эҙләй, тиһәләр ҙә, беҙҙең дәүерҙә бер эш урынынан икенсеһенә күсеү тигән нәмә булманы, һуңғы йылдарҙа көсәйҙе ул. Ижади коллективтың төплө булыуы, эш менән тәьмин ителеү, үҙеңде кәрәкле тойоу мөһим ине.

***Зифа Ғаяз ҡыҙы:*** Беҙ карьера тигән нәмәне уйлап та бирмәнек, төп эштән тыш башкөллө йәмәғәт эштәренә лә сумдыҡ. Риф партойошма секретары булһа, мин ҡала кимәлендәге бөтә сараларҙы алып барыусы булдым, аҡсаға эшләү уйыбыҙҙа, хатта хыялыбыҙҙа ла булманы, бер тинһеҙ, бушҡа эшләнек. Киреһенсә, ана шул ихласлыҡ ижади яҡтан, профессиональ яҡтан үҫешергә ярҙам да иткәндер. Кеше бит нимәгәлер инанып йәшәй, нимәгәлер ынтыла, ҡайҙандыр кәңәштәр алғыһы, нимәгәлер табынғыһы, үҙенең көндәлек тормошонан, ҡайғы-хәсрәттәренән, көнкүрештән айырылғыһы килә. Бына шул ваҡытта бер-ике сәғәткә театрға барып, онотолоп, хыялдар донъяһына, йыр-моңға, матур телмәргә сумып ултырыуҙың тәрбиәүи йоғонтоһо ҙур. Халыҡтың театрға ҡарата ихтыяжы һәр ваҡытта ла бар. Ниндәйҙер кимәлгә еткәс кенә, кеше театрға ынтыла башлай. Театр - ул матурлыҡ донъяһы, кеше ана шул матурлыҡ менән осрашҡыһы килә.

***Риф Ғәли улы:*** Кеше үҙенең рухи талаптарына яуап эҙләй. Театр сәнғәте теүәл ғилем кеүек, ике икең дүрт буланы аңлатыуҙы маҡсат итеп ҡуймай, ул проблемаларҙы күтәрә генә, аныҡ юл күрһәтеп, ана шунда барығыҙ, тип, тура юл күрһәтмәй. Ҡайһы ваҡыт, театр бөтә, тигән фекер ишетергә тура килә. Быны менән һис тә килешә алмайым. Театр - ул тере организм, ул тормош менән бергә атлай, хатта алдараҡ бара. Шуға күрә театр буласаҡ, ул кәрәк. Күҙгә-күҙ ҡарап осрашыу донъяһы бит ул. Киноны төшөрәләр ҙә, ул шул килеш ҡала, ә театрҙа уйнау бөгөн бер төрлө, иртәгә икенсе төрлө булырға мөмкин. Бөгөн спектаклдә бер төрлө уйнаһам, бер ай, бер йылдан бөтөнләй икенсе төрлө уйнауым бар.

***Зифа Ғаяз ҡыҙы:*** Мәҫәлән, мөмкинлек булып, баш ҡалаға барһам, коллегаларымдың эштәре менән дә ҡыҙыҡһынам, уларҙың яңынан-яңы уйнауы ҡыҙыҡ миңә. Үткән йыл Мәскәүҙә булырға тура килде. Ҡайһы театрға барһам да, халыҡ шығырым тулы, тимәк, халыҡтың, тамашасының ихтыяжы һүнмәгән. Тере йән менән күҙмә-күҙ ҡарап аралашыу халыҡтың ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә икән, театр йәшәйәсәк. Элек репертуар сәйәсәте лә икенсе ине, ябай халыҡты, ауыл кешеләренең проблемаларын күтәрә торған әҫәрҙәргә күберәк иғтибар бүленде. Тамашасы сәхнәлә барған ваҡиғаларҙа, таныш образдарҙа үҙен күрҙе. Бына шуға халыҡсан театр, тип атанылар беҙҙе. Халыҡсан тип әйтеү - ул үҙешмәкәр халыҡ театры менән сағыштырыуҙан түгел, артистарҙың моңло, аһәңле, зауыҡлы итеп ысын башҡорт телендә һөйләшеүенәндер, тим. Беҙҙең өсөн был ҙур баһа була ине. Ғабдулла Әхмәтшин, Нәжип Асанбаев кеүек күренекле драматургтар менән эшләү ҙә театрға бәҫ өҫтәй ине, улар театрға килеп, үҙҙәренең әҫәрҙәрен уҡырҙар ине, фекер алышыуҙа теләктәребеҙҙе әйтһәк, пьесаларына төҙәтмәләр индерәләр, яңынан уҡыйбыҙ, шулай яҙыусылар менән ижади бәйләнеш була торғайны.

***Риф Ғәли улы:*** Күп авторҙар үҙҙәренең драматургиялағы тәүге аҙымдарын беҙҙә эшләне. Наил Ғәйетбаев, Таңсулпан Ғариповаларҙы беҙҙең театр асты. Рәмил Ҡолдәүләт, Буранбай Исҡужиндарҙы күтәрҙек. Әйткәндәй, билдәле драматург Флорид Бүләковты ла беҙ башлап ҡуйҙыҡ. Үкенестәр юҡ, тик яҡты хәтирәләр генә күңелгә уйылып ҡалған. Башта әйткәнемсә, ике-өс йыл эшләп, аяҡҡа баҫам да, перспективалыраҡ академтеатрға күсәм, тигән уй бар ине. Ундай мөмкинлек тә булды. Театрҙа бер йыл эшләгәндән һуң, ул ваҡытта йәш актерҙар өсөн үткәрелгән конкурста ҡатнашып, еңеүсе булдым. Дөрөҫөрәге, Әхтәм Әбүшахманов менән беренсе урынды икәүләп бүлештек. Ул Салауат ролен башҡарып, атҡаҙанған артист исеме алғайны ул ваҡытта. Ғәҙәттә, еңеүселәрҙе путевкалар менән бүләкләй торғайнылар, икебеҙгә лә Мәскәүгә теләгән театрҙарҙа бушлай спектаклдәр ҡарарға саҡырыуҙар бирҙеләр. Ҡунаҡханала йәшәү буш, юл хаҡы түләнгән. Хөрриәт! Мәскәүҙә Чехословакиянан ҡайтып килгән Лек Вәлиев менән осраштыҡ. Ул, ҡайтаһың да, академтеатрға күсәһең, ти. Рәмиләгә әлегә урын юҡ, икенсе берәй эшкә алырбыҙ, актриса булараҡ уйнаясаҡ, ти. Алһағыҙ, икебеҙҙе лә алығыҙ, былай риза түгелбеҙ, тип баш тарттыҡ. Шундай бер нисә саҡырыу булды: Салауат театрынан Вәзих Сәйфуллин саҡырҙы, Стәрлетамаҡты яңы асылған театрға Гөлдәр Ильясова ла ҡоҙаланы. Сибай татрын үҙемдең театрым тип ҡарауҙандыр, ҡуҙғалманым. Икенсе эш урынында үҙеңдең кемлегеңде яңынан иҫбатларға кәрәк, ә бында өйрәнгәнмен, бер ғаилә ағзаларына әйләнгәнбеҙ, күсеү икенсе ғаиләгә барыуға бәрәбәр һымаҡ тойолдо.

***Зифа Ғаяз ҡыҙы:*** Мин ни, Сибай театрына бала саҡтан берекkәнмен, ереккәнмен, ошо театр спектаклдәрен ҡарап үҫтем. Бала сағымда уҡ артистар беҙгә фатирға төшөр, атай-әсәйемдәр менән аралашырҙар ине. Улар икеһе лә уҡытыусы булды, ауылда иң тәүҙә интеллигенцияға вәкилдәренә мөрәжәғәт итәләр бит. Сибай театрына килгәнсе үк уның тарихын белә инем, әле лә ете төн уртаһында уятып һораһындар, үҙем эшләгән театрымдың тарихын яттан беләм, сөнки үҙебеҙҙең театрыбыҙ, тип, ошонда ныҡлы аяҡ баҫып йәшәнек.

***Риф Ғәли улы:*** Театр - сәнғәт иле. Ошо ҡаҙан эсендә ҡайнаған һәр артистың үҙ эшенә ҡарата шәхсән фекере, ҡарашы бар. Йәштәргә тәүге теләгем - эште, профессияларын ратһындар, шунһыҙ театрға аяҡ та баҫмаһындар, яҡын да килмәһендәр. Режиссерҙар тураһында әйтеп тораһы ла кәрәкмәй, улар актерҙарҙы өйрәтә торған кешеләр, уларҙың белеме, тәжрибәһе актерҙарға ҡарағанда күпкә юғары булырға тейеш.



***Зифа Ғаяз ҡыҙы:*** Мин театрға осраҡлы кешеләр килергә тейеш түгел, тип уйлайым. Махсус профессиональ белемле, әҙәбиәт, сәнғәт буйынса ҙур багаж туплай алғандай кешеләр эшләргә тейеш театрҙа. Актриса һөнәрен һайлағандар тәрбиәле булырға тейеш, белемле лә, шул уҡ ваҡытта, ҡатын-ҡыҙ булараҡ, үҙен дә ҡарай белергә тейеш. Үҙем, мәҫәлән, ошо йәшемә еткәнсе биҙәнмәйенсә, үҙемде ҡарамайынса кешеләргә күренгәнем юҡ. Мотлаҡ рәүештә режим һаҡлап йәшәйем. Өс балам булды - һуңғылары игеҙәктәр. Улар ҙа, бәләкәй саҡтарынан ниндәй режимға өйрәткәнмен, шулай йәшәйҙәр. Ҡатын-ҡыҙ иртә менән тора, балаларын тәрбиәләй, ашата-эсерә, балалар баҡсаһына йәки мәктәпкә алып бара, ғаиләһенә ваҡытында аш әҙерләй. Бөгөнгә тиклем шул режим буйынса йәшәйем, бөтөн эшенә лә өлгөрәм - баҡсаны ла ҡарайым, йортомдағы эштәргә лә өлгөрәм. Аллаһҡа шөкөр, ҡыҙҙарымдың да ҡулдарынан килмәгән, белмәгән эштәре юҡ, ул ҡул эштәре тиһеңме, башҡаһымы. Былар бөтәһе лә әсәй, ҡатын-ҡыҙ, актриса тәрбиәһе. Мин эшкә барғансы уҡ төшкө ашым бешкән, иҙәнем йыуылған була. Хәҙерге йәштәр тураһында әйтә алмайым, беҙ үҙебеҙ апайҙарҙан өйрәндек. Сумаҙан өҫтөнә сумаҙан тотоп, гастролгә сыҡҡанда әйберҙәрҙе нисек тултырырға ла белмәй ултырыла торғайны. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Мөнирә апай Әхмәтғәлиева лөғәтләп, һәр бер әйберҙе нисек тултырырға өйрәтеп ултыра торғайны.

Элек махсус белемле йәштәрҙең Сибай театрына килергә теләге була тоғайны, хәҙер ижади тәжрибә туплап, китеүселәр йышая, шул эсте бошора. Күптәр баш ҡалала ҡалырға тырышалар, сөнки унда үҫеү, үҙен төрлө яҡлап асыу өсөн мөмкинлектәр күберәк: радио-телевидениеға йөрөйҙәр, төрлө кинопробаларҙа ҡатнашалар, Сибайҙа йәштәр өсөн ул тиклем ҡыҙығырлыҡ нәмәләр юҡ. Элекке һымаҡ 3-5 йыл мәжбүри бер урында эшләү талабын тергеҙергә кәрәктер, белмәйем.

Сәхнәлә үткән илле йыл ғүмеремде иҫләһәм, илағым килә хатта. Кисә генә эшкә килгәнмен һымаҡ. Бөтәһе лә булды: ҡағылған, һуғылған, рәнйетелгән саҡтар ҙа, ләкин бирешелмәне, үҙемде ҡулға алып, аяҡҡа баҫып, кемлегемде иҫбатланым. Тормошомда юғалтыуҙар ҙа күп булды. Тормошҡа сығып, ике тапҡыр тормош иптәшемде юғалттым. Атай-әсәйҙәрҙе юғалтыу ғәҙәти хәл һымаҡ, әммә улар ҙа эҙһеҙ ҡалмай. Баламды юғалттым, ләкин бер ваҡытта ла кешелек сифаттарын юғалтманым, бер ваҡытта ла кешегә этлек эшләмәнем. Кемгә ниндәй яҡшылыҡ эшләп булыр, кемдән ниндәй рәхмәт алып булыр икән, тип, кискеһен ятҡан һайын уйлап ятам. Шуға күрә мине ихтирам иткән, минең менән аралашырға теләгән дуҫтарым күп. Бына ошо тойғолар мине йәшәтә. Үткән тормошома үкенмәйем - һөйҙөм дә, һөйөлдөм дә, әсәй, өләсәй булыу бәхеттәрен татыным. Өлкән өләсәй мин хәҙер! Ейәнемә инде утыҙ йәш! Балаларым үҙҙәре яратҡан һөнәрҙәрҙе алдылар. Игеҙәк ҡыҙҙарымдың береһе йәштәр театрында актриса, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, икенсе ҡыҙым Башҡортостан телевидениеһының "Тамыр" студияһында режиссер. Эшһөйәрҙәр, ҡулдарынан килмәгән эштәре юҡ, ғаиләләре һәйбәт йәшәй. Мәрхүм булған малайымдың улы, ейәнем Динислам өйләнде. Ғафури районы хакимиәтенең финанс бүлегендә баш белгес булып эшләй. Ике балалары бар. Ҡатын-ҡыҙ татый торған бөтә нәмәне лә татыным.

***Риф Ғәли улы:*** Киренән профессия, эш урыны һайларға тура килһә, моғайын, шул уҡ юлды ҡабатлар, һис бер нәмә лә алыштырмаҫ инем. Балаларым, Аллаһҡа шөкөр, икеһе лә тура минең юлды һайламаһалар ҙа, сәнғәт өлкәһендәләр. Ҡыҙым - скрипкасы. Рәсәй кимәлендәге данлыҡлы скрипкасы! Улым - режиссер. БСТ-ла һәләтле, аҡыллы режиссер. Олатаймын. Ике ейәнем бар. Эшемде, профессиямды яраттым, ғүмерлек һөнәр булды. Ошо юлды һайлағаныма һис кенә лә үкенмәйем. Сибай театрын бер нәмәгә лә алыштырмаҫ инем. Китмәнем, ҡалдым. Әммә илле йыл йәшәһәм дә, был яҡты үҙ итә алманым. Театр өйөм, үҙ ғаиләм кеүек. Ул миңә яҡын да, әммә тыуған яҡ яҡыныраҡ. Бөтә ғүмерем ошонда үтте, һигеҙенсе тиҫтәне ваҡлаған ирмен. Тыуған яғыма бик йыш ҡайтам, туғандарым, балаларым Өфөлә булғас, шунда булам. Ауылға ҡайтып, атай-әсәйҙең ҡәберенә зыярат ҡылам. Атай нигеҙендәге өй бар, унда аҙна-ун көн булып китәм. Академтеатрҙа эшләһәм, үҫеш икенсе төрлөрәк булыр ине бәлки. Ләкин бындағы эшләгән кеүек унда эшләй алмаҫ инем. Актер профессияһында уйнамайһаң, актер булып булмай. Ә мин ғүмерем буйына йөҙөп йөрөп уйнаным! Актерға шунан башҡа ни кәрәк!

***Кеше үҙенең рухи талаптарына яуап эҙләй. Театр сәнғәте теүәл ғилем кеүек, ике икең дүрт буланы аңлатыуҙы маҡсат итеп ҡуймай, ул проблемаларҙы күтәрә генә, ана шунда барығыҙ, тип, тура юл күрһәтммәй. Ҡайны ваҡыт, театр бөтә, тигән фекер ишетергә тура килә. Быны менән һис тә килешә алмайым. Театр - ул тере организм, ул тормош менән бергә атлай, хатта алдараҡ бара. Шуға күрә театр буласаҡ, ул кәрәк. Күҙгә-күҙ ҡарап осрашыу донъяһы бит ул. Киноны төшөрәләр ҙә, ул шул килеш ҡала, ә театрҙа уйнау бөгөн бер төрлө, иртәгә икенсе төрлө булырға мөмкин. Бөгөн спектаклдә бер төрлө уйнаһам, бер ай, бер йылдан бөтөнләй икенсе төрлө уйнауым бар.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Монолог, дөрөҫөрәге, ике монолог тамам. Ә бит беҙҙең һәр беребеҙҙең күңелендә төрлө һүҙҙәрҙән туҡылған текст булып, тышҡа сығыуҙы көткән монолог йөрөй. Йәнебеҙ тыныс, күңелдәребеҙ күтәренке булһын өсөн ваҡыты-ваҡыты менән бушанып алыу кәрәк. Бәлки, һинең монологың башҡалар өсөн фәһем булыр? Был осраҡта үткәндәр менән бөгөнгө араһындағы хәтирәләр күпере күп йәштәр өсөн ҙур фәһем булыр, моғайын.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

***✓ Ғилмишәрифтең Германиянан "ауылға бер үҙем генә ҡайтмайым, өс йыл һуғыш утын бергә йотҡан, йән дуҫым менән ҡайтып төшәм", - тип яҙған һуңғы хаты йөҙ өйлө Ялан ауылының аҫтын-өҫкә килтерҙе.***

Рамаҙан ӨМӨТБАЕВ

# АТЛЫ БАШҠОРТ

Повесть



Ғилмишәрифте атҡа атланған көйө күргеләре килде. Уны фотоға төшөрҙөләр. Китәһе көнө йөҙөнә: "С этой боевой шашкой отважный кавалерист Яуымбаев с боями прошел от Сталинграда до Бранденбурга", - тип яҙылған, суҡлы ебәк эфеслы ялтлап торған өр-яңы ҡылыс тапшырҙылар. Эскадрон командиры, ҡыҫҡа ғына телмәр һөйләп, полк командованиеһының иҫтәлекле яҙыуын уҡығас, Ғилмишәрифтең тамам күңеле тулды, йәнә күҙенә йәш эркелде.

Ғилмишәриф ҡылысты ҡабул итеп алғас, башын эйеп, өс тапҡыр үпте лә дерелдәгән бармаҡтары менән ҡылысын биленә таҡты. Эскадрон командиры:

- Геннадий, бәлки, бер нисә һүҙ әйтерһең? - тип бышылданы. Башҡорт егетенең һүҙ әйтерлек хәле ҡалмағайны, өҙәңгеһендә баҫа биреп, тын алды ла:

- Барыһы өсөн дә рәхмәт һеҙгә, иптәштәр! - тип ҡысҡырҙы. Уның тыныс, әммә ысын йөрәгенән сыҡҡан тауышы иптәштәренең көслө "Ура!" оранына барып тоташты. Аҙаҡтан инде эскадрон командиры Ғилмишәрифкә полк командованиеһының күстәнәсен тапшырҙы.

"Вольно, разойдись!" командаһы яңғыраны. Кавалеристар быны уратып алды.

- Ну, малай, килештерәһең! Ат өҫтөндә ултырыуыңды ҡара!

- Генерал да и только!

- Ауыл бисәләренең йөрәген яндыраһың инде!

Кисен Ғилмишәрифтең башына уй төштө: "Туҡта әле, күктән төшкән шикелле, бөтөнләй хәбәр-хәтәрһеҙ, ҡайтып төшөү килешмәҫ", - тип Германия иленән ҡатыны Райханаға һуңғы хатын яҙып һалырға булды. "Йәш күкрәгенән урғылып, ҡайнарланып-парланып сыҡҡан ялҡынлы сәләмдәрен" ҡатыны, бала-сағаһына, туған-тыумасаһына бәйнә-бәйнә теҙеп сыҡты ла, аҙағына түбәндәге юлдарҙы өҫтәне: "Ҡәҙерле йәмәғәтем Райхана! Мин ҡайта тип артыҡ өҙгөләнмә. Бары белән байрам. Тормошоғоҙҙо күрмәһәм дә ни рәүешле икәнен аңлап торам. Һиңә шул да мәғлүм булһын: ауылға бер үҙем генә ҡайтмайым. Өс йыл һуғыш утын бергә йотҡан, фронттың йәмғе әсе-сөсөһөн минең менән ҡуша татыған йән дуҫым менән ҡайтып төшәм. Хәҙергә уның кем икәнлеген яҙмайым, күҙмә-күҙ осрашып күргәс танышырһығыҙ, һеҙҙе бер күреүгә зар-интизар булып, һағынып, ҡәләм тибрәтеүсе ирең һәм балалар атаһы Ғилмишәриф".

## XIV

Вагонға килеп ингәс тә, Ғилмишәрифтең дә, атының да өр-яңы өҫ-башына, ялтырап торған һары күндән эйәр-өпсөнөнә ҡарап яңы юлдаштары ғәжәпләнеп ҡуйҙы. Көнләшеү, ғәжәпләнеү тойғоһо һирпелгән ҡараштан уңайһыҙланыпмы, Ғилмишәриф ситкә боролдо: ят кавалеристарҙың береһе, күрәһең, абруйлырағы инде, дуэлгә сығырға йөтешләнгән шикелле, ҡылысының эфесына тотондо ла:

- Эй, земляк, нимә унда һыуыр һымаҡ яҡтыға сығырға ҡурҡып ултыраһың? Кил бында, тәмәкең бар икән, ҡунаҡ булырһың, - тип һөрәнләне.

Ә икенсеһе, күрәһең, иптәшенең өндәшеүен йомшағыраҡ тойоп, һүҙҙе етдиерәк һуҡмаҡҡа төшөрөргә уйланы.

- Ул һиңә ҡайҙан төшөп ҡалған земляк була һуң?

- Ә как же, беҙ уның менән Берлин юлында бер ҡояш йылыһында сылғау киптергәйнек, - тип телләште теге.

- О, улай булғас, ул һинең бик яҡын дуҫың икән.

- Ул ҡәҙәре яҡын булғас, бәлки, гражданкала икәү бер ҡыҙға йөрөгәнһегеҙҙер әле!

- Булғандыр, булғандыр, - Ғилмишәриф кеҫәһенән еҫе аңҡып торған еңел тәмәке сығарҙы ла тегеләр янына барып баҫты. Ят юлдаштары шунда уҡ ҡағыҙ йыртып, ҡулдарын уға һуҙҙы, хуш еҫле тәмәке һура-һура, быныҡ кемлеген, ҡайһы полкта, нисек хеҙмәт итеүен төпсөнөргә тотондолар. Ғилмишәриф әллә ни асылып барманы. Өҫтән-мөҫтән генә таныштырҙы үҙе менән. Әммә күкрәгендәге ялтлап ҡалған орден, миҙалдарын күргәс, тегеләрҙең мөнәсәбәте бермә-бер үҙгәрҙе.

- Бына, исмаһам, был иптәш һуғышҡан тиһәң дә ярай! Үҙ атың менән ауылыңа ҡайтып төш әле! - тине. - Ох, егеттәр, бөтә боевой снаряжение менән атыңа атланып ҡайтып төш тә, ҡылыс эфесының төбө менән Маньканың тәҙрәһен шаҡып тор ине, әй!

Преемництан ҡуҙғалып киткәндең егерменсе көнөндә атлы ғәскәр тейәлгән эшелон, Ғилмишәрифте үҙ аты менән Ҡарталы станцияһында ҡалдырып, көнсығышҡа елде. Ҡола ялан уртаһында ултырған Ҡарталының тиреҫтән өргән һалҡын әсе еле йылы теплушкаға өйрәнеп өлгөргән ике юлсыны өтөп алды. Ғилмишәриф станция начальнигына инеп документтарын күрһәтергә, атына ла, үҙенә лә әүҡәт-фураж таптырырға, берәр йылы урын булмаҫмы, тип әйтергә уйлағайны. Ләкин асыҡ платформа тура килеүенән, юлда аты менән ҡуша туңып ҡуйыуынан ҡурҡып, артабан һыбай сығырға булды. Ауылдарға һуғыла-һуғыла, өсөнсө көнөндә Ялан ауылынан илле саҡрымда ятҡан үҙ станцияһына килеп етте.

Ғилмишәрифтең Германиянан "ауылға бер үҙем генә ҡайтмайым, өс йыл һуғыш утын бергә йотҡан, фронттың йәмғе әсе-сөсөһөн үҙем менән ҡуша татыған йән дуҫым менән ҡайтып төшәм", - тип яҙған һуңғы хаты йөҙ өйлө Ялан ауылының аҫтын-өҫкә килтерҙе. Иң башта ошо һүҙҙәр өс йыл буйы уны тилмереп көтөп ултырған Райханаһының йөрәген телгеләне. Күҙ йәштәрен тамыҙа-тамыҙа, хаттың шул урынын ҡат-ҡат уҡыны. Иҫ белә башлаған өлкән ҡыҙы Миңленур: "Әсәй, нишләп шул тиклем илайһың, атайым ҡайтам тип яҙған да инде", - тип тынысландырырға тырышты. Ә әсәһе уның һайын быуылып иланы.

Тынныслана төшкәс, кәштәлә ятҡан көҙгө киҫәген алып оҙаҡ ҡына үҙ-үҙенә текләп ултырҙы. Ҡайһы ерем килешмәне икән был аҙғын иргә? Әүрәп йөрөгән кешеһе ниндәй бисә икән? Мәрйәлер, ату кем булһын, Германиянан немец бисәһен тоттороп ҡайтармаҫтар бит инде?

Ғилмишәрифтең абайламайыраҡ яҙған һүҙҙәре хат эсендә генә ятып ҡалманы, күрше-күлән ҡолағына ла барып етте. Ялан ауылының бөтә өйҙәрен урап сыҡты. Ә оҙон ҡолаҡ ҡәйенеңгәһе:

- Ишеттегеҙме, Ғилмишәриф ҡәйнеш Германиянан килен алып ҡайтып килә, ти бит! Йәнтүрә ҡарттың әфисәр малайы бер кахул алып ҡайтҡайны, был унан да арттырып ебәрә икән, - тип сурытты. Ҡалғандары тағы өҫтәне:

- Бына һиңә яр аҫтынан яу сыҡҡан! Һуғышҡа киткәндә бер шомбай ғына кеше ине, сит ерҙәрҙә йөрөп кеше лә йышылалыр, күрәһең.

- Балалары йәл бит әле. Берреһенән-бере матур ғына үҫеп килгән өс балаһы бар.

Көнсөлөрәктәре:

- Әйҙә, беҙ генә страдать итмәйек әле, иренә арҡаланып күп ултырҙы! Беҙ күргәнде Райхана ла татыһын, - тине. Ә ҡайһы бер әсе теллерәктәре:

- Китсе, китсе, әҙәм страмы! Ғүмер баҡый ирһеҙ ултырһам да, шул көтөүсене ҡосаҡлап ятаһым юҡ! Уға барған кешеһен дә әйтер инем инде, - тип ебәрҙе.

## XV

Ошо мәлдә Ғилмишәриф, ауылға ла еттем тип, үҙен һәм атын һуңғы тапҡыр тәртипкә килтереп, Ҡыҙыл йылғаһына терәлеп тигәндәй ятҡан текә ҡабаҡ өҫтөндә һыбай тора ине. Ул күҙҙәрен тыуған ауылы тирәһендәге таныш яландарға текәлгән армыт-армыт булып төньяҡтан көнсығышҡа һуҙылған күк Ирәндек һырттарын, Йәнгүҙәй, Күсем таштарын күргәс, һуғыш йылдарында үҙ юлдашы булған берҙән-бер көйөн һуҙып ебәрҙе.

*Алыҫтарҙан күгәреп әй күренгән*
*Болот микән, әллә тау микән?*
*Минең генә ғәзиз туғандарым*
*Ошо донъяларҙа бар микән?*

Ирәндектең урта һыртынан һулдараҡ Билән тауҙы күргәс, Зәһретдинды иҫенә төшөрөп кубанкаһын систе, оҙаҡ ҡына шул түбәгә ҡарап торҙо. "Ошо түбәнең итәгендә өйкөм-өйкөм сауҡалыҡтар араһында ултырған таҡтөйөндә алтын ҡабул итә торғайны бит Зәһретдин ағай. Хәҙер алтыны ла, үҙе лә юҡ. Ҡуян-Сағыл түбәһендә әллә ҡайҙарҙан күренеп ултырған өс тағанлы тимер маяҡ та юҡ. Кемгә хәжәт булды икән? Әмин ҡыуағының кәртәһен дә емереп ташлағандар. Ә түбәнендәге ҡыуағының эҙе лә ҡалмаған. Өс тирәктең береһе генә тороп ҡалған. Ҡырҡып яҡҡандарҙыр инде. Ҡыҙыл йылғаһы йырындары буйындағы таллыҡтар ҡайҙа? Бомба төшмәһә лә, снаряд, миналар шартламаһа ла һуғыш шауҡымы бында ла килеп еткән, уның афәт еле минең тыуған яҡты ла ялмап үткән икән. Тик бына бер Салғыя ташы ғына киткәндә нисек ҡалһа шулай ултыра. Хатта ул да тәпәшәйеп, ергә һеңгән шикелле.

Ҡапыл текә ҡабаҡ аҫтында, тигеҙ табаға һибелгән борсаҡ шикелле йөрөп ятҡан аттар күренде. Арыу-талыуҙан тик кенә торған Әүхәҙи бөтә кәүҙәһе менән һелкенде лә, башын күтәреп улар яғына боролдо. Шунан морон тишектәрен тырпайтып сыңратып кешнәп ебәрҙе. Айғырҙың көслө тауышы текә ҡабаҡ ташына бәрелде лә әллә ҡайҙарға барып һүнде. Сит илдәрҙә йөрөп ҡайтҡан ҡәрҙәшенең сәләмен алып бейәләр ҙә нескә генә кешнәп яуап бирҙе.

Хәҙер айғырҙы тотоп тороуы ҡыйын. Ғилмишәриф Әүхәҙиҙе Ҡыҙыл йылғаһы буйына борҙо. Эсһен әле шуның һыуын туйғансы, һағынғандыр. "Әйҙә, Днепр, Висла һәм Одерҙарҙа ла һуғарҙым мин һине, үҙебеҙҙең Ҡыҙылдыҡынан да татлыраҡ, шифалыраҡ ниндәй һыу булһын?" - тип һөйләнде.

Ана Ҡыҙылдың арғы ситендә бер ҡыҙ бала тулы биҙрәләрен ергә ҡуйған да, ике күҙен Ғилмишәриф яғына текләп, ҡатып ҡалған. Ҡарап торҙо-торҙо ла ике ҡулын ике янбашына һуҡты:

- Атаҡ, атаҡ, Ғилмишәриф ағай, һин түгелме һуң?!

Ғилмишәриф ҡыҙҙы танымаңы, шулай ҙа:

- Өҫтөнә баҫтың! - тип һөрәнләне йылға аша. Ҡыҙ көйәнтәһен ырғытты ла тыҡрыҡтан ауылға йүгерҙе. Ихатаға етер-етмәҫтән тыны бөтөп:

- Райхана еңгә, һөйөнсө! Ғилмишәриф ағайым ҡайтып килә! - тип ҡысҡырҙы. Аш-һыу әҙерләп йөрөгән Райхана яулығын төҙәтә-төҙәтә, еүеш ҡулын итәгенә һөртә-һөртә, йүгереп урамға сыҡты:

- Ҡайҙа? Бер үҙе генәме? Янында бисә-фәлән юҡмы?

- Ниндәй бисә? Һыбай килә ята ла!

Ул да булмай артынан бер көтөү бала-саға эйәртеп һылтыҡлаған атына атланып Ғилмишәриф үҙе өй алдына килеп туҡтаны. Шул ыңғайҙан атынан һикереп төштө лә ни ҡылырға ла белмәй аптырап торған ҡатынын ҡосаҡланы:

- Райхана, илама, шатлан! Ҡайттым бит! - тип бышылданы. Шунан атаһы эргәһенә яҡын килергә баҙнат итмәй торған кинйә малайын күтәреп алды: - Үәт, минең донъя көтә торған малайым! Ҡайһылай үҫеп киткән! - Шунан бер атҡа, бер ҡылыслы кавалерисҡа ҡарап ҡатҡан ауылдаштары эргәһенә атланы. Барыһы менән дә ҡул бирешеп ихлас күрешеп сыҡты.

Ишек алдында кеше күбәйгәндән-күбәйә. Һуғышсының да хәлен һорашалар, хәтәр эйәр-өпсөн менән эйәрләнгән Әүхәҙиҙе лә тикшерәләр.

- Ҡарап-ҡарап торам да, ҡустым, менеп ҡайтҡан малың беҙҙең яҡтың йылҡыһына оҡшай түгелме? - тип һораны бер ҡарт.

- Насырйән ағай, үҙебеҙҙең өйөр айғыры Әүхәҙи ҙә баһа! Танымайһыңмы ни? Һуғыш утын бергә үтеп, бына насип булғас, шуның менән ҡуша Яланға ҡайтып төштөк.

Ғилмишәрифтең яуабын ишеткәс, кешеләр бер аҙ телһеҙ ҡалды, ышанмағандай, йәнә атты уратып ҡарарға тотондолар. Шунан йәнә һораша башланылар, ғәжәпләнеүҙәренән телдәрен шартлаттылар:

- Ҡара һин, әйтһәң, әҙәм ышанмаҫ! Кире әйләнеп ҡайтҡан тиһең, ә?!

- Әй, хайуан, ниҙәр генә күрмәне инде быңың башы? Ауылды таныймы икән? Онотманымы икән?

- Ана, ҡара-ҡара, нисәмә еренән ранен булған меҫкенең.

- О, Ғилмишәриф ағайҙың ҡылысын ҡара!

Ғилмишәриф, хәл-әхүәл белешеп тын алғандай иткәс, ауылдаштарын өйөнә саҡырҙы.

- Әйҙә, ағай-эне, сәйгә рәхим итегеҙ. Артыҡ һый-хөрмәт юҡ та, барынса булыр, - тине, үҙе атын һарайға индереп бәйләне. Райхана ла ян-яғына ҡарап алды ла:

- Эйе, эйе, шулай булмай ни! Әйҙәгеҙ, барығыҙ ҙа өйгә рәхим итегеҙ. Сәйем әҙер, - тип килгәндәрҙе өйөнә саҡырҙы. Шулай ҙа күстәнәс көткән бала-сағанан башҡаһы, әҙәп һаҡлап, өйгә инергә ашыҡманы.

- Ярар, ярар, ҡустым, алыҫ ерҙән юлда арып-талып килгәнһең. Әйҙә, ана хәҙергә бала-сағаң менән бул. Иншалла, насип булһа, әле бергә булырбыҙ. Имен-һау ҡайтып үҙеңде күргәс, беҙгә хәҙергә шуныһы ла

еткән, - тине Насыйрйән ҡарт. Ғилмишәриф өйөнә инеп юғалғас та, ат янына йыйылған халыҡ тиҙ генә тарала һалманы: һаман көтмәгәндә килеп тыуған был мөғжизәгә шаңҡып тора бирҙе. Өйҙә көлдөксәләгә самауыры менән булашҡан Райхана улын тубығына алып ултырған иренә бороло ла:

- Алып ҡайтып килгән йәндәй иптәшеңде әллә берәй станцсыла аҙаштырып ҡалдырҙыңмы? - тип һорап ҡуйҙы. Үҙ хатаһын килеп төшкәс тә аңлап алған Ғилмишәриф ауыҙын йырып тәҙрә ягына ымланы.

- Ана бит, күрмәйһеңме ни? Һарай ситәнендә бәйле тора! Шул инде минең өс йыл буйы бергә йөрөгән йәндәй дуҫым, - тине. Ошо һүҙҙе ишетеү менән Райхана, ҡуҙһалғысын көлдөксәгә ырғытып, иренең муйынына килеп аҫылынды:

- Ай, минең бәгерем! Иптәшем менән ҡайтам, тип яҙған хатыңды уҡығас, йоҡоларҙан зая́ғи булдым, хыялыйға әйләнә яҙҙым бит. Хатта гәрлегемдән нишләргә лә белмәнем, - тип һөйләнә-һөйләнә ирен үбергә тотондо. Ошо мәлдә ер йөҙөндә уларҙан да бәхетле бер кем юҡ ине.

* * *

Ғилмишәриф атына атланып колхоз идараһына китте. Һуғыштан ҡайтҡан һәр ауылдашы өсөн шатланып бөтә алмаған колхоз председателе Ҡәһәрмәнов, һалдат килеп ингәс тә, ҡолаҫтарын йәйеп уға ынтылды:

- Үәт, исмаһам, һуғышсы, үәт, исмаһам, кәүәлерис! - Председатель һалдаттың затлы кейемәнә ҡарап, устарын шапылдатып бер-берећенә һуғып алды ла телен шартлата бирҙе. - Был рәүешле ҡайтып төшөүеңде һис тә көтмәгәйнек. Ҡара һин, мынауы шпорҙарын, ҡылысын!.. Ҡайһылай үҙеңә килешеп тора бит әле! - Ҡәһәрмәнов ҡарт Ғилмишәрифтең ҡылысын самалап ҡараны. - Үҙе йәтеш кенә күренһә лә, һәлмәк кенә икән!

- Ҡәһәрмәнов ағай, ҡылыс ҡарамаҡҡа еңел тойолһа ла, һелтәү көсө ҡырҡ һигеҙ килоға, йәғни өс ботҡа бәрәбәр. Самалап ҡара, - тип көләмһерәне Ғилмишәриф.

- Әй, ҡустым, ҡустым, ҡайҙан килгән ти ул беҙгә ундай ҡөғәйрәт? Бөтә булған ҡарыуҙы беҙ ошо "Ҡыҙыл ялан" колхозына һалдыҡ инде. Бигерәк тә ошо дүрт йыл ҡаҡшатты, - тип ул үҙ урынына ултырҙы ла ҡаты көрһенеп ҡуйҙы. Бер аҙ ултыра торғас, етди һүҙгә күсте: - Ҡустым, был ҡорамалыңды кәрәк урынға тапшырып, бер аҙ ял иткәс, колхоз эшен башларһың бит инде?

- Ҡәһәрмәнов ағай, ҡорал бер ҡайҙа ла тапшырылмай, миңә бүләк итеп, мәңгегә бирелгән. Документы бар, законный ҡағыҙ менән беркетелгән.

- Һәл-лә-лә!.. Улай ҙа була икән. Өйөмдә генә торасаҡ, тиһең, ә?

- Ҡәһәрмәнов ағай, мин армияға йәйәү алынып - колхозға бынамын тигән атҡа атланып ҡайттым...

Ҡарт председатель һаман һүҙҙең айышына төшөнә алмай ҡаңғыра:

- Ниндәй ат? Бер ҙә төшөнә алмай һандырап ултырам әле, - тине. Ғилмишәриф председателдең ҡултығынан тотоп, тәҙрә эргәһенә килтерҙе лә идара ҡоймаһында бәйле торған бурыл атҡа бармағы менән төртөп күрһәтте.

- Был ниндәй хайуан?

- Ул хайуан түгел, беҙҙең колхоздың өйөр айғыры.

- Китһәнә, ҡустым, былай ҙа ҡаңғырған башты бутама әле.

Ғилмишәриф баштан-аяҡ ат тарихын аңлатып биргәс, колхоз председателе урынынан тороп янынан тәҙрәгә килде. Ҡыуанысынан күҙенән ырғып киткән бер нисә бөртөк йәшен һөрттө.

- Юҡ, юҡ, ҡустым, былай ярамаҫ! Сабыр ит, әллә ҡайһы тарафтарҙан килгән үҙ атыбыҙ менән күрешмәһәк, бөтөнләй хилаф булыр, - тип ул йәһәт кенә кейенде лә ат эргәһенә сыҡты.

- Эй, хайуан, тыуған ауылыма, таныш өйөрөмә ҡайтып килдем тиһең инде, ә? - тип ат менән һөйләште лә, уға мөлдөрәп ҡараған бурылдың муйынынан шапылдатып һөйҙө. Улар янынан идараға инде. Ҡәһәрмәнов әҙәләп ҡалған һүҙен дауам итте:

- Ҡустым, үҙеңә тейеш ашауэсеүен бирербеҙ. Берәр ай ял итеп, ҡунаҡ булып алғас, колхоз эшенә сығырһың бит? - тип председатель ауылдашына һораулы ҡараш атты, сөнки күптән түгел ҡайтҡан бер-ике фронтовик еңел тормош эҙләп, ауылды ташлап ситкә китеп барғайны.

- Ҡунаҡ ҡайғыһы юҡ, ағай. Иртәгә уҡ эшкә тәғәйенләгеҙ, - тип бекешаһының төймәләрен ысҡындырып, мундир кеҫәһенән портсигарына тығылды. Ҡапыл асылып киткән түшендәге наградаларын шәйләп, председатель, папиросын ҡабыҙа-ҡабыҙа, тағы урынынан торҙо.

- Ҡара, ҡара, ҡайһылай ҙа батыр һуғышҡанһың икән, ә! Ике "Ҡыҙыл Йондоҙ" ордены, бишалты миҙал! Әле ауылға был тиклем түш тултырып ҡайтҡан батырҙы күргән юҡ ине. Прәмә атлы маршал һымаҡ ҙурлап ҡайтарғандар бит үҙеңде! Күҙ юҡ, һүҙ юҡ. Бик ҙур афтарит менән ҡайтып төшкәнһең. Маладис!

Йүгереп сығып ауыл Советы председателен, парторгты саҡырып индерҙе, уларҙың да артынан эйәргән кешеләргә Ғилмишәрифтең бекешаһын килеп уҡ асты:

- Бына, күрегеҙ "Ҡыҙыл ялан" колхозының ҡаһарманын! Орден, миҙалдарын тотоп ҡарағыҙ! Бына, фашистарҙың башын ҡыйған уның ҡылысын күрегеҙ! - тип шашҡаны ҡынынан һурып өҫтәлгә һалды. Кемдер ҡылыс йөҙөндәге яҙыуҙы уҡып ишеттергәс, бөтә кеше унайһыҙланыуынан нишләргә белмәй уртала баҫып торған Ғилмишәрифте төрлө яҡҡа әйләндереп ҡарарға тотондо:

- Бына шулай һуғыша ул беҙҙекеләр, любой дошмандың аталарын таныта ул беҙҙең егеттәр! - тип Ҡәһәрмәнов, һуғыштан үҙе йөрөп ҡайтҡан шикелле, маҡтанып иҙән буйлап йөрөп алды.

Кәнсәгә йәнә халыҡ йыйылып китте. Йәнә һорашырға тотондолар. Шунан уйынлы-ысынлы ҡиәфәттә Ғилмишәрифкә эш һайлай башланылар. Яңы ғына армиянан ҡайтҡан Бикбирҙин фамилиялы йәш егет, колхоз парторгы, шундай тәҡдим индерҙе:

- Өс көндән Октябрь байрамын үткәрәсәкбеҙ. Ғилмишәриф ағайҙы үҙе алып ҡайтҡан атына атландырып ауыл халҡы алдында бер нисә һүҙ әйтеүен һорарға кәрәк. Етмәһә, коммунист та булып ҡайтҡан. Эш мәсьәләһендә шуны әйтәм: беҙҙең КТФ мөдире Малыбаев ағай үлеп ҡалды. Бына беҙгә әҙер коневод. Унан да шәберәген эҙләп тораһы ла юҡ, - тип йәнәшендә ултырған Ғилмишәрифкә ымланы.

## XVI

Әухәҙи үҙ хужаһы менән Октябрь байрамы демонстрацияһына сыға алманы. Һуғышта яралар алып, оҙаҡ юл үтеп йонсоған мал өс аяғына ғына баҫып тора башланы. Арт аяғына ныҡ көс төшөү сәбәпле, өс аяғында тороу ҙа бер ғазапҡа әйләнде, күрәһең. Тора-бара ат Ғилмишәрифте яҡҡан көйөнсә генә ҡаршылай башланы. Йәшкелт күҙҙәрендәге нур көндән-көн һүнә барҙы. Ахырҙа, хайуанды ике яҫы ҡайыш менән түшәмгә тарттырып бәйләп ҡуйҙылар. Әухәҙи барыбер ҙә мандый алманы, уның һаулығы көндән-көн насарайҙы. Ҡар төшөп, ҡыш һыуығы һарайға бәреп инә башлағас, хәле бөтөнләй мөшкөлләнде. Февраль аҙаҡтарына ул бөтөнләй ашауҙан да яҙҙы. Район ветлечебницаһынан килгән ветеринария врачы ауырлыҡ менән генә тын алып торған арыҡ атты төрлө яғынан тыңлап ҡараны ла:

- Ике яҡ үпкәһенә лә бик ҡаты һалҡын тейгән. Хәрәкәтһеҙ оҙаҡ тороу арҡаһында йөрәге лә насарайған. Алғы аяғының сираҡ һөйәге лә, онталған янбаш һөйәге лә тәҙәлмәҫлек остит, йәғни һөйәк сире, менән ауырый башлаған, - тип һөйләне. - Был малҡайҙың ғүмере һанаулы ғына ҡалған. Әгәр итен һәм тиреһен файҙаланырға ниәтегеҙ булһа, һуйырға рөхсәт итеп китәм, - тине.

Ярһыған Ғилмишәриф тегене һарайҙан ҡыуып сығарҙы.

Яугир атты, ата-бабалар йолаһы буйынса, өҫтөнә ҡыҙыл йондоҙло серге ябып, һыртына үҙе менән ҡайтҡан эйәрҙе һалып, сағыл үңерендә ҡаҙылған ҡәбергә аяғүрә баҫтырып күмделәр. Баш осона ҡыҙыл йондоҙ, аҫҡараҡ дағаһын һәм тимерлектә һуғып эшләнгән ҡылыс һәм мылтыҡ рәүешен, кавалеристарҙың эмблемаһын ҡаҡтылар. Ҙур шыма ташҡа сүкеп: "Бында Бөйөк Ватан һуғышының яугиры, алған яралары һәҙемтәһендә тыуған иленә ҡайтып үлгән Әухәҙи исемле колхоз аты ерләнде. 1935 йылдың 25 апрелендә тыуған, 1946 йылдың 3 апрелендә вафат булған", - тип яҙып ҡуйҙылар.

Күҙ еткәс, Ғилмишәриф атының ҡәбере өҫтөнә ике йәнәш ҡайын ултыртты. Йыл һайын, 9 Майҙа, ҡулына ялан сәскәләре тотоп ейәндәре менән бергә үҙе ошо ҡәбергә килде.

...Һуңғы тапҡыр килгәндә сәстәре ағарған, кәүҙәгә ныҡ ҡуранысланған был яугир үҙе лә "өс аяҡ"та тора ине.

Енеүҙең 50 йыллығы байрамына тиклем бер йыл ғына ҡалғайны.

**(Аҙағы. Башы 29-40-сы һандарҙа).**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# КЕШЕГӘ КҮПМЕ ЕР КӘРӘК?



Күренекле урыҫ яҙыусыһы Лев Толстойҙың бер хикәйәһе шулай тип атала. Һамар губернаһы башҡорттарына ҡымыҙ эсеп, ял итергә килгән осорҙа шул ерҙәрҙе тәйәк иткән эскерһеҙ, ябай халыҡ менән танышa был әҙип, уларҙың тормошон өйрәнә. Башҡорттар хаҡындағы иң яҡшы уй-фекерҙәрен һуңынан сағылдырған әҫәрҙәренең береһе ул. Пахом исемле бер урта хәлле крәҫтиәндең башҡорттарҙан нисек ер һатып алыуы хаҡында. Киң ялан, урмандар биләгән, өйөр-өйөр йылҡылар көткән шул халыҡтың ҡунаҡсыл һәм ғәйәт йомарт булыуы тураһында хәбәрҙар булған бер кешенең байығыу ниәте менән "башкирец"тарға килеүе һәм уның сәйәхәте нимә менән тамамланыуы бәйән ителгән хикәйәне мин бәләкәйҙән беләм. Ғәйәт ҡыҙыҡ, тормошсан был әҫәр менән беҙҙе Баймаҡ интернат мәктәбендә башҡорт теле уҡытыусыһы Ғарифә Мораҙыҡ ҡыҙы кластан тыш уҡыу дәресендә таныштырғайны.

Бүләккә бер елән, бер аҙ сәй алып килгән был юлсыға старшина башҡорт йолаһына ярашлы яҡшы һый-хөрмәт күрһәтә, унан ни йомош менән йөрөүе хаҡында һораша. Ҡунаҡтың ер һатып алыу теләгеен белгәс, түрә уға иртәгәһен таң алдынан яҡындағы ҡалҡыулыҡҡа килергә ҡуша. Һөйләшкән ваҡытҡа, унда ерыу аҡһаҡалдары ла йыйыла. Ҡояш ҡалҡа башлау менән старшина Пахомдың ҡулына көрәк тоттора һәм ҡалҡыулыҡ артында йәйрәп ятҡан икһеҙ-сикһеҙ ергә күрһәтеп, ошондай шарт ҡуя: "Ҡояш байығансы ни саҡлы ерҙе көрәк менән билдәләп, әйләнеп ҡайта алһаң, ана шул ер һинеке булыр. Әммә, ҡояш байыуға мотлаҡ килеп өлгөрөргә тейешһең..." Күпме биләүенә ҡарамаҫтан, ер хаҡының йөмләһе бер мең һум буласаҡ икәнлеген дә әйтә. Шундай киң майҙан өсөн был хаҡтың ныҡ арзан булыуын һиҙенә һатып алыусы. Башҡорт байының шартына шатланып риза була. Ысынлап та, уйлап ҡараһаҡ, йәйге көн оҙононда әллә күпме ерҙе урап сығырға була бит! (Ул саҡтағы мең һумдың ҡиммәтен бөгөнгө аҡса менән тинләү, әлбиттә, һис кенә лә ярамай. Ә шулай ҙа...)

Осҫоҙ ғына хаҡҡа ер һатып алыу мөмкинлеге килеп тыуғас, зирәк Пахом шунда уҡ дәртләнеп эшкә тотона. Ергә тамға һалаһала арыҫайғандан-алыҫая бара ул. Шулай, алһыҙ-ялһыҙ күпмеләр киткәс, саманан тыш алыҫлашып киткән был әҙәм көн аҙағына урап ҡайтып өлгөрөргә кәрәклеге хаҡында иҫләп, килгән яғына ҡарай борола башлай. Йәйге эҫе көндә инде бөтөнләйгә әлһерәгән бисара, ҡояш байыуға, тау башында үҙен көтөп ултырған башҡорттар янына көскә килеп етә. Көрәге менән ергә һуңғы билдәһен яһай һәм... аңын юғалтып, йығыла. Мәңгелеккә. Уның менән бергә килгән ярҙамсыһы ҡәбер ҡаҙып, был әҙәмде шунда күмеп тә ҡуя. Тиҙ байығыу теләге менән янған был кешегә ни бары өс аршин ер китеүе хаҡындағы һүҙҙәр менән хикәйә тамамлана. Бөйөк рус яҙыусыһының бына ошо ғибрәтле хикәйәһен мәктәптәрҙә үтәләрме-юҡмы, белмәйем. Шулай ҙа уны кластан тыш уҡыу дәресе программаһына индергәндәрҙер, тигән өмөтөм бар.

Ошо хаҡта бер мәл уйланып: "Ә шулай ҙа әлеге Пахомдың күпме майҙанды билдәләп өлгөрөүе мөмкин ине?" - тигән фәҡәт математикаға ҡағылышлы һорау менән ҡыҙыҡһынып киттем. Өлгөр математиктар уны әллә ҡасан уҡ иҫәпләп, интернет селтәренә һалып та ҡуйған икән. Йәйге оҙон көндә, ҡояш ҡалҡҡандан алып, байығанса, кеше (ергә көрәк менән тамға һала-һала) яҡынса 35-36 километр үтә ала. Шул араны квадрат формаһына һалған хәлдә, һәр яғы 9-ар саҡрым булған, йәғни, 81 квадрат километрлыҡ дүрткел ер майҙаны килеп сыға (Әгәр ҙә Пахом был араны квадратлап түгел, ә тигеҙ яҡлы өсмөйөш яһап үтһә, уның биләгән майҙаны 60 квадрат километр самаһы була. Был да аҙ ер түгел. Ә инде ул үҙ маршрутын түңәрәк яһап урап үткән осраҡта, был майҙан хатта 100 квадрат мертға ла барып етер ине!)

Әлеге ҡәбергә киткән "өс аршин" хаҡында. Бер аршин, яҡынса - 0,7 метр (бер аҙым). Тимәк, әҙәм балаһы был донъяла күпме генә ҡомһоҙланып, байлыҡ артынан ҡыуып йәшәһә лә, ахырҙа, уға ни бары өс аҙым ер әләгә!..

Һүҙ аҙағында. Аллаһ илсеһе - бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт с.ғ.с. әйткән: "Әҙәм балаһына бер ялан тултырып алтын бирһәң, ул икенсе шундай уҡ ялан теләр ине. Алтын тулы ике яланы булһа, ул өсөнсөһөн теләр ине. Ысынлап та, әҙәм балаһын тик (үлгәс күмеләсәк) ер генә тулыһынса туйындыра ала..."(Сахих Әл-Бухари). Был фани (ваҡытлыса) донъяла бай йәшәү бер кемгә лә тыйылмаған, әлбиттә, әммә, йыл һайын күсемле байлығыңдың бер өлөшөн мохтаждарға зәкәт итеп, Аллаһы Тәғәләнең ризалығына ирешеп, мотлаҡ киләсәк мәңгелек Ахирәт тормошо хаҡында ла онотмау кәрәклеге турала был хәҙис.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОҠО ТУЙҘЫРЫР МӘЛ

■ Терапевт һәм диетолог Елена Тихомирова әйтеүенсә, иртән торғас та 1-2 стакан һыу эсеү метаболик процестарҙы әүҙемләштереп ебәрә, шулай уҡ ашҡаҙан-эсәк тракты һәм бәүел бүлеңеү системаһы эшмәкәрлеген яҡшырта. Был организмдың һыу балансын тулыландыра, ҡан ҡуйырыуҙан һаҡлай, тимәк, тромбоз ҡурҡынысы ла юҡҡа сыға. Шыйыҡ ҡан баш мейеһе эшен дә әүҙемләштереп ебәрә, ти Тихомирова. Һыуҙы иртәнсәк кенә эсергә кәрәк, тип уйлаусылар хаталана. Көн дауамында һыу лимфа системаһы эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһай, патоген микроорганизмдарға ҡаршы көрәшә.

■ Ғәҙәттә, кешене тәүгә күргәс тә, уның тураһында ниндәйҙер фекер формалаша. Шулай ҙа уны яҡынданыраҡ белеү өсөн йылдар кәрәк. Әммә ғалимдар раҫлауынса, һәр кем үҙе тураһында үҙе уҡ әйтеп бирә. Һөйләшкән арала берәй уртаҡ танышығыҙ килеп сыҡһа: "Уның тураһында нимә уйлайһың?" тип һорау ҙа етә, ти улар. Кеше башҡаларҙа үҙенең холҡона хас сифаттарҙы күрә. Эгоист икенсе кешелә лә эгоизм һыҙаттарына иғтибар итәсәк, һаран кеше уның һаранлығын оҡшатмаясаҡ, үҙен генә яратыусы уны тәкәббер тип атаясаҡ. Иң ҡыҙығы, был сифаттарҙың үҙендә булыуын һис танмаясаҡ. Изге күңелле һәм позитив кеше башҡалар тураһында насарҙы әйтмәҫ, ә уның үҙенә оҡшаған яҡтарын ғына һанар. Бында ла уның тик яҡшыны йә тик насарҙы күреүенә иғтибар итегеҙ. Ғалимдар раҫлауынса, башҡалар тураһында яҡшы хәбәр генә һөйләйһегеҙ икән, тимәк, һеҙ бәхетле һәм эмоциональ яҡтан тотороҡлоһоғоҙ. Ә бына башҡаларҙың насар яҡтарына ғына иғтибар итеп, был турала тәмләп һөйләүсенең психик яҡтан күптән үҙенең проблемалары бар.

■ Көндәр һиҙелерлек ҡыҫҡарҙы, ҡояш яҡтыһы кәмене, һауа торошо ла ҡыуандырмай, тормошҡа ҡыуанып баҡыу сифатын юғалтаһығыҙ кеүек тойоламы? Был депрессив тайпылыш, ул көҙ-ҡыш миҙгелендә барлыҡҡа килә. Бындай кешеләрҙең биоритмдары, серотонин, мелатонин кеүек йоҡо, кәйеф, шатлыҡ һәм бәхет тойғоһо өсөн яуаплы гормондар бүленеүе боҙола. Улар, ғәҙәттә, ауырлыҡ менән йоҡлап китә һәм уяна. Шуға ла йоҡо режимына мотлаҡ иғтибар итергә кәрәк. Күберәк аралашырға, саф һауала күберәк булырға - миҙгел депрессияһы менән йонсоғандарға белгестәр ошондай кәңәш бирә.

■ Октябрь айында иммунитетты күтәреү өсөн иртәрәк йоҡларға ятырға кәрәк, ти табиптар. Оҙағыраҡ йоҡлап, яҡшы ял итһәгеҙ, миҙгел сирҙәре ҡурҡыныс булмаясаҡ. Сөнки иммун системаһы төндә әүҙемерәк эшләй, тап ошо ваҡытта төрлө вирустарға ҡаршы көрәшеүсе аҡһымдар күберәк бүленә. Шулай уҡ яҡшы кәйеф һәм оптимизм сәләмәтлек нигеҙе. Йөй төшкән фотоларҙы ҡарағыҙ, отпускыны ҡайҙа үткәрәсәгегеҙҙе планлаштырығыҙ, былар барыһы ла иммунитетка ыңғай йоғонто яһай. Көнөнә 15 минут күнегеү тигән ҡағиҙәне лә үтәгеҙ, был йөрәк эшмәкәрлеген яҡшырта, пресс мускулдарын нығыта, шулай ҙа көләүҙең төп файҙаһы - ул Т-күҙәнәктәрҙең тәьҫирен арттыра, стресс гормондары кимәлен түбәнәйтеп, эндорфиндар кимәлен арттыра. Шулай уҡ мотлаҡ хәрәкәт итегеҙ, тик ултырған һайын йыштыраҡ ауырыйбыҙ. Мүк еләге, кәбеҫтә, әфлисун ашағыҙ, уларҙа С витамины күп, ул иһә иммун системаһының яҡын "дуҫы".

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР

# ҺӘР КЕМ КҮҘ ҺАЛҺЫН...

## тарихи тамырҙарына

**Заманалар үҙгәрешендә лә ата-бабаларыбыҙҙың "Һәр кеше үҙенең ете быуынын, ауылының, халҡының тарихын белергә тейеш" тигән мәңгелек аманатына тоғролоғон иҫбатлағандай, һуңғы йылдарҙа боронғоларҙың алтын һүҙҙәренә таянып, йыйындар туплау изге йолаға әүерелде.**

Нәҫеленде белеү ҡыҙыҡ өсөн түгел, донъяла үҙ урыныңды табыу өсөн кәрәк. Тәрән тамырҙарын белгән кеше генә үҙенең өҙөлмәҫ туғанлыҡ ептәре менән милләтенә бәйле икәнен аңлап, үҙ ерендә, үҙ илендә ныҡлы баҫып тора ала. Шуны оноторға ярамай: кешене сәләмәт рухлы, бай күңелле иткән, кешене кеше иткән милли тойғо, милли асыл, милли һөйөү шунан башлана.

Халҡыбыҙҙың борондан килгән йолаларын тергеҙеү, уларҙы киләсәк быуынға тапшырыу кеүек изге эштәр ҙә күҙгә күренеп арта бара бөгөн. Ауылының тарихы, нәҫеленең сығышы менән ҡыҙыҡһыныусыларҙың бигерәк тә йәштәр араһында күп булыуы һөҫләндерә. Был, һис шикһеҙ, ҡыуаныслы хәл. Тәрән тамырҙарын белгән кеше генә үҙ еренең, үҙ иленең һәм үҙенең киләсәгенә ныҡлы ышана. Тимәк, үҙ милләтенең ҡәҙерен белеүҙең һин тиклем ҡиммәтле булыуына төшөнә.

Милли тойғо ошондай туғанлыҡ ептәренең ныҡлығынан, берҙәмлектән башлана ла инде. Һуңғы йылдарҙа айырым башҡорт шәхестәре тарафынан күтәрелгән ырыуҙар хәрәкәтендә ҡаралған мәсьәләләр халҡыбыҙға ҡеүәт бирә ул. Ойошоп, бер телдә һөйләшкән, бер милли хис, бер рух менән йәшәгән халыҡҡа ырыу йыйындары тик көс-ғәйрәт кенә өҫтәй. Милләтебеҙҙең хәҙерге йәшәйеше менән бәйле донъяуи проблемаларҙы аҡыл менән, бергәләшеп, бер фекергә килеп хәл итеү юлдарын эҙләү башҡортобоҙҙоң үҙ асылына ҡайтыуы тураһында һөйләй. Әүәл йыйындар дәүләт ҡоро хеҙмәтен үтәгән. Шул уҡ ваҡытта унда халҡыбыҙҙың быуаттар буйы һаҡланып килгән ғөрөф-ғәҙәттәрен дә онотмағандар: барлыҡ етди мәсьәләләр ҡурай моңо, йыр-бейеү, милли ярыштар менән үрелеп барған, халыҡ оҫталары майҙан тотҡан.

Быйыл июнндә Бөрйән районындә бөрйән ырыуының ҙур йыйыны үтте. Уның тап ошо районда ойошторолоуы ла юҡҡа түгел: Шүлгәнташ мәмерйәһе үҙе уҡ башҡортобоҙҙоң боронғо булмышын сағылдырған тәбиғи ҡомартҡы. 2022 йылда музей комплексын асыу тантанаһы ла Халыҡ-ара форум кимәлендә үткәрелеп, халҡыбыҙҙын рухи донъяһын, эске асылын бөтә донъяға танытыу сараһы булып торҙо. Академик Сергеевтың: "Вся мировая цивилизация началась здесь - на земле башкир", - тигән һүҙҙәре башҡорттарҙың борон-борондан ата-бабаларҙың тәрән аҡылына таянып, төплө, үткер фекер йөрөтә белгән халыҡ булыуына үҙе бер дәлил. Халҡыбыҙҙың булмышына бирелгән ошондай аҫыл билдәләмәне һәр беребеҙ төптән аңлап, донъя халыҡтары араһында үҙебеҙ тотҡан урыныбыҙҙы, әһәмиәтебеҙҙе белеү һәм шуны үҫеп килгән быуынға аңлатыу зарур.

Бөрйән ырыуының башҡорт халҡының ҙур берләшмәләренең береһе булғанын боронғо археологик материалдар ҙа иҫбат итә. Был турала элекке быуаттарҙа уҡ төрлө халыҡтарҙың сығышын өйрәнеүсе сәйәхәтселәр әйтеп ҡалдырған. Уларҙың яҙмаларына ярашлы, бөрйәндәр башҡа башҡорт ырыуҙары араһында айырым бер ҙур урын биләп торған.

Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев бөрйәндәрҙең үҙ ерендә үҙ телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен ситтән килгән күскенселәрҙән ныҡлы ҡурсалап тороуы хаҡында мәғлүмәт ҡалдырған. Ул яңы эра башында уҡ, Байкал буйында йәшәгән саҡта, бөрйәндәрҙең "башҡорт" тигән уртаҡ исем аҫтында ойошоп йәшәүҙәрен дә иҫкә ала. Ул ваҡыттағы башҡа ҡәбиләләр ҙә "башҡорт" исеме менән билдәле булһа, бөрйәндәр айырым телгә алына.

Әбү-әл Фиданың беҙҙең эраға тиклемге XIII быуатта уҡ: "Бөрйәндәр ҙур халыҡ, хатта бер нисә яусыл халыҡтан тора", - тип яҙып ҡалдырыуы бөрйәндәрҙең бик боронғо ҡәүемдәрҙән булып, үҙ дәүләтен төҙөүе, үҙҙәренең батшаһы булыуы тураһында аңлата. А.Б. Булатовтың мәғлүмәте буйынса, Волганың түбән ағында Бөрйән тигән ҡала булыуы ла билдәле.

1326 йылда башҡорт халҡына һәм уның үҙаллы дәүләтенә татар-монгол яуы ябырыла. Ошо ауыһыҙ ҡанлы һуғышта алғы һыҙыҡта бөрйәндәр ҙә торған. Әммә улар был ауыһыҙ һуғышта еңелеп, үҙ иленә, Урал ҡуйынында көн иткән үҫәргән, түңгәүер, тамъян ырыуҙары йәшәгән ергә ҡайтырға мәжбүр булған. Улар бер сафта тороп дошманға ҡаршы яуға сыҡ-

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА

# КҮҢЕЛЕҢДЕ ИШЕТЕҮҘЕҢ...

## биш ысулы



**Беҙ йыш ҡына ҡайҙалыр йүгерәбеҙ, ашығабыҙ, тәгәрмәс әйләлткән тейен кеүек, барыһына ла өлгөрөргә тырышабыҙ. Ҡайһы берҙә ошо уҙышта кемдер хатта унышҡа өлгәшә. Әммә тиҙҙән күңеле бушлыҡҡа күмелеп, оҙаҡ ваҡыт ынтылған был хыялы ҡапыл үҙ баһаһын юғалта. Ҡәҙерле кешеләрҙе, сәләмәтлекте, иртәгәһе көнгә өмөттө, хатта үҙебеҙгә ышанысты юғалтабыҙ... Быға юл ҡуймаҫ өсөн йөрәгенде ишетергә өйрәнергә кәрәк. Тик күңел генә һәр ваҡыт дөрөҫөн һөйләй. Ә уны ишетер өсөн түбәндәгеләрҙе эшләү мөһим.**

### Бер үҙегеҙ йөрөгөҙ

Тап яңғыҙ ваҡытта кеше үҙ уйы, фекере, теләге менән ҡала. Шылтыратып йәҙәтмәһендәр өсөн телефоныгыҙҙы өйҙә ҡалдырығыҙ. Яҡты хәтирәләр һаҡлаған урындарҙан үтергә тырышығыҙ. Ҡасандыр яҡын кешегеҙ менән йөрөгән, беренсе тапҡыр үбешкән иҫтәлекле мәлдәрҙе һаҡлаған ергә барығыҙ. Урманда йөрөгөҙ, тап урманда тәбиғәт менән икәүҙән-икәү ҡалырға мөмкин.

Эргә-тирәлә йылға, шишмә йәки быуа булһа, тағы ла яҡшыраҡ, улар янында аң аҫты үҙен көслөрәк белдерә. Урманда йөрөгәндә үҙегеҙҙе борсоған һорауҙарға яуап тиҙ табыла. Ҡала урамында ла йөрөргә мөмкин, әммә унда күберәк үткән тормошоғоҙ хаҡында уйланырһығыҙ. Яңғыҙ йөрөүҙән кинәнес алырға тырышығыҙ. Күңел тыныслыҡ ярата, шуға күрә уға тыныс мәлдәрҙе күберәк бүләк итегеҙ һәм ул һеҙҙе борсоған күп һорауға яуап табырға ярҙам итер.

### Ялҡаулыҡҡа иғтибар итегеҙ

Ҡайһы берҙә бер нәмә лә эшләге килмәй китә. Нимә булһа ла эшләү өсөн үҙебеҙгә төрлө мотивация уйлап табырға, ирендерһә лә эшләргә тырышабыҙ. Әммә тап ошо ялҡаулыҡ аша был һинеке түгел икәнен аңламайбыҙ. Эшләге килмәү ял итергә кәрәклекте генә белдермәй, ә эшмәкәрлек һәм эргәләге кешеләр һеҙгә тура килмәүен дә аңлата.

Кешеләр бер-береһенә ҡыҙыҡ булһа, улар һәр ваҡыт осрашыу өсөн ваҡыт таба. Әгәр ҙә осраҡлы кеше икән, күрешеү, осрашыу өсөн ялҡау килә. Бындай ваҡытта күрешмәү өсөн төрлө сәбәп табаһың. Мәҫәлән, бөгөн һинең бесәйең балалай йәки аҙыраҡ сирләп тораһың...

ҡан. Башҡа башҡорт ырыуҙары бөрйәндәрҙе үҙ ҡосағына алған.

Ҡанлы яуҙар баҫылып, әҙ генә баш-күҙ алғас та, ҡаты монгол-татар иҙеүенә ҡарамаҫтан, башҡорт халҡының берҙәмлеген, ҡыйратылған дәүләтселеген тергеҙеү өсөн үҫәргән, түңгәүер, бөрйән, тамъян, ҡатай, ҡыпсаҡ һәм башҡа ырыуҙарҙың азаматтары хәҙерге Йылайыр яғындағы Имәнтау башына йыйылып, "Етырыу" берләшмәһен төҙөргә ҡарар итә. Ул тауҙы бөгөн "Ете бөгәл" ("Семиколенка") тип йөрөтәләр.

Берләшмәнең ныҡлығына билдә итеп тау башына имән бағана ултыртып, ете ырыуҙың тамғаһын уйып ҡуялар. Тап "Етырыу" юлбашсылары ерҙе ырыуҙарға бүлмәй, уртаҡ биләргә, тигән ҡағиҙә индергән, ырыуҙарҙың ер, мөлкәт йәки мал тотоу менән бәйле мәсьәләләре менән бер рәттән, сәйәси проблемаларҙы бергәләп хәл итә торған булған. Урыҫ дәүләтенә ҡушылыу мәсьәләһен дә шулай хәл иткәндәр. Ырыу вәкилдәрен ебәреп, Аҡ батшанан үҙҙәренең урыҫ дәүләтенә ҡушылыуын раҫлаған грамоталар алып ҡайтҡандар. Башҡорт халҡын берләштереү йәһәтенән башҡорт йыйындарын тергеҙеү, дөйөм милли идара үҙәгенә әйләндереүҙә ошо "Етырыу" берләшмәһенең әһәмиәте ҙур булған.

Бөрйән ырыуҙарының башында Бөрйән бей торған. Ул 1265-1325 йылдар тирәһендә йәшәгән. Бөрйән ырыуы юлбашсыларынан арҙаҡлы Монаш, Ямаш, Янһары, Байһары бейҙәрҙең исемдәре тарихта ҡалған.

Һәр ырыу, һәр ауыл тарихы башҡорт халҡының дөйөм тарихын сағылдыра. Башҡорттар борондан бөтә ырыуҙарҙы бер дәүләткә туплау йүнәлешендә ҙур эш алып барған, ә йыйындар ошо маҡсатҡа өлгәшеү өсөн саҡырылған. Ата-бабаларыбыҙ күрһәткән берҙәмлекте онотмау, уны яңынан тергеҙеү беҙҙең мөҡәддәс бурысыбыҙ ул.

Быйыл йәй Бөрйән ерендә уҙған бөрйән ырыуы йыйынында Күгәрсен ерендә йәшәгән бөрйәндәрҙең булмауы, дөрөҫөн әйткәндә, саҡырылып та, ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында йыйынға килмәй ҡалыуы күңелдә бер төйөн булып ҡалды. Ә бит Күгәрсен районында бөрйән ауылдары байтаҡ - Эйек йылғаһының уң яғында ултырған ауылдар улар. Күгәрсендәге бөрйәндәрҙең иң төп ауылы булып Байулы (Туйөмбәт) иҫәпләнгән. Айһай-Мөрсәләй, Дөмбәй, Үрге һәм Түбәнге Сирбай, Наҙар (Вәлишә), Санъяп, Ҡасҡын, Моҡас (Сайыр), Мырҙабай (Ҡайыпҡол), Сәңкем (Тәүәкән), Бикес, Яҡшымбәт, Ҡарабәрҙе ауылдары ла бөрйән ырыуы ауылдары. Ошо ауыл вәкилдәре лә ырыу йыйынында ҡатнашырға тейеш ине лә бит! Бындай ҡараш ҡайһы берәүҙәрҙең тарихты һанға һуҡмауы тураһында һөйләй. Тарихты үҙ белдегең менән генә үҙгәртеп булмай. Тарихи дөрөҫлөктө, тарихи мәғлүмәттәрҙе үҙгәртергә тырышыу - халыҡҡа хыянат итеүгә тиң. Боронғо замандан уҡ башҡорт халҡы бөтә ырыуҙарҙы бер дәүләткә туплап йәшәү юлын һайлаған. "Етырыу" берләшмәһенең сәйәси ролен бер кем дә, бер нисек тә инҡар итә алмаҫ: барса ырыуҙар ҙа тулы хоҡуҡлы булған. Ә беҙ?.. Ырыу айырабыҙмы?

Алыҫ Тинес йылғаһы буйынан Кәмәлеккә тиклем бер телдә һөйләшеп, бер милли рух, бер хис менән йәшәп килгән башҡорт халҡының тарихы - ул дөйөм башҡорт тарихы икәнен ырыу йыйындарында аңлатыу, киләсәк быуынға еткереү беҙҙең төп бурыс, төп маҡсат икәнен онотмаһаҡ икән. Был турала һәр башҡорт уйланырға тейеш. Ырыуҙаштарыма, ҡан ҡәрҙәштәремә әйтәһе һүҙем шул булыр.



**Ләлә БЕЙЕШЕВА.**

Нимәлер эшләргә иренһәгеҙ йәки кем менәндер осрашҡығыҙ килмәһә, уның өсөн үҙегеҙҙе әрләмәгеҙ. Был һеҙҙеке булмағанға күңелегеҙ тартҡылашыуын аңлағыҙ.

## Бәйлелектән ҡотолорға тырышығыҙ

Беҙ ирекле булып тыуабыҙ, әммә йылдар үткән һайын үҙебеҙҙе үҙебеҙ булыуҙан, үҙебеҙҙе тойоуҙан, үҙебеҙҙе үҙебеҙ теләгәнсә аңлау азатлығынан мәхрүм итәбеҙ. Эш, аҡса артынан ҡыуыу, кәрәкмәгән әйбер һатып алыу, теләнмәгән бала тыуыуы, тәмәке тартыу, спиртлы эсемлектәр эсеү һәм башҡалар бәйлелек тыуҙыра һәм беҙҙең көсөбөҙҙө һура. Йәмғиәт, дәүләт кенә түгел, ә үҙебеҙ ҙә үҙебеҙҙе ҡол итәбеҙ, ә йәнде ишетеү өсөн азат булыу мөһим. Тап ошонда һеҙгә һалҡын аҡыл кәрәк. Уның ярҙамында ғына кеше үҙаллы була, күңеленә ирек бирә ала. Тап ул ғына кәрәкмәгән әйбер, кредит алырға ярамағанлығын күрһәтә, яңы нәмәгә өйрәтә. Шул ваҡытта ғына һеҙ аҡылһыҙ етәксенән тыш аҡса эшләй башларһығыҙ, ирекле эш графигы барлыҡҡа килер, уға ярашлы һеҙ урынға бәйләнеп ултырмаясаҡһығыҙ, ә күңелегеҙ теләгән ергә барырһығыҙ, теләгән һәм яратҡан балалар табырһығыҙ.

## Кеше фекеренән ҡурҡып йәшәмәгеҙ

Ҡайһы берҙә аҡыллы кешенең кәңәшен ишетке килә. Әммә эргә-тирәләгеләр үҙенең тормош тәжрибәһенән сығып, йыш ҡына фекерен тағырға тырыша. Бигерәк тә яҡындарыбыҙ. Күптәрегеҙгә таныштыр, мәҫәлән, һеҙ рәссам булырға теләйһегеҙ, ә ата-әсәйегеҙ юрист һөнәрен һайларға ҡуша. Үҙ эшегеҙҙе асырға теләүегеҙҙе әйтһәгеҙ, пенсия алыр өсөн стаж йыйырға кәрәклеген әйтәләр. Уның барып сыҡмаҫлығын юрап, көлөүселәр ҙә, көнләшеүселәр ҙә була. Быларҙың барыһы ла һеҙҙе барыр юлығыҙҙан туҡтата. Һөҙөмтәлә һуңынан ологайған көнөгөҙҙә үҙ эшегеҙҙе асып ҡарамағаныгыҙ өсөн үкенәсәкһегеҙ.

Шуны онотмағыҙ: һеҙгә нисек яҡшы булғанын һеҙҙән башҡа бер кем дә белмәй. Шуға күрә күңелегеҙ саҡырған ергә барығыҙ, ә башҡалар әйткән ергә түгел!

## Хыялланығыҙ һәм хыялығыҙҙы тормошҡа ашырығыҙ!

Хыял - ул йәшәү мәғәнәһен биргән нәмә, тап ул кешене илаһи көс менән тултыра һәм аңын туранан-тура йән менән бәйләй. Хыял - ул һинең күңелең генә түгел, ә бөтә донъя өсөн теләгән теләк. Хыялдар йыш ҡына глобаль була, хатта ҡайһы саҡта уларҙы тормошҡа ашырыу мөмкин түгел кеүек тойола. Әммә тап ошонда уның төп мәғәнәһе: мөмкин булмағанды бойомға ашырыу. Тарихтан билдәле булыуынса, күпме бөйөк аҡыл эйәләре донъя нисек алға барыуы, кешеләрҙең ҡараштары үҙгәреүе һәм тупаҫ, белемһеҙ шәхестәрҙән Аллаға яҡын кешеләргә оҡшап барыуыбыҙ хаҡында фәнни асыштар яһаған. Әммә үҫергә урын бар әле. Үҙ-үҙеңде үҫтереү, үҙ-үҙеңде тәрбиәләү алға барыуҙы аңлата. Һәр берегеҙ шәхес булып үҫегеҙ, күңелегеҙ туранан-тура һөйләшкән хыялдарығыҙҙы ғәмәлгә ашырһын.

**Хәлисәт СӘЛӘЙМӘНОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Беренсе дошман: ҡурҡыу

Тикшеренеүҙәргә нигеҙләнеп, уңыштың иң хәүефле дошманы ҡурҡыу тип әйтергә була. Шул уҡ ваҡытта ҡурҡыу ярҙам да итә ала. Уйлап ҡарағыҙ: ни тиклем нимәнәндер ҡурҡһаҡ, шул тиклем уның асылын аңларға тырышабыҙ. Хатта ҡурҡыу һүҙен ҡысҡырып әйтеү ҙә хәүеф тойғоһо уята. Кемдер, ҡурҡаһығыҙмы, тип һорап та көслө реакция тыуҙыра, сөнки һорау үҙе үк көслө йоғонтоға эйә.

Ҡурҡыу нисек барлыҡҡа килә, уны нимә тыуҙыра? Әйҙәгеҙ, уйлап ҡарайыҡ - хәүеф ихтималлығы тураһында уйлағанда ниҙәр кисерәһегеҙ? Бер урында ҡатып ҡалаһығыҙ, тынысһыҙлана башлайһығыҙ, тирә-йүн ҡараңғы һәм күңелһеҙгә әйләнә, фекерегеҙ томалана, тормош ҡыуанысы юғала.

Йыһанда бер нәмә лә статик булып ҡалмай. Был ҡағиҙәнән ташламалар юҡ. Хатта ҡулығыҙҙа тотоп торған йәнһеҙ предмет та хәрәкәт итә, йәғни уның өлөшсәләре ҙур тиҙлек менән хәрәкәтләнә. Был хәрәкәт даими әйләнеп торған тәгәрмәс кеүек. Әйләнгән тәгәрмәскә ҡараһаҡ, ул тик торған кеүек. Был әйләнеш тиҙлегенең күреү тиҙлеге менән тап килеүенә бәйле. Кинола ла шулай. Ҡурҡыуҙың тормош ағышын туҡтатыу һәләте уны донъяның яуыз дошманы яһай. Шул уҡ ваҡытта нимәнән һәм ниңә ҡурҡыуыбыҙ ҙа аңлашылмай.

## Ҡасан үҙегеҙҙе ысынлап бәхетле тояһығыҙ?

Ҡағыҙ, ҡәләм алығыҙ ҙа ошо һорауға яуапты ентекләп яҙығыҙ. Әгәр үҙегеҙгә ошо һорауҙы йыш бирһәгеҙ, иртәме, һуңмы шундай һығымта яһарһығыҙ: үҙегеҙҙе булмышығыҙ хәҙерге ваҡытта йәшәгәндә генә бәхетле тояһығыҙ.

Әлеге мәл менән йәшәйһегеҙ икән, ҡурҡыу хисенән азатһығыҙ. Мәҫәлән, спорттың экстремаль төрө менән шөғөлләнеүселәрҙе ҡарайыҡ. Ни өсөн һәр яҡлап нормаль кешеләр кеше менә алмаҫлыҡ тау башына менер, самолеттан һикерер йәки 15 метрлыҡ тәрәнлектәге һыуға сумып, акулалар менән ҡушарлап йөҙәр өсөн сәләмәтлеген, ғаиләһен, эшен, байлығын хәүеф аҫтына ҡуя? Сөнки тап ошо мәлдә хәҙер һәм ошонда улар азатлыҡ тоя. Кеше 20 метрлыҡ бейеклектән һикергәндә һәм уны мәңгелек менән осрашыуҙан бары тик аяҡтарына бәйләнгән эластик трос ҡына һаҡлап торғанда ул кредитҡа алынған машинаһы өсөн сираттағы иғәнә индереү ваҡыты етеп килгәне йәки һалым декларацияһы тултырырға кәрәклеге тураһында уйламай.

Ағымдағы ваҡиғаның һоҡланғыс тойғоларын юҡ итеү өсөн бар нәмәне үҙ атамаһы менән атау ҙа етә. Балаға ниндәйҙер сәскәнең исемен әйткән көндән башлап ул шул сәскәне күреүҙән туҡтай, сөнки хәтерендә образ атама менән алмашына. Шул мәлдән алып бала шул төрҙәге теләһә ниндәй сәскәгә ҡарай, әммә яңы сәскә күрмәй. Ул хәтер банкын аҡтарып, уй мониторына: "Был - мальва" тигән хәбәрҙе сығара ла, мәлдең ҡабатланмаҫ булыуынан бер ниндәй яңылыҡ та тоймай. Ә бала мальваның был төрөн ғүмерендә беренсе тапҡыр күреүе мөмкин, шуға күрә дөйөмләштереүҙән ҡасып, сәскәгә ҡарағыҙ.

**Пьер МОРАНСИ.**

*БАШ ӘШЛӘТМӘК*

# 28 ОКТЯБРЬ - ХАЛЫҠ-АРА АНИМАЦИЯ КӨНӨ

**Халыҡ-ара анимация көнө йәки Бөтә донъя йәнһүрәттәр көнө Анимацион фильм халыҡ-ара ассоциацияһының Франция бүлексәһе башланғысы менән 2002 йылда булдырылған иҫтәлекле дата. Бынан тиҫтәләр йыл элек, 1892 йылдың тап 28 октябрендә рәссам һәм уйлап табыусы Эмиль Рейно Парижда тамашасылар йыйып, тәүге тапҡыр "оптик театр" - үҙе уйлап тапҡан "праксиноскоп" тигән аппараты ярҙамында хәрәкәт иткән һүрәттәр күрһәтә.**



Беренсе рус мультипликаторы Александр Ширяев (1867-1941) 1906 йылда тәүге Ватан ҡурсаҡ йәнһүрәтен сығара. Ә 1912 йылдың 8 апрелендә "Прекрасная Люканида" тигән беренсе Рәсәй мультипликацион фильмы киң йәмәғәтселеккә күрһәтелә. Был айҡанлы Рәсәй анимацияһы көнө билдәләнә.

Совет йәнһүрәттәре 1924-1925 йылдарҙа төшөрөлә башлай, бер йыл эсендә әллә күпме мультипликацион фильмдар донъя күрә. Бөтә донъяға билдәле тәүге совет тулы метрлы мультипликацион фильмдарының береһе - Александр Птушконың "Яңы Гулливер"ы. Ә 1936 йылдың июнь айында Мәскәүҙә "Союзмультфильм" киностудияһы асыла һәм әллә нисә быуын балалар улар төшөргән йүнһүрәттәрҙе ҡарап үҫә.

Быйыл Башҡортостанда ла беренсе тулы метрлы анимацион башҡорт йәнһүрәте - "Төньяҡ амурҙары" донъя күрҙе. Башваткысыбыҙ ярҙамында уны иғтибар менән ҡаранығыҙмы-юҡмы икәнегеҙҙе һынағыҙ.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**40-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ильяс. Ҡомалаҡ. Кәбән. Ҡалас. Бәлеш. Көршәк. Мейес. Ҡалым. Йыуаса. Инҡар. Һум. Ыумас. Алыш. Атом. Текст. Әрмәк. Каа. Шөкәрә. Нәфсе. Бөйөрөк. Төкөрөк.

**Вертикаль буйынса:** Майикмәк. Ҡоймаҡ. Им. Спартак. Ҡаба. Шәрбәт. Скайп. Икмәк. Һемәк. Әҙ. Өкө. Бишбармаҡ. Кәҫ. Сиҡан. Күк. Ыштан. Ағыу. Ыҡ. Шәм. Әсетке.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 октябрь "Урал батыр"** Башҡорт халыҡ эпосы буйынса. 12+

**24 октябрь "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 16+

**25 октябрь "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш), комедия. 18.00 12+

**26 октябрь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**24 октябрь "Звезда Героя"** (Ф. Әхмәҙиев, О. Мусина), драма. 12+

**25 октябрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00 6+

**"Йәшәгән, ти..."** (М. Ладо), драмеди. 16+

**26 октябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 12.00 0+

**27 октябрь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 11.00 0+

**28 октябрь "Р"-һыҙ ҡалған Мырҙабай"** (З. Фәйзуллина), әкиәт. 11.00 0+

**29 октябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 12.00 0+

**"Мөхәббәт һәм нәфрәт"** (З. Биишева), музыкаль риүәйәт. 18.00 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**25 октябрь "Көтмәгәндә булған хәл"** (Э. Йәһүҙин), комедия. 16+

**27 октябрь "Йөрәк майым..."** (Б. Абдуразаков), мелодрама. 13.00, 19.00 16+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Фронтовичка"** (А. Батурина), драмаһы менән **23 октябрь** Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылында, **24 октябрь** Йылайыр ауылында, **25 октябрь** Әбйәлил районы Асҡар ауылында сәғәт киске 7-лә, **26 октябрь** Баймаҡ ҡалаһында сәғәт төшкө 2-лә гастролдәрҙә. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**26 октябрь Премьера! "Инсебикә"**, бейеү театры. 6+

**27 октябрь Премьера! "Гөлнара"** (Ф. Бүләков), драма. 12+

**28 октябрь "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 18.00 16+

**29 октябрь "Маленькая история о маленьком Муке"** (С. Астраханцев), әкиәт. 12.00 0+

**"Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Салихов), комедия. 18.00 16+

*АҢЛАТАБЫҘ*

# ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫНАН...

Балағыҙ тиҙҙән балалар баҡсаһына барамы? Һеҙ муниципаль йәки шәхси балалар баҡсаһын һайлай алаһығыҙ. Уны Әсәлек капиталы аҡсаһынан түләргә мөмкин. Иң мөһиме, ойошманың йәки шәхси эшҡыуарҙың белем биреү эшмәкәрлеге алып барыуға лицензияһы булырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта, бер балаға бирелгән Әсәлек капиталын икенсе баланың балалар баҡсаһына түләүгә тотонорға була. Мәҫәлән, һеҙҙең ике балағыҙ бар икән, яңы тыуған сабый өсөн сертификат алдығыҙ, ти. Әсәлек капиталы аҡсаһын өлкән балағыҙҙың балалар баҡсаһына йөрөүе өсөн ҡуллана алаһығыҙ. Шулай уҡ өҫтәмә түңәрәктәр һәм секциялар өсөн дә Әсәлек капиталы иҫәбенән түләргә мөмкин. Балалар баҡсаһына Әсәлек капиталы аҡсаһынан түләү өсөн "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында, Күп функциялы үҙәктә йәки Социаль фондтың клиент хеҙмәтендә ғариза ҡалдырығыҙ.

*Хөкүмәт - бәләкәй сабый кеүек: бер яғында - ныҡлы аппетит, икенсеһендә -сикһеҙ яуапһыҙлыҡ.*

*(Рональд Рейган).*



СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ЭСКЕСЕ ИР, УҪАЛ ҠӘЙНӘ...

**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры Зәһиҙә Мусинаның әҫәре буйынса "Килен" спектакленең премьераһын күрһәтте. Республиканың төп театры тамашасыларҙы 25 йәшлек автор менән таныштырҙы. Яҙыусы премьераға әсәһе менән килгәйне. Спектакль башланыр алдынан китап һатыу ойошторолдо, Зәһиҙә Мусинанан автограф алыу өсөн сират теҙелде.**

- Спектакль китапҡа ҡарағанда яҡшыраҡ. Беренсе булып әйтәм! Премьераға тиклем сәхнәлә нимә күрһәтерҙәрен белмәнем. Оло ҡәнәғәтләнеү алдым. Музыка, тәҫтәр, декорациялар, актерҙарҙың уйнауы - геройҙарымдың күнелен аҫтын-өҫкә килтерҙеләр һәм йөрәк төпкөлөндәге әрнеү-һыҙланыуҙарын күрһәттеләр. Мин ошо әҫәрҙе, геройҙарҙы икенсе яҡтан астым, - тип һөйләне "Башинформ"ға Зәһиҙә Мусина. - Әсәйем минең эргәмдә ултырҙы, уға күтәрелеп ҡарарға ла ҡурҡтым. Үҙендең тормошоңа ситтән ҡарауы нисек икәнен күҙ алдына ла килтерә алмайым. Ул да, күп тамашасылар кеүек, иланы... Спектаклдән һуң: "Мин үҙемде яныса күрҙем", - тине. Тимәк, әсәйем оҙаҡ йылдар үҙен ғазаплаған һәм тынғы бирмәгән уйҙарынан ҡотолорға әҙер. Был иһә күнел яраларын дауалауға юл.

"Килен" спектаклендә ҡыҫҡан социаль темаларҙың береһе - ғаиләлә йәберләү темаһы күтәрелә. Бында төп героиня - бәхетһеҙ әсә, ул уҫал ҡәйнә һәм эскесе ир баҫымы аҫтында йәшәй. Тәрлә һынауҙар аша үткәс кенә ул үҙендә кескәй балалары менән ғаиләһенән китергә көс таба.

Спектаклдә Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Эльвира Юнысова, Башҡортостандың халыҡ артисы Сара Буранбаева, Айһылыу Йомағолова, Лилиә Ғәлина, Морат Рафиҡов һәм башҡалар ҡатнаша. 3 ноябрҙә спектакль йәнә сәхнәгә сыға.

# БУДАПЕШТА БУЛДЫЛАР

**Будапешта (Венгрия) X Халыҡ-ара театр олимпиадаһында "Джут" спектакле ҙур уңыш менән барҙы. Ошондай күләмле мәҙәни сарала Рәсәйҙән Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры ғына сығыш яһаны. Тукһан биш ғариза араһынан тап Башҡорт театрының спектакле һайлап алынды.**



Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, спектаклде ҡаҙаҡ сығышлы Рәсәй драматургы Олжас Жанайдаровтың әҫәре буйынса режиссер Айрат Абушахманов сәхнәләштергәйне. Хәлваҡиғалар уҙған быуаттың 30-сы йылдары башындағы ҡот осҡос аслыҡ осоронда Ҡаҙағстанда бара. Уның премьераһы Өфөлә 2015 йылда булды.

- Джут" спектакле башҡортса барҙы, текст рус һәм венгр телдәренә тәржемә ителде. Венгрия тамашасылары спектаклде йылы ҡабул итте һәм актерҙарҙы алҡыштарға күмде, - тип хәбәр итте театрҙың матбуғат секретары Динара Ҡәйүмова. - Абруйлы театр форумында ҡатнашыу мөмкинлеге өсөн Башҡортостан Республикаһы етәкселегенә рәхмәт белдерәбеҙ! Спектаклдән һуң матбуғат конференцияһы уҙҙы, унда "Джут" спектакле тураһында фекер алыштылар, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының тарихы, республиканың мәҙәниәте һәм сәнғәте хаҡында һөйләнеләр. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев конференцияла ҡатнашыусыларға башҡорттарҙың венгрҙар менән тарихи тамырҙары булыуы тураһында бәйән итте. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Фәнис Рәхмәтов ҡурайҙа "Урал" көйөн уйнап ишеттерҙе. Театр директоры Иршат Фәйзуллин Венгрия милли театрының художество етәксеһе Атилла Виднянскийға Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡованың һәм Башҡорт драма театрының рәхмәт хаттарын тапшырҙы.

# ТАҒЫ БЕР БАҺА!

**"Тамыр" балалар-үсмерҙәр телеканалының "Сәңгелдәк" программаһы "ТЭФИ-KIDS" 2023 балалар, үсмерҙәр, ғаилә киноһы һәм телевидениеһы өлкәһендәге Рәсәй милли телевизион премияһы финалына сыҡты. "Балалар өсөн көндәлек мәғлүмәт-күңел асыу программаһы" номинацияһында "Сәңгелдәк" тапшырыуы менән "Карусель" каналының "Навигатор"ы һәм Екатеринбург каналының "Good games" программаһы ярыша.**

"Сәңгелдәк" - мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн тапшырыу 32 йыл инде көн һайын киске прайм-таймда эфирға сыға. Программа геройҙары кескәй тамашасыларҙың ҡатмарлы һорауҙарына еңел һәм күңелле итеп яуап бирә, балаларҙы әҙәпкә өйрәтә, башҡорт халҡының тарихы һәм мәҙәниәте менән таныштыра. Башҡортостан балалары белә: "Сәңгелдәк"тә һәр ваҡыт ҡыҙыҡ һәм күп мәғлүмәт бар. "ТЭФИ-KIDS" конкурсына һуғылған башҡорт балаҫы тураһында сығарылыш ебәрелгәйне. Йәш алып барыусылар тамашасыларға барыһын да - "һарыҡтан алып балаҫҡа тиклем" күрһәтә. Теманы сағыураҡ, тулыраҡ асыу өсөн сценарий авторы һәм мөхәррир Зөлфиә Даянова, режиссер Әлиә Минәзева сюжетты студияла ғына төшөрмәй, Дәүләкән районында йәшәгән халыҡ оҫтаһына ла барып ҡайта. Рәсәй милли телепремияһының быйылғы еңеүселәре 23 октябрҙә Мәскәүҙең "Et Cetera" театрында бүләкләү тантанаһында иғлан ителә.

- Тап "Сәңгелдәк"тең ошондай әһәмиәтле конкурстың финалына сығыуына бик шатбыҙ, - ти "Тамыр" балалар-үсмерҙәр телеканалы директоры Гөлназ Ҡолһарина. - "Сәңгелдәк" - "Тамыр"ҙың беренсе тапшырыуы. Өс тиҫтә йыл элек Луиза Фархшатова нигеҙ һалған телеканалыбыҙҙың нигеҙе.

# ОНОТОРЛОҠ ТҮГЕЛ...

**Башҡорт режиссеры Булат Йосопов балалар һәм йәштәр өсөн ысын хәл-ваҡиғаларға нигеҙләнгән "Фәрзәнә көнбайышҡа атлай" тигән хәрби-патриотик фильм төшөрөү эшенә тотондо. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Учалы үсмерҙәренең фашист илбаҫарҙарынан азат ителгән Украинаға 400 баш һыйырҙы ҡыуып алып барыуы тураһында буласаҡ фильм.**

Әле фильмға әҙерлек бара. Уны 2024 йылдың февраль-март айҙарында төшөрә башларға уйлайҙар. Сценарий авторы - драматург Баныу Ҡаһарманова, жанры - тулы метражлы нәфис тарихи фильм. Премьераны авторҙар 2025 йылдың 9 майына планлаштыра. "Был фильм илебеҙ өсөн һынылышлы йылдарҙа совет тылы темаһын асыуы менән үҙенсәлекле, картина геройҙары - балалар. Тырыш хеҙмәте менән Еңеүҙе яҡынайтҡандарҙың ҡаһарманлығына арнала", - тип хәбәр итте режиссер, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Булат Йосопов.

Фильмды А. Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы һәм "Йәнле таҫма" кинокомпанияһы менән берлектә төшөрәләр. Продюсерҙар Юнир Әминев, Леонид Филинов тамашасыларға ҙур өмөттәр бағлай. Проект командаһы кастингты ике турҙа уҙғарырға әҙерләнә, беренсеһе онлайн булыр тип көтөлә. Унда һәр кем ҡатнашырға мөмкин.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИЛДЕҢ КӨНӨ...

## ир менән

Ирҙе иртә ҡартайтҡан - насар ҡатын, ҡатынды иртә ҡартайтҡан - сей утын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Хөкүмәт - бәләкәй сабый кеүек: бер яғында - ныҡлы аппетит, икенсеһендә - сикһеҙ яуапһыҙлыҡ.

**(Рональд Рейган).**

Мөхәббәт ирҙе һуҡыр, ҡатынды осҡор күҙле итә.

**(Эрих Мария Ремарк).**

Бик аҙҙар ғына бөгөнгө көн менән йәшәй, күптәребеҙ аҙаҡтан йәшәргә әҙерләнә.

**(Джонатан Свифт).**

Кемебеҙ яфаланыуҙарын ҙурламай ҙа үҙен алдамай?

**(Сенека).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡыҙы атаһы янына килә лә зарын түгә башлай:**

**- Арыным мин, атай. Минең тормошом бик ауыр, мин һәр ваҡыт һыу ағымына ҡаршы йөҙәм, көсөм дә ҡалмай башланы инде... Артабан ни эшләргә миңә?**

**Атаһы яуап биреү урынына газ плитәһе эргәһенә килеп, һыулы өс кәстрүлде ҡайнатырға ҡуя. Бер кәстрүлгә кишер, икенсеһенә йомортҡа, өсөнсө кәстрүлгә кофе һала. Күпмелер ваҡыттан һуң ул бешкән кишерҙе һәм йомортҡаны һыуҙан ала, ә өсөнсө кәстрүлдәге кофены шәшкегә ҡоя. -Шунан, нимә үҙгәрҙе был әйберҙәрҙә? - тип һорай атаһы ҡыҙынан.**

**- Йомортҡа менән кишер беште, ә кофе һыуҙа ирене, - тип яуплай ҡыҙы. - Эйе, ҡыҙым, шулай. Ләкин был әле әйберҙәргә ҡарата өҫтә ятҡан ҡараш. Төпкәрәк төш һәм һин ҡаты кишерҙең ҡайнар һыу тәьҫирендә йомшаҡ һәм һығылмалыға, шыйыҡ йомортҡаның ҡатыға әйләнгәнен күрерһең. Тышҡы яҡтан улар үҙгәрмәне лә, бары тик ҡайнар һыу кеүек унайһыҙ шарттарҙа улар бер төрлө структураларын ғына үҙгәртте. Кешеләрҙә лә шул уҡ процесс бара: тыштан көслө булып күренгәндәр йомшарырға һәм көсһөҙ булып ҡалырға, ә көсһөҙ генәләр сығып, нығынып китергә мөмкиндәр...**

**- Ә кофенең ни ҡыҫылышы бар бында? - тип һорай ҡыҙы.**

**- Оо, быныһы инде иң ҡыҙығы! - ти атай кеше. - Кофе ошондай уңайһыҙ, ауыр мөхиттә ирене һәм шул мөхиттең үҙен үҙгәртте - ҡайнар һыу бынамын тигән хуш еҫле эсемлеккә әүерелде...**

**Был нимәгә ишара? Тормошта шундай кешеләр ҙә бар: улар тормоштоң ауыр һынауҙарын унан ыңғай һөҙөмтә алырлыҡ яңы һәм һоҡланғыс икенсе бер хәлгә үҙгәртә ала... Ә ниңә беҙгә уларҙан өлгө алмаҫҡа?"**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:** **Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Ләйсән ВӘЛИЕВА, Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 20 октябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы — **ПР905**

Тиражы - 3177
Заказ - 1441


«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.